ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

3-9 октябрь (карасай) 2025

№39 (1183)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Туған башҡорт телебеҙ...**

яҡлауғамы, әллә һаҡлауға мохтажмы?



4-5

**Һаны - егермесе, асылы - беренсе,**

йәки Башҡорт мәғарифында 55 йыл



8-10

**Табиплыҡҡа уҡып...**

үҙ ҡаламда эшкә ҡалам



12

**Ни өсөн Мауыҙҙы түгел,**

йәки Йәш журналисты борсоған һорауҙар



13

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

***Арзанға яҙылып ҡалығыҙ!* Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ, *1 октябрҙән 11-нә тиклемге* ун көнлөктә республиканың һәр ҡалаһында-ауылында ПР905 индекслы *"Киске Өфө"*гә 2026 йылдың беренсе яртыһы өсөн ташламалы хаҡ менән *905 һум 04 тингә* яҙыла алаһығыҙ. Ошо ун көнлөктә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер матур ғына китаптарға лайыҡ буласаҡ икәнен дә онотмағыҙ. Әйҙәгеҙ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## ТӨНДӘ ЙӨРӨМӘҺЕН



**1 октябрҙән Башҡортостанда балалар өсөн төнгө "комендант сәғәте" ҡышҡы ваҡытҡа күсә һәм ике сәғәткә оҙайтыла.**

Тимәк, бәлиғ булмағандарға киске сәғәт 10-дан иртәнге 6-ға тиклем атай-әсәйҙәренән башҡа урамда һәм йәмәғәт урындарында йөрөргә ярамай. Республика Дәүләт Йыйылышында белдереүҙәренсә, "комендант сәғәте" режимын боҙған өсөн 500-2000 һум штраф һалына. Сикләүҙәр "Башҡортостан Республикаһында бала хоҡуҡтарының төп гарантиялары тураһында"ғы закон менән билдәләнгән, тип асыҡлыҡ индерҙеләр Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышында.

ШУНДАЙ ВАҠИҒА

## САЛАУАТТЫ ХӘТЕРЛӘП...



**Йыл һайын 26 сентябрҙә республикабыҙҙа башҡорт халҡының милли геройы Салауат Юлаевтың Хәтер көнө билдәләнә. Был юлы батырҙың яндырылған тыуған ауылы Тәкәй урынында төҙөлгән "Салауат ере" тарихи-мәҙәни комплексында символик һәйкәл - кенотаф асыу тантанаһы үтте.**

Салауат районы хакимиәтендә белдереүҙәренсә, сара башҡорт халҡының милли батыры - патриот, яугир һәм шағирҙың вафатына 225 йыл тулыуға арналды. Тантанаға абруйлы ҡунаҡтар йыйылды, улар Салауат шәхесе, уның батырлығы, шиғырҙары тураһында һөйләне. Ата-бабалар ерендә Салауат ғүмеренең һуңғы йылдарын үткәргән Эстонияның Палдиски ҡалаһынан (элек Рогервик ҡәлғәһе) алынған тупраҡ менән капсула һалынды. Әлкә ауылы мәҙәниәт йортонда "Юҡ, мин үлмәнем, башҡорттарым!" тигән түңәрәк ҡор артында һөйләшеү ойошторолдо. "Ошо үлемһеҙ һүҙҙәр менән исемләнгән түңәрәк ҡор йәнә бер тапҡыр Салауаттың рухы тере икәнен иҫбатланы, - тип билдәләне сараны ойоштороусылар. - Данлы батыр тураһында иҫтәлек беҙҙең йөрәктәрҙә мәңге һаҡланыр".

АФАРИН!

## ТАҒЫ БЕР ЙОНДОҘ!



**Башҡортостандың, Рәсәйҙең спорт тарихында яңы йондоҙ балҡыны. Ул - 12 йәшендә генә муай-тай (тай боксы) көрәшендә юғары үрҙәргә өлгәшкән Өфө ҡыҙы Сәлимә Иҫәнғәлина.**

Ошо көндәрҙә Дубайҙа Тай боксы буйынса донъя беренселеге уҙҙы. Бөтә илдәрҙән төрлө йәш категорияһына ҡараған 1200 спортсы араһынан Башҡортостан ҡыҙы 12-13 йәшлектәр төркөмөндә абсолют еңеүсе - Донъя чемпионы исемен яуланы.

Сәлимәнең спорт үрҙәренә юлы дүрт йыл элек, бәләкәй ҡыҙ беренсе тапҡыр күнекмә залы тупһаһын аша атлап ингән мәлдән, башлана. Шул көндән алып ҡыҙҙың һәр көнө ныҡышмалы хеҙмәт һәм маҡсатҡа ынтылыш менән тулы. Интенсив күнекмәләр, ауырлыҡты ҡәтғи контролдә тотоу, алымдарҙы өйрәнеү һәм уларҙы идеаль күрһәткескә алып барып еткереү - былар барыһы ла уның тормошонон айырылғыһыҙ өлөшө булып тора. Әммә бер ниндәй ҡыйынлыҡтар ҙа йәш спортсының еңеүгә ынтылышлы рухын һындыра алмай һәм ул үҙенең маҡсаттарына алып барған юлдан тайпылмай.

**(Дауамы 4-сы биттә).**

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

## ТОҒРО ЮЛДАШ УЛ



**Хәҙерге заманда, цифрлы технологиялар тормошобоҙға көндән-көн ныҡыраҡ үтеп инә барған мәлдә, баҫма гәзит-журналдар мәҙәниәтебеҙ киңлегендә айырым урын тотоп ҡала килә. Улар араһында "Киске Өфө" гәзите айырым урын биләй.**

Туған телебеҙгә һәм мәҙәниәтебеҙгә оло иғтибар биргән, ихтирам тәрбиәләгән был баҫма миңә ныҡ оҡшай. Унын ошо үҙенсәлектәре ниндәйҙер ылыҡтырыу көсөнә эйә. Мин үҙем урыҫ телле йәмғиәттә үҫтем, өйҙә лә туған телдә генә һөйләшеү тигән ғәҙәт булманы, кем ниндәй телдә теләй - шулай һөйләште. Дуҫтарым менән дә урыҫ телендә аралаштыҡ, ғөмүмән, туған телемә ҡарата битарафлыҡ йәшәгән йәмғиәттә буй еткерҙем. Ләкин ошо моңһоҙлоҡ упҡынынан яңы дуҫым тартып сығарҙы - ул минең менән башҡорт телендә генә аралашты, башҡортса китаптар бирҙе, башҡорт телендәге гәзит-журналдарҙы күпләп алып килде. Улар араһында иң күңелемә ятҡаны "Киске Өфө" булды. Баҫманың һутлы теле, мәғәнәле, мәҙәниәтле мәҡәләләре мине туған мөхитемә ҡайтарыуҙа ҙур урын биләне.

**(Дауамы 4-се биттә).**

12+

ГЕРОЙҘАР ДӘҮЕРЕ

# ЯРҘАМДАН ТАШЛАМАЙБЫҘ

Радий Хәбиров Донбасс, Луганск, Запорожье һәм Херсон өлкәләре халҡын Рәсәйгә ҡушылыу көнө менән ҡотланы. Республикабыҙ һәр ваҡыт яңы территорияларға ярҙам итте һәм әле лә ошо миссияны үтәй, тип билдәләне Башҡортостан Башлығы. "Беҙҙең яугирҙар ҡорал тотоп, яңы төбәктәрҙең биләмәләрен нацистарҙан азат итә, тыныс халыҡты принципһыҙ дошмандан һаҡлай. Башҡортостандың һәр районында гуманитар ярҙам йыялар. Беҙ 200-ҙән ашыу объектты тергеҙҙек, был эште дауам итәбеҙ. Бөгөн беҙ дөйөм киләсәк тураһында уйлайбыҙ. Тәрлө өлкәләрҙә уртаҡ проекттар әҙерләйбеҙ һәм тормошҡа ашырабыҙ, сауҙа-иҡтисади хеҙмәттәшлектә, сәнәғәт кооперацияһын яйға һалабыҙ. Барыбыҙ ҙа еңеүҙе көтәбеҙ. Ул мөмкин тиклем тиҙерәк килһен өсөн барыһын да эшләйбеҙ", - тип яҙҙы Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә.

# АРТТЫРЫЛА...

Ошо аҙнала Дәүләт Думаһы депутаттары МХО яугирҙарына һәм уларҙың яҡындарына яңы ярҙам саралары индереүгә йүнәлтелгән бер нисә закон проектын ҡарарға йыйына. Был хаҡта ил парламентының матбуғат хеҙмәтендә хәбәр иттеләр. Дәүләт Думаһы рәйесе Вячеслав Володин билдәләүенсә, Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға ярҙам мәсьәләһе иң мөһимдәрҙең береһе булып ҡала. Әлеге ваҡытта 140 закон ҡабул ителгән. Мәҫәлән, бөгөн депутаттар өсөнсө уҡыуҙа Рәсәй Хеҙмәт кодексына һәм айырым закондар сығарыу акттарына СВО яугирҙарының хеҙмәт хоҡуҡтарын өҫтәмә яҡларға мөмкинлек биргән үҙгәрештәрҙе ҡарай. Ғәмәлдәге ҡануниәт буйынса, элекке урында эшләй башлау өсөн уларҙың өс ай ваҡыты бар - юғиһә, эш биреүсе хеҙмәт килешеүен өҙөргә хоҡуҡлы. Әммә ҡайһы берҙә һаулыҡты нығытыу, реабилитация үтеү өсөн күберәк ваҡыт талап ителә. Шуға күрә яңы закон проекты МХО яугирҙары менән хеҙмәт килешеүенең ғәмәлдә булыу ваҡытын уларҙың ваҡытлыса эшкә яраҡһыҙлыҡ осоронда оҙайтырға тәҡдим итә.

# РӘХМӘТ БЕЛДЕРЕЛДЕ

Өфөлә Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайҙың көҙгө сессияһының беренсе пленар ултырышы булып үтте. Республика етәксеһе әйтеүенсә, төбәк парламенты һәр ваҡыт Рәсәй Дәүләт Думаһына ҡарауға ҡабул ителгән закон сығарыу башланғыстары һаны буйынса лидерҙар иҫәбендә тора. "Һеҙ һәм һеҙгә тиклем эшләгән депутаттар тарафынан ныҡлы нигеҙ булдырылған, төп өлкәләрҙә мөһим закондар ҡабул ителгән. Был йүнәлеште дауам итергә кәрәк, - тип мөрәжәғәт итте Радий Хәбиров депутаттарға. - Бөгөн беҙҙең өсөн иң мөһиме - Махсус хәрби операция маҡсаттарына өлгәшеү. Яугирҙарыбыҙға һәм уларҙың ғаиләләренә ярҙам күрһәтеү. Был йәһәттән предприятиеларҙың хеҙмәт коллективтары, йәмәғәт ойошмалары вәкилдәре, эшҡыуарҙар һәм ябай кешеләр берҙәм булды". Билдәләнеүенсә, былтыр республика бюджетынан МХО-ла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаилә ағзаларына 54 ярҙам сараһын тормошҡа ашырыу өсөн 13 миллиард һум йүнәлтелгән, быйыл иһә - 25 миллиард һум. Башҡортостан подразделениеларына 161 гуманитар ылау ебәрелгән. Шул уҡ ваҡытта депутаттар был йүнәлештә ҙур эш башҡара, тип билдәләне Радий Хәбиров һәм республика халҡына рәхмәт белдерҙе.

РӘСМИ СЫҒАНАҠ

# БАЛАЛАРЫБЫҘ...

**Өфөнөң 11-се класс уҡыусыһы София Салангина климаттың үҙгәреүе һәм экология мәсьәләләре буйынса халыҡ-ара олимпиадала һоҡланғыс еңеү яуланы.**



Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров халыҡ-ара олимпиадала еңеү яулаған София Салангинаны рәхмәт хаты менән бүләкләне. Бүләкләү тантанаһы Хөкүмәттең аҙналыҡ оператив кәңәшмәһендә уҙҙы. "Софияның еңеүе - беҙҙең даими системалы эш һөҙөмтәһе ул. Уҡыусыларыбыҙ Бөтә Рәсәй һәм халыҡ-ара олимпиадаларҙа призлы урындар яулай башланы, - тип билдәләне Радий Хәбиров. Ул шулай уҡ ҡыҙҙың уҡытыусыларына, ата-әсәһенә рәхмәт белдерҙе һәм уға уҡыуында уңыштар теләне. 93-сө лицейҙың биология уҡытыусыһы Анна Вайн һәм Республика балалар экология-биология үҙәге директоры Екатерина Кошелева ла Башҡортостан Башлығы Хакимиәтенең рәхмәт хаттары менән бүләкләнде.

# КҮП КӨС ҺАЛЫНА

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республиканың йәш педагогтарына һәм балалар баҡсалары тәрбиәселәренә Башҡортостан Башлығы гранттарын тапшырҙы.**

Һәр гранттың суммаһы - 500 мең һум, был юлы уларҙы 50 йәш тәрбиәсе, педагог-психолог, уҡытыусы-логопед, уҡытыусы-дефектолог, музыкаль етәксе, физик культура буйынса инструкторҙар алды. Республика етәксеһе уларҙы конкурста лайыҡлы еңеүҙәре, шулай уҡ Тәрбиәселәр һәм мәктәпкәсә белем биреү хеҙмәткәрҙәре көнө менән ҡотланы.

Республика Башлығы һыҙҙаренсә, беҙҙең мәктәпкәсә белем биреү системаһы - илдә иң әрәләрҙең береһе. 959 балалар баҡсаһына 200 меңгә яҡын бала йөрөй. "Беҙ мәктәпкәсә белем биреүҙе үҫтереүгә күп көс һалабыҙ. Һуңғы йылдарҙа 8 мең урынлыҡ 50 балалар баҡсаһы төҙөлдө. Рәсәй Президенты ҡушыуы буйынса илдә балалар баҡсаларын капиталь ремонтлау һәм йыһазландырыу программаһы башланды", - тине Радий Хәбиров.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, республикала "Мәктәпкәсә белем биреү сертификаты" проекты тормошҡа ашырыла. 2025 йылда 1725 сертификат бирелгән. 2020 йылдан шәхси балалар баҡсаларында өс йәшкә тиклемге балалар өсөн 1500-ҙән ашыу өҫтәмә урын булдырылған.

# ҺАУА ЛИНИЯЛАРЫ

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Һауа транспорты федераль агентлығы етәксеһе Дмитрий Ядров менән осрашты.**

Көн тәртибендә - төбәктә аэродром инфраструктураһын яңыртыу, маршрут селтәрен киңәйтеү мәсьәләләре торҙо. Өфөнөң бөгөн эске авиалинияларҙа - 29, халыҡ-ара авиалинияларҙа 18 даими йүнәлеш буйынса авиарейстар ойошторолған. "2024 йыл йомғаҡтары буйынса, Мостай Кәрим исемендәге "Өфө" халыҡ-ара аэропорты 2 миллиондан 6 миллионға тиклем пассажирҙы хеҙмәтләндереп, "Рәсәйҙең һауа ҡапҡалары" престижлы премияһына лайыҡ булды", - тине Башҡортостан Башлығы.

"Төбәктә авиация сәнәғәтенә, пилотһыҙ авиация булдырыуға ҙур иғтибар бүленә, ә һеҙҙең аэропорт тотороҡло рәүештә пассажирҙарҙың юғары ағымын тәьмин итә. Аэродром инфраструктураһын яңыртыу 2030 йылға тиклем тамамланырға тейеш. Был аэропортҡа пассажирҙар ағымын 7,2 миллион кешегә тиклем арттырырға мөмкинлек бирәсәк", - тип билдәләне үҙ сиратында Росавиация етәксеһе. Осрашыуҙа ҡатнашыусылар шулай уҡ төбәктә бәләкәй авиацияны үҫтереү, атап әйткәндә, Рәсәйҙең дөйөм тәғәйенләнешле авиация федерацияһы майҙансығы һәм штаб-фатиры булған "Первушино" аэродромы мөмкинлектәрен тикшерҙе.

# ЭШЛЕКЛЕ ОСРАШЫУ

**"Һәр осрашыу һәм федераль министрҙың республикаға килеүе алға ынтылыш бирә". Рәсәйҙең граждандар оборонаһы эштәре, ғәҙәттән тыш хәлдәр һәм тәбиғәт афәттәре эҙемтәләрен бөтөрөү буйынса министры Александр Куренков менән осрашыу йомғаҡтарына ҡағылып, Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров шулай тип билдәләне.**

- Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы менән берлектә алып барылған эшмәкәрлек күрһәткестәре бик яҡшы, тип әйтергә мөмкин. Хәҙер янғындарҙа кешеләр аҙыраҡ һәләк була, һыу яҡлылыҡтарында батып үлеү, ғәҙәттән тыш хәлдәр һаны кәмей. Александр Вячеславович менән, әлбиттә, террор һөжүмдәре менән бәйле һуңғы ваҡиғаларҙы ла тикшерҙек. Әйткәндәй, йәлеп ителгән бөтә яңғын һүндереү хеҙмәттәре лә үҙ бурыстарын бик аныҡ, бик һөҙөмтәле һәм тиҙ башҡарҙы. Республика Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы хеҙмәттәренә матди һәм башҡа йәһәттәр буйынса даими ярҙам ителәсәк. Нимәләр төҙөлгән, тағы ниндәй әһәмиәтле проекттар өҫтөндә эш алып барыла - барыһы тураһында ла хәбәр иттем. Бер-беребеҙгә ярҙам итеү - һәр ваҡыт алға хәрәкәт итеү ул, - тине әңгәмә барышында Радий Хәбиров.

# ҠАРТТАР КҮБӘЙГӘН

**Башҡортостанда оло йәштәгеләр һаны 1 миллионға тиклем артҡан. Күп осраҡта был уртаса ғүмер оҙайлығының артыуы, шулай уҡ төбәктә гериатрия хеҙмәтенең үҫеше менән бәйле.**

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, республика Рәсәйҙең гериатрия кабинеттарын ойоштороу буйынса пилот проектында ҡатнашыусы ете төбәк иҫәбенә инә. Амбулатор ярҙам 48 гериатрия поликлиникаһы кабинетында, стационар ярҙам 205 геронтологик койкала күрһәтелә. Шулай уҡ оло йәштәге пациенттар Һуғыш ветерандары госпитале базаһындағы Республика гериатрия үҙәгендә дауалана. Хөкүмәттәге кәңәшмәлә Премьер-министр Андрей Назаров хәбәр итеүенсә, былтыр Башҡортостан халҡы 65 мең дән ашыу тапҡыр табип-гериатрҙарға мөрәжәғәт иткән: 808 мең оло йәштәге кеше медицина күҙәтеүе аҫтында, шул иҫәптән өйҙә 102 меңгә яҡын кеше. Был проекттың һөҙөмтәһе булып оло йәштәгеләрҙе стационарға һалыуҙы кәметеү, шулай уҡ оло йәштәгеләр араһында үлем күрһәткестәрен кәметеү торорға тейеш, тип билдәләне республиканың һаулыҡ һаҡлау министры Айрат Рәхмәтуллин.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостанда синоптиктар киләһе ҡышҡа фаразларын әйтте. Бындай фараздар 63-81 процентҡа ғына дөрөҫкә сыға, тип иҫкәртте улар. Киләһе ярты йылда илдең күпселек биләмәһендә температураның 1991-2020 йылдарҙағы уртаса күп йыллыҡ күрһәткестәргә яҡын һәм юғарыраҡ булыуы көтөлә, тип хәбәр итте Гидрометеорология һәм тирә-яҡ мөхитте күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәт. Былтырғы ҡыш менән сағыштырғанда, күпселек төбәктәрҙә һалҡынлыраҡ булмаҡсы. Хәүефле метеорологик күренештәр өсөн шарттар тыуҙырған "температура тирбәлеүҙәре" көтөлә. Башҡортостанда октябрҙән ғинуарға тиклемге осор - нормаға яҡын, февраль һәм март нормаһынан юғарыраҡ булыр тип фаразлана.

✓Башҡортостанда кадрҙар сәйәсәтен нығытыуға ҙур иғтибар бүленә. Республика Дәүләт Йыйылышы көҙгө сессияһының беренсе пленар ултырышында Радий Хәбиров ошо турала белдерҙе. Республикала Махсус хәрби операция ветерандары араһынан квалификациялы идарасылар әҙерләнә, тип билдәләне ул. Фронттан ҡайтҡан хәрби хеҙмәткәрҙәр муниципаль идаралыҡ өлкәһендә эшләй. "Уларҙың өсөһө ауыл советтары башлыҡтары, 50-һе муниципаль депутаттар итеп һайланды", - тине Радий Хәбиров.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров XXXV Халыҡ-ара Аксаков байрамы айҡанлы Бәләбәй районының Надеждино ауылында үткән сарала ҡатнашты һәм Сергей Аксаковтың һәйкәленә сәскәләр һалды. Скульптура 2010 йылда ҡуйылған, авторы - белорус скульпторы, Беларусь Республикаһының халыҡ яҙыусыһы Иван Миско. Радий Хәбиров шулай уҡ Аксаков тарихи-мәҙәни үҙәгенә ингән тарих һәм архитектура һәйкәле - 1799 йылда дворян Куроедовтар аҡсаһына төҙөлгән Дмитрий Солунский ҡорамына булды. Бина тарихи мираҫ объекты булып тора һәм унда хәҙер йорт-музей эшләй.

✓Владимир Путин 1 октябрҙән көҙгө саҡырылыш тураһында указға ҡул ҡуйҙы. Рәсәйҙә көҙгө саҡырылыш кампанияһы барышында 135 мең егетте хәрби хеҙмәткә саҡырыу планлаштырыла. "2025 йылдың 1 октябренән 31 декабренә тиклем Рәсәй Федерацияһының 18-30 йәшлек граждандарын хәрби хеҙмәткә саҡырырға", - тиелә указда. Документҡа ярашлы, 135 мең кешене саҡырыу планлаштырыла. Бынан тыш, ошо уҡ указ менән хәрби хеҙмәтен тултырған һалдаттар демобилизациялана.

✓Башҡортостанда шәкәр сөгөлдөрөнөң уртаса уңышы гектарынан 480 центнерҙан артып китә, тип хәбәр иттеләр республиканың Ауыл хужалығы министрлығынан. Әлеге ваҡытҡа 20 мең гектар майҙанда шәкәр сөгөлдөрө йыйып алынған, был иһә бөтә күләмдең 46 проценты тиерлек. 965 мең тонна тамыраҙыҡ ҡаҙып алынған.

РӘСМИ СЫҒАНАҠ

# ХАЛЫҠ ЗАРЫН ИШЕТӘЛӘРМЕ?

**Өфө транспорт прокуроры Павел Шушляев "Башинформ" мәғлүмәт агентлығы журналисы менән республикала транспорт надзоры мәсьәләләре тураһында әңгәмәләште.**

"Башҡортостандың һәм Силәбе өлкәһенең бер өлөшөнә ҡараған һыу, һауа һәм тимер юл транспорты беҙҙең даими күҙәтеү аҫтында", - тине Павел Шушляев. Унның билдәләүенсә, транспорт саралары файҙаланыу хәүефһеҙлеге, пассажирҙарҙың хоҡуҡтарын яҡлау һәм йөк ташыу сифатын тәьмин итеү транспорт прокуратураһы эшенең төп йүнәлештәре булып тора. Транспорт объекттарында граждандарҙың хәүефһеҙлегенә, тармаҡ хеҙмәткәрҙәренең хеҙмәт хоҡуҡтарын үтәүгә һәм эшҡыуарҙарҙың мәнфәғәттәрен яҡлауға ла тейешле иғтибар бүленә. Транспорт прокуратураһы торлаҡ-коммуналь хужалыҡ өлкәһендә ҡануниәтте үтәү мәсьәләләре буйынса тикшереүҙәр үткәрә, самолеттарҙы ремонтлау һәм техник хеҙмәтләндереү менән шөғөлләнгән предприятиеларҙы тикшерә, тимер юл аша сығыу урындарын тотоу проблемаһына айырым иғтибар бүлә. Асыҡланыуынса, былтыр граждандар тармаҡ прокуратураһына авиация һәм тимер юл транспорты, һирәгерәк һыу транспорты менән бәйле һорауҙар менән йышыраҡ мөрәжәғәт иткән. Пассажирҙарҙы рейстарҙың тотҡарланыуы, билет хаҡының кире ҡайтарылыу-ҡайтарылмауы, төрлө компенсация проблемалары борсоған.

Йылға транспортына ҡағылып, Павел Шушляев Башҡортостанда шәхси ҡарамаҡта 19 меңдән ашыу бәләкәй судно булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды. Йылға таксиҙарының, йәғни йылға буйлап йөрөү буйынса хеҙмәттәр күрһәтеү эшмәкәрлеген прокуратураның даими контроль аҫтында тотоуын билдәләне.

# БЫУАТТАН АШЫУ КӨРӘШӘ

**Республика клиник инфекция дауаханаһы үҙенең 115 йыллығын билдәләне. Быуаттан ашыу учреждение инфекция ауырыуҙарҙың бөтә төрөн дауалау һәм диагностикалау менән шөғөлләнә.**

Өфөлә клиник инфекция дауаханаһы 1910 йылдың 1 сентябрендә ваба (холера) һәм тиф менән сирләүселәрҙең артыуы менән бәйле ойошторола. 1923 йылда дауахана 4-се инфекция дауаханаһы исемен ала, ә 2020 йылда Республика клиник инфекция дауаханаһы тип үҙгәртелә. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында учреждение госпиталь функцияларын үтәй. Бөгөн унын составында 2 филиал эшләй - Өфө районының Зубово ауылында һәм Стәрлетамаҡ ҡалаһында. Республика клиник дауаханаһы Өфө һәм республика халҡына төрлө йоғошло ауырыуҙар менән көрәштә махсуслаштырылған медицина ярҙамы күрһәтә, 284 төр тикшеренеүҙәр башҡара.

- COVID-19 пандемияһы ваҡытында дауахана коллективы ғәҙәттән тыш хәл шарттарында юғары профессионализм, фиҙакәрлек һәм эшкә әҙерлек кимәлен күрһәтте. Дауахананың үткәне - ул өҙлөкһөҙ үсеш, камиллыҡҡа ынтылыш һәм үҙ эшенә тоғро хеҙмәт итеү тарихы ла, - тип билдәләне юбилей тантанаһында сығыш яһап, республика Хөкүмәтенең беренсе вице-премьеры Урал Килсенбаев.

ҺАҠ БУЛЫҒЫҘ!

# ҒҮМЕРҘӘР ӨҘӨЛӘ



**Башҡортостан буйынса Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, уҙған аҙнала Башҡортостанда 174 янғын осрағы теркәлгән.**

Шул иҫәптән 99-ы - ут менән һаҡһыҙ эш итеү арҡаһында, 17 янғын дөрөҫ булмаған ҡоролма һәм мейестәр арҡаһында сыға, 41 осраҡта янғындың сәбәбе - электр ҡорамалдарын ҡороу һәм файҙаланыу ҡағиҙәләрен боҙоу. Биш кешенең ғүмерен ҡыйған янғындар Ишембай районының Кинйәбулат ауылында, Сибай һәм Салауат ҡалаларында булған.

Йыл башынан 5857 янғын теркәлгән. Уларҙа 153 кеше, шул иҫәптән 12 бала һәләк булған, 137 кеше тән йәрәхәттәре алған.

"Һыуыҡтар башланыу менән йылытыу приборҙарына көс төшә. Янғындан һаҡланыу өсөн электр йылылыҡ приборҙарын файҙаланғанда, йорттарҙы мейес һәм газ менән йылытҡанда хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен үтәү мөһим. Электр селтәренә артыҡ көсөргәнеш бирергә ярамай, йоҡлар алдынан электр приборҙарын һүндерегеҙ. Мейестәрҙе һәм уларҙың торбаларын даими таҙартыу янғындарҙы булдырмаҫҡа ярҙам итә. Янып торған мейестәрҙе ҡарауһыҙ ҡалдырмағыҙ һәм утынды тоҡандырыу өсөн тиҙ яна торған шыйыҡ ягыулыҡ ҡулланмағыҙ", - тип иҫкәртә ведомство белгестәре.

### Һәм тағы...

● Өфөлә "Арт Галерея" сауҙа-күңел асыу комплексында ут сыҡҡан. Кино сеанстары туҡтатыла, төтөн тойолған урындарҙан кешеләр эвакуациялана. БР буйынса Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығында аңлатыуҙарынса, кисҡен хәл ресторанда булған. Баҡтиһәң, ресторанда мангал янған, төтөндән янғын сигнализацияһы эшләй. Ресторан хеҙмәткәрҙәре янғын һүндереүселәр килгәнгә тиклем утты үҙҙәре һүндерә. Зыян күреүселәр юҡ. Бинанан 250 кеше эвакуациялана.

● Башҡортостандың Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитетынан хәбәр итеүҙәренсә, Стәрлебаш районының Раевка ауылы янында ҡоро үлән янып китә. Бәхеткә күрә, тәбиғи янғын тиҙ һүндерелә. Үткән аҙнала ла ведомствонан Йылайыр районының Иван-Ҡыуалат ауылы янында урман янғыны теркәлеүе тураһында ла хәбәр иттеләр.

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

# ЗАМАН ҮҘЕНСӘ ҺАНАЙ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**

- Эйе, дөрөҫ, һәр заманда, хатта иң ҡатмарлы, ауыр осорҙарҙа ла, ил-йорттоң иң ышаныслы терәге - зыялы кешеләр булған. Улар - үҙ халҡының йөрәк теле, төшөнкөлөккә бирелмәҫкә саҡырыусы, һынылышлы мәлдә юл күрһәтеүсе маяҡ ролен үтәгән, халыҡты бергә туплаған, уларҙың аңын асҡан, күңелдәренә өмөт уятҡан.

Бөгөн дә заман үҙенсә һынай, тормош үҙгәрә, төрлө ауырлыҡтар өҫтәлә. Эшһеҙлек, социаль көрсәк, рухи ҡаҡшау - быларҙың барыһын да еңеп сығыр өсөн халҡымды башҡаса илһамландырыр, алға әйҙәр һүҙ кәрәк. Зыялы замандаштарҙың бөгөнгө бурысы - халыҡ араһына барып, уларҙы тыңлап, күңел түренән сыҡҡан изге һүҙ менән рухландырыу, киләсәккә өмөт уятыу. Тик бөгөнгө мәғлүмәт упҡыны бик ҙур. Ниндәй генә сайт, ниндәй генә социаль селтәрҙәр юҡ бөгөн. Йәш быуын ғына түгел, ә төрлө заман һынауын күргән, беҙҙең кеүек хеҙмәттә сыныҡҡан кешеләр ҙә ышанырлыҡ итеп яҙалар бит интернетта. Баҫылған һүҙгә ышанғанға шулай ул. Һәм шулай уҡ идеология булмауы ла башты бутай. Кемгә ышанырға белмәгәндәргә минең әйтер һүҙем шундай булыр: һәр дәүерҙә лә халҡыбыҙҙы алға әйҙәгән төп сифаттар - сабырлыҡ һәм аҡыл булған. Сабыр кешегә тормош һынауы ла, ауырлыҡтар ҙа еңелерәк күренә - ул шау-шыуға көс әрәм итмәй, уйлана, тыныс ҡына дөрөҫ ҡарар ҡабул итә. Аҡыллы кешеләр генә хата юлын күреп, сәбәптәрен аңлап, йәшәйештең мәғәнәһен уйлай ала.

Бөгөнгө көндә һәр беребеҙ илдә барған ваҡиғаларға битараф ҡалмаһын ине. Ил яҙмышы, киләсәк быуындарҙың тормошо беҙҙең ҡулда. Беҙҙең фекер, беҙҙең эш, беҙҙең мөсьәләләргә ҡарата мөнәсәбәт илде үҙгәртә. Ватанға битарафлыҡ - тамырыбыҙға битарафлыҡ, тигән һүҙҙәр ҙә юҡҡа ғына әйтелмәгән. Һәр ваҡыт үҙебеҙҙең кесе Ватаныбыҙ өсөн дә, бөтә илебеҙ өсөн дә иҫәнлек һәм үҫеш теләйек! Үҫеш иһә беҙҙең үҙебеҙҙән башлана: сәләмәт йәшәү рәүеше, балаларыбыҙға белем биреү, тирә-яҡ мөхитте һаҡлау, күршеләргә ярҙам итеү кеүек ябай эштәрҙән ғибрәт ул. Һәр ҡарар, һәр һүҙ, һәр аҙым илден, йәмғиәттең уртаҡ яҙмышына, киләсәгебеҙгә йоғонто яһай.

Һәр кем үҙ өлөшөн индереп, үҙе урынында файҙа килтерһә, илебеҙ сәскә атыр, киләсәк быуындар беҙҙең менән ғорурланыр! Сабыр булайыҡ, аҡыллы һәм изге күңелле булайыҡ, ил яҙмышына берҙәм өлөш индерәйек! Тағы ла ошо ҡасандыр беренсе уҡытыусым, атайым әйткән һүҙҙәрҙе ҡабатлар инем:

- Ауырлыҡҡа зарланма, һынма, замандаш.
- Берҙәмлек - ҙур көс, киҫкен мәсьәләләрҙе бергәләп хәл итеү еңелерәк.
- Аң-белемгә ынтыл, үҙеңде үҫтер, балаларыңа юл күрһәт.
- Тарихыңды иҫкә төшөр, ата-бабалар рухын ҡәҙерлә - уларҙың һынауҙарҙы еңеү сәме хәҙер ҙә беҙҙең йөрәктә.
- Ҡайғы-хәсрәттәрҙән ҡотолоу юлы тик яҡшылыҡта, өмөттә, бер-береңә терәк булыуҙа, изгелектә.

Ни өсөн тигәндә, бөгөн беҙгә саф аҡыл, зирәклек, үткәндән сабырлыҡ, киләсәккә ышаныс кәрәк. Халҡыбыҙ берҙәм, көслө, аҡыллы булып йәшәһен, һәр заманда күңелдәрҙә яҡты нур балҡыһын!

**Йәғәфәр АЙҘАРОВ.**

# Н И М Ә ?  Ҡ А Й Ҙ А ?  Ҡ А С А Н ?

✔ Башҡортостан буйынса баш федераль инспектор Алексей Касьянов отставкаға сыҡты. Республика Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһендә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров уны күп йыллыҡ емешле дәүләт эшмәкәрлеге өсөн Халыҡтар дуҫлығы ордены менән бүләкләне. "Мин гүзәл республикабыҙҙа тыуып үҫтем һәм төрлө вазифаларҙа эшләгән саҡта һәр ваҡыт хеҙмәтем республика менән бәйле булды", - тине Алексей Касьянов һәм хеҙмәтен баһалағандары өсөн рәхмәт белдерҙе.

✔ Рәсәй Хөкүмәте 2026 йылда минималь эш хаҡы күләмен 20 проценттан ашыуыраҡҡа арттырырға планлаштыра. Тәҡдим ителгән үҙгәрештәргә ярашлы, 2026 йылдың 1 ғинуарынан минималь хеҙмәт хаҡы күләме (МРОТ) 27 мең 93 һум була. Был ҡарар 4,5 миллион кешегә эш хаҡын арттырырға мөмкинлек бирә. "Президент МРОТ-тың йәшәү минимумынан күберәк булыуын әйткәйне. Бындай индексацияны дауам итәбеҙ. Халыҡтың килемен арттырыу мәсьәләләре Хөкүмәтең даими иғтибары үҙәгендә тора", - тип билдәләне премьер Михаил Мишустин.

✔ Башҡортостанда республика Дәүләт хеҙмәттәре порталында МХО-ла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаилә ағзаларына 50-нән ашыу ярҙам сараһы тупланған. Был турала республика етәксеһе Радий Хәбиров МАХ каналында хәбәр итте. "Ҡайһы бер осраҡтарҙа ғаризаны шунда уҡ, электрон төрҙә бирергә мөмкин. Башҡаларында иһә ҡайҙа һәм ниндәй белешмәләр менән мөрәжәғәт итергә кәрәклеге ентекле яҙылған. Порталда үҙеңдең тәҡдимдәреңде һәм теләктәреңде яҙып ҡалдырырға мөмкин", - тип билдәләне Башҡортостан Башлығы.

✔ Башҡортостан уҡытыусылары һәм уҡыусылары "Дәүләт хеҙмәттәре. Минең мәктәбем" ҡушымтаһында урынлаштырылған онлайн-китапхананан файҙалана ала. "Белем биреү процесын ойоштороу өсөн ҡушымтаның функционалы киңәйтелә һәм уҡыусылар, уҡытыусылар өсөн яңы мөмкинлектәр булдырыла. "Минең мәктәбем" ҡушымтаһы нигеҙендә төҙөлгән китапхана Рәсәй Мәғариф министрлығының федераль эш программаһына тап килә. Баҫылып сыҡҡан материалдарҙың бушлай булыуы бик мөһим", - ти Башҡортостан дәүләт идаралығының һанлы үҫеш министры Геннадий Разумикин.

✔ Башҡортостандың мәғариф министры Илдар Мәүлетбирҙин хәбәр итеүенсә, Новосибирскиҙа үткән өҫтәмә белем биреү өлкәһе хеҙмәткәрҙәренең "Йөрәгемде балаларға бирәм" Бөтә Рәсәй һөнәри конкурсы призерҙары иҫәбенә республиканан ике педагог ингән. В.М. Комаров исемендәге Өфө балалар ижады һарайы педагогы Елизавета Боровикова бер номинацияла - 2-се, Өфөнөң "Эколог" экология-биология үҙәге педагогы Эльвина Камалова икенсе бер номинацияла 3-сө дәрәжә диплом менән бүләкләнгән.

✓ *Әйтергә теләгәнем: туған телебеҙҙе һаҡларға кәрәкме? Һаҡларға кәрәк икән, нисек, ниндәй юлдар менән һаҡларға? Бәлки, яҡларғалыр? Яҡларға кәрәк икән, кемдән яҡларға, кем ул беҙҙең туған телебеҙҙең дошманы?*



АФАРИН!



# ТАҒЫ БЕР ЙОНДОҘ!

**(Башы 1-се биттә).**

Сәлимәнең спорт ҡаҙаныштары бик күп наградалар менән билдәләнгән: Берләшмәләр Кубогында (Кубок Содружества), Волга буйы федераль округы беренселегендә, Рәсәй беренселегендә еңеүҙәр һәм башҡалар. Әммә уның төп хыялы һәр ваҡыт донъя кимәленә сығыу була һәм ул бына тормошҡа ашты.

Былтыр Таиландта уҙған Донъя беренселегендә өсөнсө урын яулағандан һуң, Сәлимә, атаһына шылтыратып: "Киләһе йыл еңеү мотлаҡ минеке буласаҡ", - тип белдерә һәм үҙ һүҙендә тора. Бер йыл буйына ныҡышмалы күнекмәләр, хаталар өҫтөндә эшләй һәм бына ул - почет пъедесталында. 12 йәшкә тиклемге йәш категорияһында ярышыусылар тик аяҡ һәм тәнгә генә һуға ала, ә 12 йәштәре тулған спортсылар өсөн муай-тай ҡағиҙәләре бермә-бер ҡатылана. Ләкин был йәш спортсыға бары тик сәм өҫтәй, дәғүәселәренең дә етдирәк булыуы саялыҡ бирә. Хәҙер уның маҡсаты - спорт мастерлығына кандидат һәм спорт мастеры исемдәренә эйә булыу. Тырыш ҡыҙҙың быға өлгәшеүенә шик юҡ.

Сәлимә спортта ғына ҙур ҡаҙаныштар яулап ҡалмай, ә уҡыуҙа ла һынатмай. Ярыштарға йөрөү һөҙөмтәһендә дәрестәрен ҡалдырырға тура килһә лә, уның көндәлеген тик "дүртле" һәм "бишле" билдәләр генә биҙәй.

Сәлимәнең ата-әсәһе, Илнур Фидаил улы һәм Альбина Камил ҡыҙы - уның ышаныслы терәге. Ҡыҙҙарының физик, рухи үҫешенә ҙур көс һалыуҙары уның шәхес булып формалашыуында сағыла. Шулай уҡ спортсының уныштарында йәш чемпиондың тренеры Василий Геннадьевич Тимофеев айырым роль уйнай. Ул алыш техникаһын ғына өйрәтеп ҡалмай, ә характер тәрбиәләй, рухи көс бирә, үҙенең тәрбиәләнеүсеһен еңеүгә илтеүсе юлдан алып бара.

Ҡыҙҙың әсәһе Альбина Камил ҡыҙы ярыштарға барыуҙа финанс ярҙам күрһәткән һәр кемгә гәзит аша ҙур рәхмәт һүҙҙәрен еткерә: "Һәр ярышҡа үҙ иҫәбебеҙгә ебәрәбеҙ. Дубайға барыу өсөн 250 мең һум аҡса кәрәк ине. Туғандар, дуҫтар, хатта бөтөнләй таныш булмаған кешеләр ҙә тиҙ арала аҡса йыйырға ярҙам итте, ҡыҙыбыҙҙың ошондай әһәмиәтле ярышҡа барып, еңеү яулауына үҙҙәренең өлөшөн индерҙе. Уларға иң изге теләктәребеҙҙе еткерәбеҙ", - ти ул.

Шулай итеп, башҡорт ҡыҙы Сәлимә Иҫәнғәлина - ныҡышмалылыҡтың, эшһөйәрлектең, маҡсатлы булыуҙың, рухи көстөң, талантның ҙур еңеүҙәргә алып барыуының асыҡ миҫалы. Спортҡа яңы ғына аяҡ баҫҡандарҙы илһамландырыусы, спорт олимпы тураһында хыялланыусылар өсөн сағыу өлгө булып тора. Алға, йәш спортсы!

**Гөлназ МАНАПОВА.**

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ...

# ТУҒАН БАШҠОРТ ТЕЛЕБЕҘ...

## яҡлауғамы, әллә һаҡлауға мохтажмы?



**Арыуыҡ таныштарым менән әңгәмәләшеп, элекке уҡыусыларым, коллегаларым менән кәңәшләшеп, бөгөнгө көндә балалары мәктәптә уҡып йөрөгән ата- әсәләр менән һөйләшеп, үҙемде борсоған ошо һорауҙарға яуап эҙләй торғас, гәзит уҡыусыларға ла ошо уҡ һорау менән мөрәжәғәт итмәксе булдым, хөрмәтле милләттәштәр!**

Әңгәмәселәремдән төрлөсә яуаптар алдым. "Туған телебеҙҙе, һис шикһеҙ, яҡларға! Юҡ, һаҡларға!" - тиҙәр барыһы ла бер тауыштан. "Тукта! - ти зиһенем. - Кемдән яҡларға? Ҡайҙан, ҡайһы яҡтан, кемдән ҡурҡыныс янай? Үҙемә ҡалһа, рәхәтләнеп туғандарым, балаларым менән үҙ телемдә һөйләшә алам, яҙыша алам, милли әҙәбиәтебеҙҙе, гәзит-журналдарыбыҙҙы уҡый алам бит! Кем һөжүм итә? Яҡлау өсөн күҙгә күренеп торған йәки аҫтыртын һөжүм иткән дошмандың булырға тейеш бит..."

Йомаҡ формаһында башланым был мәҡәләмде. Хәйер, "Киске Өфө" гәзитен даими уҡып барыусыларға мәҡәләләремдең темалары ғына түгел, яҙыу стиле лә таныштыр - үҙемде борсоған һорауҙарға яуап эҙләгәндә мәҡәләмде лә һорау һөйләм менән башлап, гәзит уҡыусыларҙан ғәҙел яуап көтөргә ғәҙәтләнгәнмен. "Замана беҙгә бәйлеме, әллә беҙ - заманаға?", "Атта бар, ә тәртәләсе?", "Башҡорт булыу өсөн күп кәрәкме йәки кем ул ысын башҡорт?"

Оҙаҡ йылдар мәктәптә эшләгән уҡытыусы булараҡ, туған телебеҙ яҙмышы менән бер рәттән, халҡыбыҙҙың әҙәп-әхлағы ла борсоп, тынғылыҡ бирмәй китә шул ҡайсаҡ. Күп ваҡытта, "Заман башҡа - заң башҡа" тип, үҙебеҙҙең битарафлыҡты, вайымһыҙлыҡты заманаға япһарып, бик тә булмаһа, етәкселәрҙән ғәйеп эҙләп, үҙебеҙ сафтан-саф, пактан-пак булмаҡсыбыҙ ҙа бит...

Әйтергә теләгәнем: туған телебеҙҙе һаҡларға кәрәкме? Һаҡларға кәрәк икән, нисек, ниндәй юлдар менән һаҡларға? Бәлки, яҡларғалыр? Яҡларға кәрәк икән, кемдән яҡларға, кем ул беҙҙең туған телебеҙҙең дошманы? Ошо һорауҙарға яуапты ҡайҙан һәм нисек табырға?..

Юғарыла әйткәнемсә, әңгәмәселәрем күп һәм төрлө һөнәр эйәләре булды. Уларҙың фекерҙәре лә төрлө. Бына береһен тыңлайыҡ: "Дәүләтебеҙҙә урыҫ теле шул тиклем көслө

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# ТОҒРО ЮЛДАШ УЛ

**(Башы 1-се биттә).**



Гәзиттә мин башҡорт теле донъяһына сумыу менән бер рәттән, халҡымдың йолалары һәм ғөрөф-ғәҙәттәре менән танышыу мөмкинлеген табам. Һәр бит - ул быуындар бәйләнешен һаҡлап ҡалырға ярҙам иткән, үткән менән бөгөнгөнө тоташтырған күпер. Гәзитте уҡығанда мин үҙемде милли үҙенсәлекте һаҡлап ҡалыу тураһында оло хәстәрлек күргән ҙур берләшмәнең бер өлөшө итеп тоям.

Материалдарҙың төрлөлөгө гәзитте уҡыуҙы мауыҡтырғыс шөғөлгә әйләндерә. Бында бөтә нәмәне лә табырға мөмкин: төбәк яңылыҡтарынан алып ҡыҙыҡлы тарихи мәҡәләләргә, әҙәби әҫәрҙәрҙән алып хужалыҡ алып барыу буйынса кәңәштәргә тиклем. Айырыуса гәзиттең ауыл халҡы проблемаларына иғтибар бүлеүе, фермерҙар һәм ауыл эшсәндәренең уңыштары тураһында һөйләүе ҡиммәтле. "Киске Өфө"лә баҫылған мәҡәләләрҙә социаль мәсьәләләргә ҙур урын бирелеүе ихтирамға лайыҡ. Гәзит төбәк үҫешенең мөһим мәсьәләләрен күтәрә, хеҙмәт кешеләре тураһында һөйләй, мәҙәни ваҡиғаларҙы яҡтырта.

Материалды гәзит уҡыусыға еткереүҙең үҙенсәлекле стиле был гәзитте башҡа баҫмаларҙан айыра. Бында заманса журналистика һәм традицион ҡиммәттәр берләшә һәм был үҙенсәлекле колорит тыуҙыра. Мәҡәләләр төрлө ҡатлам аудиторияның үҙенсәлектәрен, талаптарын иҫәпкә алып, тере телдә яҙыла.

Ғөмүмән, "Киске Өфө" гәзитенең һәр һанында үҙем өсөн яңы һәм ҡыҙыҡлы мәғлүмәт табам. Баҫма һәр кемгә үҙенең тамырҙары менән бәйләнештә һаҡларға, рухи һәм интеллектуаль яҡтан үҫешергә ярҙам иткән тоғро юлдаш булып ҡала килә.

**Рөстәм ӘМИНЕВ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанда 1 октябрҙән 31-нә тиклем граждандар оборонаһы айлығы үтә. Бер ай һуҙымында төбәк биләмәһендә граждандар оборонаһын ойоштороуға һәм алып барыуға берҙәм ҡараш булдырыу, уның йәмғиәттә ролен күтәреү буйынса саралар уҙғарыла. Ведомстволар һәм муниципалитеттарға үҙҙәре ҡабул иткән айлыҡ планға ярашлы республиканың Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитетына аҙна һайын үткәрелгән саралар тураһында отчет биреү бурысы ҡуйылған.

✓Башҡортостанда өҫтөнлөклө 4 инвестиция проектын ғәмәлләштереү өсөн ер участкалары сауҙа үткәрмәйенсә ҡуртымға бирелә. Шул рәүешле республикала 1,2 миллиард һумға яҡын суммаға торошло яңы туристик объекттар һәм юл буйы комплексы барлыҡҡа киләсәк. Төбәк Хөкүмәте ярҙамы менән Белорет районында ҙур туристик проекты тормошҡа ашырыу ҡарала. Инвестор Ассы ауылында ял базаһын төҙөүгә 620 миллион һумдан ашыу аҡса һалырға ниәтләй.

✓Башҡортостандың Журналистар союзы булышлығында Һаулыҡ һаҡлау министрлығы "Медицина и профсоюз" журналистар конкурсы ойоштороҙо. Конкурс икенсе тапҡыр уҙҙы, ижади ярышта медицина хеҙмәткәрҙәренең һәм профсоюз ойошмаларының эшен, һаулыҡ һаҡлау системаһында кадрҙар ярҙамы мәсьәләләрен яҡтыртҡан, тармаҡта эшләгән кешеләр тураһында яҙған журналистар ҡатнашты. Бөтәһе 43 ғариза килде, 25 баҫмала донъя күргән 264 мәҡәлә баһаланды. "Башинформ" "Иң яҡшы мәғлүмәт агентлығы" номинацияһында еңеүсе тип билдәләнде. Агентлыҡ журналисы Эдуард Ҡусҡарбәков конкурстың "Медиктар - МХО геройҙары" номинацияһында еңеү яуланы.

✓Быйыл көҙ нисек ял итәбеҙ һәм эшләйбеҙ? Октябрҙә Башҡортостан халҡы Республика көнө уңайынан ғәҙәттәгенән күберәк ял итә. Быйыл байрам көнө, 11 октябрь, шәмбегә тура килә. Шуға күрә байрам дүшәмбегә, 13 октябргә, күсерелә. Йома, 10 октябрҙә, эш көнө бер сәғәткә ҡыҫҡара. Ноябрҙә Халыҡтар берҙәмлеге көнө айҡанлы ялдар йәкшәмбе, 2 ноябрҙә, башлана һәм 4 ноябргә (шишәмбе) тиклем дауам итә. Шәмбе, 1 ноябрҙә, ял көнөн 3 ноябргә (дүшәмбе) күсереү сәбәпле эш көнө була. Шуға Башҡортостанда 2 ноябрҙән 4-нә тиклем өс көн ял тип иҫәпләнә.

✓Башҡортостандың йәштәр медиаүҙәгендә 2023 һәм 2024 йылдарҙа әҙәбиәт, сәнғәт һәм архитектура өлкәһендәге Шәйехзада Бабич исемендәге республика дәүләт йәштәр премияһына дәғүәселәр исемлеге иғлан ителде. Исемлектә йәмғеһе 24 кеше теркәлгән.

**✓ Бала ҙурая, үҫә бара телефонды "тәрбиәсе" ролендә ҡабул итеп, әүрәп, ул ҡушҡандарҙы ҡаршылыҡһыҙ үтәй башлай. Шулай итеп, бала ла, ата-әсә лә үҙҙәре лә һиҙмәҫтән дәүләт теле булып һаналған урыҫ теленә күсә түгелме?**



итеп тамырланған, хатта ғаиләлә лә үҙ балаларыбыҙ менән, бәхтиһәң, автоматик рәүештә урыҫ теленә күсә лә китәбеҙ икән. Ә нимә һуң ул автоматик рәүештә сит телгә күсеп китеү? Ғөмүмән, урыҫ теле беҙҙең өсөн сит телме? "Рум" сүрәһенең 22-се аятында: "Ер үә күктәрҙең төҙөлөшө, үә телдәрегеҙ, үә төҫтәрегеҙ төрлөсә булыуы Аллаһтың ғәләмәттәренәндер. Аллаһуның был эштәрендә белем эйәләре өсөн дәлилдәр барҙыр", - тиелә. Изге Китабыбыҙҙа әйтелгәнсә, Аллаһ Тәғәлә тарафынан беҙгә бирелгән тел, атап әйткәндә, башҡорт теле, тимәк, ул беҙгә, башҡорттарға, Аллаһ бүләге булып сыға түгелме? Аллаһ Тәғәлә биргәндән тыш, бөтән телдәрҙе өйрәнәбеҙ икән, был ситтәр менән дә аралашып, аңлашып, дуҫ йәшәү өсөн бирелгән сит тел булып сыға түгелме?..

Хәҙер инде уйланайыҡ: бирелгән бүләккә үҙебеҙҙең мөнәсәбәтебеҙ нисек һуң? Бала үҙ милләтенән булған ғаиләлә үҫә, теле асыла... Әсәй... Атай... Мәм-мәм... Бир...

Ошоға тиклем үҙ телендә аралашҡан атай менән әсәй яйлап ҡына, үҙҙәре әйтмешләй, һиҙмәҫтән, балаларына урыҫса өндәшә башлай. Әйтергә кәрәк, хәҙерге быуын атай-әсәйҙәре үҙҙәренең тыуған теле - башҡорт теленең - дәүләтебеҙ тарафынан ситләтелгән осоронда формалашҡан быуын булараҡ, урыҫ телен еңелерәк тә, яҡыныраҡ та күрә, үҙҙәре лә урыҫ телендә грамоталы һөйләшә, яҙа. Тимәк, ошо быуын тәрбиәләнгән осорҙа уҡ үҙебеҙгә, башҡорт милләтенән булғандарға, тел мәсьәләһенең етди икенән аңлау мөһим булған булып сыға. Беҙ, урыҫса белгән балаларыбыҙға ҡыуанып, ғорурланып йөрөгәнбеҙ түгелме? Бала ҙурая, үҫә бара телефонды "тәрбиәсе" ролендә ҡабул итеп, әүрәп, ул ҡушҡандарҙы ҡаршылыҡһыҙ үтәй башлай. Шулай итеп, бала ла, ата-әсә лә үҙҙәре лә һиҙмәҫтән дәүләт теле булып һаналған урыҫ теленә күсә түгелме?

Һорау: телебеҙҙе һаҡлауҙа ғәйепләне ҡайҙан, кемдән эҙләргә?

Миненсә, телебеҙҙе нисек һаҡларға тигән һорауҙан элек "Телебеҙҙе һаҡлау өсөн кем яуаплы?" тиһәк, иң дөрөҫө шул булыр ине. Яуап та үҙе үк: "Мин! Әлбиттә, ғаилә!" - тип ҡысҡырып торор ине кеүек".

Әңгәмәселәремдең тел төбөнән тағы ла шул аңлашыла: балалар баҡсаһы, мәктәп, юғары уҡыу йорттары - телебеҙҙе үҫтереүсе, телмәрҙе байытыусы, телебеҙгә һөйөү уятыусы изге йорттар булырға тейеш. Белем биреү усаҡтарын юҡҡа ғына "изге йорт" тип атаманым, был аңлашылалыр. Аллаһтан аманат итеп бирелгән телендә һаҡлауға үҙ өлөшөн индереү маҡсаты менән янған тәрбиәселәрҙе, тел уҡытыусыларын ошо изге йортто тотоп тороусы изге йәндәр тип атағы килә, әммә...

Үкенескә күрә, ата-әсәләрҙән телебеҙгә иғтибар һәм ихтирам тәрбиәләүҙә төп ролде тотоусы башҡорт теле дәреслектәре тураһында йыйылы һүҙ ишетеп булманы. Был урында ла асыҡлыҡ индереп китеү мөһимдер: һүҙ әҙәбиәт дәреслектәре тураһында түгел, ә грамотаға өйрәтеү, телмәр үҫтереү өсөн тәғәйенләнгән башҡорт теле дәреслектәре тураһында бара. Йыш ҡына телефон аша теге йәки был күнегеүҙән йөкмәткеһен ебәреп, ярҙам һорайҙар. Ғәжәпләнеүемдең сиге булмай китә ҡайсаҡ. Ҡайһы ғалим, тарихсы, спортсы, артис, врач, инженер йә министр күрһәтеү алмаштарын, ҡылым төрҙәрен белмәгәнлектән йәки элизияны протезанан айыра алмағанлыҡтан, тормошонда йәки эшендә зыян күрҙе икән?.. Башҡорт теле дәреслеге булғас, һис һүҙһеҙ, грамоталылыҡты күтәреү өҫтөндә эшләү ҙә фарыз. Әңгәмәселәремдең бар теләге: балаларының телмәре бай, таҙа, төҙөк, мәғәнәле булыуына өлгәшергә мөмкинлек биреүсе дәреслектәр төҙөләүе.

"Башҡорт теле дәреслектәрен замана талаптарына яраҡлаштырып төҙөргә кәрәк, юғиһә, ул хәҙерге заманда музейҙа торған ҡиммәтле ҡорал рәүешенә әйләнеп барған кеүек", тигән фекерҙәре менән бүлешеп, борсолоусылар булды. "Телмәр бит кешене, милләтте донъя менән бәйләнештә тота. Шул бәйләнеш йәшәү, аҡса эшләү, маҡсаттарыңа ирешеү, ғаилә мөнәсәбәттәренә, хатта бөтә тормошона, ғүмеренә лә тәьҫир итә", тигән аҡыллы ла, төплө лә кәңәштәр ҙә булды ҡайһы бер әңгәмәселәремдән. "Дәреслектәрҙе төҙөүсе профессорҙар, фән кадидаттары күҙлегенән ҡарағанда, башҡорт теле - ҡатмарлы бер филология фәне. Телебеҙгә фән (наука) тип түгел, ә йәшәү ҡоралы тип ҡарау дәреслектәрҙе "терелтеп" ебәрмәҫ микән?" тип борсолдо бәғзе бер әңгәмәсем. "Башҡорт теле, әҙәбиәт дәреслектәре тәрбиәнән, тарихтан айырым тора алмаған кеүек, милләт проблемаларына ла тоғро ҡалырға бурыслы. Ошоға бәйле тарих, мәҙәниәт, милли кино, сериалдар, трендтар аша телебеҙҙе төплөрәк өйрәтеү өсөн уға ҡыҙыҡһыныу уятып булыр ине", тигән кәңәш биреүселәремә лә оло рәхмәтлемен.

Башҡорт телен үҫтереү фондын булдырып, телде һаҡлау өсөн шарттар булдырылып, бюджеттан аҡса бүленә икән, тимәк, Хөкүмәткә үпкә юҡ. Ана шул бүленгән аҡсаларҙың телебеҙ файҙаһына ҡулланылыуы ғына фарыздыр. Хөкүмәттең бер тармағы булараҡ, телебеҙҙе һаҡлауҙа иң-иң ҙур яуаплылыҡ Мәғариф министрлығына төшә түгелме?

**Юғарыла яҙылғандарҙан сығып, һығымта яһарға ла булалыр: телебеҙҙе ғаилә һәм мәғариф хеҙмәткәрҙәре генә һаҡлай ала. Һаҡсылары көслө урынға телебеҙҙе юҡҡа сығарырға маташыусылар яҡынларға баҙнат итмәҫ, тием үҙем ышаныслы ғына итеп. Алда булған хәлдәрҙән фәһем-һабаҡ алып, ғаризалар аша ғына тыуған телебеҙҙе өйрәнеү көнөнә, йәки үҙ балаларыбыҙҙың башҡорт кластарына барырға теләмәү көнөнә төшөрмәү сараһын ғаиләнән башлайыҡ, телебеҙҙе яҡларлыҡ хәлгә төшөрмәйек! Телебеҙгә ҡағылырға маташыусылар алда ла булыуы ихтимал, әммә бөтәһе лә үҙебеҙҙең айыҡ аҡылыбыҙҙан, зирәк зиһенебеҙҙән тора икәнлеген онотмайыҡ ине. Аллаһ бүлгән сит-яттарҙан яҡлау көнөнә ҡалдырмайыҡ, хөрмәтле милләттәштәр!**

**Нәзиә БИКБОВА,**
**Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, хеҙмәт ветераны.**

*ДОНЪЯ ШАНДАУЫ*

# РӘСӘЙҘЕҢ ХӘРБИ ҠЕҮӘТЕН...

## Трамп та таныны

**Рәсәй Ҡоралды көстәре фронттың төрлө участкаларында һөжүмде дауам итә. Үткән аҙнаның һуңғы көнөнә ҡарай төндә алыҫ араға юғары аныҡлыҡтағы һауа һәм диңгеҙ ҡоралдары, шулай уҡ пилотһыҙ осоу аппараттары менән Украинаның хәрби-сәнәғәт комплекстары предприятиеларына ут асылған. Һөжүмтәлә Киевтың егермеләгән объекты эштән сығарылған. Бер нисә урында янғын сыҡҡан. Был хаҡта үҙенең Telegram-каналында Киев мэры Виталий Кличко хәбәр итә.**

Үткән аҙнала беҙҙең яугирҙар Харьков өлкәһе биләмәләренә үтеп инеү зонаһын киңәйтә барып, Тихое һәм Волчанск хуторҙары районды буйынса контролде көсәйтте. РФ Оборона министрлығы белдереүенсә, "Көнбайыш" ғәскәр төркөмө подразделениелары тактик хәлен яҡшыртыуға өлгәшеп, Донецк Халыҡ Республикаһының Кировск ҡала яны территорияларын "таҙарта" башланы. "Көньяҡ" ғәскәр төркөмө яугирҙары Донецк Халыҡ Республикаһының Клебан-Бык һыу һаҡлағысынан көньяҡтараҡ ҡамалған дошман ғәскәрен юҡ итә барып, уларҙың механизацияланған, аэромобиль, штурмлаусы һәм милли гвардия бригадаларын утҡа тотто. Һөжүмтәлә дошман ғәскәре был территорияла 260-ҡа яҡын һалдатын, 12 автомобилен, өс ялан артиллерияһы орудиеһын юғалтты. Шул уҡ ваҡытта Украина Ҡоралды көстәренең радиоэлектрон көрәш станцияһы, өс боеприпас һәм ағыулыҡ складтары юҡ ителде. Украина президенты Владимир Зеленский белдереүенсә, Рәсәй тарафынан һөжүм 12 сәғәт буйы дауам итте һәм унда 500-ләгән дрон менән 40-тан ашыу ракета ҡулланылды. Йыл башынан алып, был Украинаға иң көслө атакаларҙың береһе булды.

Украина ағы яуапһыҙ ҡалмаясаҡ, тине Зеленский. Украинаның Ҡоралды көстәре, һәр ваҡыттағыса, Рәсәй территорияһына дрондар өйөрө осороуын дауам итте. Үткән аҙна эсендә "Донбасс көмбәҙе" радиоэлектрон көрәш комплексы бер нисә тапҡыр уларҙың 760 дрон ҡулланып, террористик һөжүмгә ташланыуҙарын туҡтатыуға өлгәште. Дошман тарафынан артиллерия уты асыу һөжүмтәһендә Донецкиҙың тыныс граждандары араһында йәрәхәт алыусылар һәм һәләк булыусылар бар, тип хәбәр итә төбәк етәксеһе Денис Пушилин.

Шул уҡ ваҡытта Украинаның хәле һәм һөйләшеүҙәр буйынса позицияһы көндән-көн хөртәйә бара, тип белдерҙе РФ Президентының матбуғат секретары Дмитрий Песков журналист Павел Зарубинға. Рәсәй Президенты Владимир Путиндың Америка лидеры Дональд Трампты Мәскәүгә саҡырыуы көсөндә ҡала, тип өҫтәне ул. Ләкин Дональд Трамптың Украина конфликты буйынса Киев режимы файҙаһына фекерен үҙгәртеүенә АҠШ лидерының үткән аҙнала Британия короле Карл III менән осрашыуы сәбәпсе булды, тип яҙҙы Telegraph. Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы Генеральный Ассамблеяһының 80-се сессияһы сиктәрендә украин лидеры Зеленский менән осрашып һөйләшеүенән һуң Трамп үҙенең Truth Social селтәрендә Украинаның Европа ярҙамы менән үҙ территорияларын ҡайтарып ҡына ҡалмай, "артабан хәрәкәт итеүе лә мөмкин" тип яҙып сыҡты. Зеленский менән осрашыуында Трамп Вашингтондың НАТО-ны ҡорал менән тәьмин итәсәге һәм уның артабан Киевҡа ебәрелеү ихтималлығы хаҡында ла белдерҙе. "Бик ауыр һуғыштар бара, һәм ул тиҙ генә тамамланырға оҡшамай", -ти Аҡ йорт башлығы. Шул уҡ ваҡытта ул Рәсәйҙең әле ифрат ҙур хәрби ҡеүәткә эйә булыуын билдәләй, ләкин Рәсәй Президенты Владимир Путин менән осрашып һөйләшеүҙәренең Украина конфликтын көйләүгә килтерә алмауы сәбәпле үкенес белдерә: "Путин менән минең мөнәсәбәттәр арҡаһында был мәсьәләне хәл итеү еңел булыр төҫлө ине. Үкенескә, был мөнәсәбәттәр бер ни ҙә аңлатмай",- тип яҙҙы ул. Ә Зеленскийға был етә ҡалды: ул хәҙер Трамптың Рәсәйгә түгел, ә Украинаға күберәк ышаныс белдереүе менән бала-сағаларса ғорурлана.

Ә Рәсәй лидерының был ваҡытта тығыҙ эш графигы төҙөлә. Ошо һәм киләһе аҙналарҙа Владимир Путиндың халыҡ-ара аралашыуҙары һәм ҙур сығышы көтөлә, тип белдерҙе Дмитрий Песков.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфөлә Салауат Юлаев һәйкәлен цехҡа реставрацияға ебәрергә әҙерләйҙәр. Был хаҡта "Салауат Юлаев. Реставрация" телеграм-каналы хәбәр итә. Скульптура юғары сифатлы ремонт талап итә. Реставраторҙар әйтеүенсә, ремонт цехы Өфө биләмәһендә урынлашҡан. 2027 йылда башҡорт халҡының милли батыры үҙ урынына ҡайта. Яңыртылған комплекс үҙенең 60 йыллығына асылырға тейеш.

✓3 октябрҙә "Торатау" конгресс-холында уҡыусылар, студенттар, йәш белгестәр өсөн "ТрудКрут" карьера форумы була. Программала һөнәри йүнәлеш биреү уйындары, федераль һәм төбәк спикерҙары менән лекторий, квиз һәм эш биреүселәр күргәҙмәһе планлаштырылған. Ҡатнашыусыларҙы резюме төҙөргә өйрәтәләр, улар шулай уҡ HR-белгестәрҙән консультация ала һәм хатта ҙур компанияларҙа стажировка үтеү өсөн әңгәмәләр үтә ала. Сара 11:00 сәғәттә Зәки Вәлиди урамы, 2-се йорт адресы буйынса башлана.

✓Өфөләге Евразия ғилми-белем биреү үҙәгендә тәүге тапҡыр "ТоНКО" төбәк-ара слет үтте. Унда Башҡортостандан, Ырымбур һәм Свердловск өлкәләренән 300-гә яҡын кеше ҡатнашты. Программаға социаль проектлау, краудфандинг һәм коммерцияға ҡарамаған ойошмаларҙы үҫтереү буйынса семинарҙар, осталыҡ дәрестәре, күргәҙмәләр һәм дискуссиялар инде. Белдерелеүенсә, федераль мониторинг мәғлүмәттәренә ярашлы, рәсәйҙәрҙең 76 проценты берлектә эшләргә әҙер, 56 проценты коммерцияға ҡарамаған ойошмаларға ышана, 81 проценты ошондай ойошмаларҙың эше тураһында хәбәрҙәр.

✓Башҡортостандың конькиҙа уҙышсылары Санкт-Петербургта шорт-трек буйынса Рәсәй кубогының беренсе этабында ике көмөш һәм бер бронза миҙал яуланы. Семен Елистратов шәхси ярыштарҙа ике тапҡыр көмөш призер булды, ә республиканың юниорҙар йыйылма командаһы 3000 метрға ҡатнаш эстафетала бронза яуланы, тип хәбәр итә республиканың спорт министрлығы.

✓Uzbekistan Airways авиакомпанияһы Наманган Өфө - Наманган - Өфө маршруты буйынса рейстар һанын арттыра. Хәҙер осоштар аҙнаһына ике тапҡыр башҡарыла. Осоштар кесаҙна һәм йома көндәрендә урындағы ваҡыт буйынса 174 пассажирға иҫәпләнгән Airbus A320 самолеттарында башҡарыл. Юлға 3 сәғәт 5 минут ваҡыт китә, тип хәбәр итә аэропорттың матбуғат хеҙмәте.Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, Uzbekistan Airways Ташкент һәм Фирғәнә ҡалаларына ла даими рейстар яһай.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

**✓ Уҡыу программаһына ярашлы, аҙнаһына ике сәғәт - башҡорт теле, ике сәғәт - башҡорт әҙәбиәте дәрестәре ҡаралған. Ул дәрестәр аша балалар үҙ халҡының рухи хазинаһын өйрәнеп, милли үҙаңын нығыта.**



БОРОНҒО АМАНАТ

# ТЫЙЫУ ЙОЛАҺЫ

## Исемгә тыйыу

Борон аллаларҙың ысын исемдәре йәшерелгән, башҡа исемдәр менән алмаштырылған. Библияға ярашлы, тәләһә ҡайҙа, кәрәккән-кәрәкмәгәндә изге исемдәрҙе телгә алыу ярамаған. Илаһтар культы, уларҙы ҙурлау, уларға табыныу йолалары бар ҡәүемдәргә хас күренеш. Ғәрәп мифологияһы буйынса, тыуҙырыусы, бар ҡылыусы, йыһанда аһәң, тәртип урынлаштырыусы бөтә донъя хакимы Душара Илаһтың тыйылған исеменең бер төрө, алмашы иҫәпләнә. Тереклек һәм уңдырышлылыҡ аллаһы Аарра, яҡтылыҡ һәм ҡояш һыҙаттарын үҙендә һынландырып, Душара менән берҙәй танылған. Аллат иһә - күк һәм ямғыр алиһәһе. Был исем Илаһтың тыйылған төрө булыуы ихтимал, тиҙәр.

Аллаһ та, Хоҙай ҙа тыйылған исемдең алмашы, уртаҡ исем илаһтан яһалған, тип фаразлайҙар.

Йәмән мифологияһында Саба дәүләтендә ил хакимы Алмаках (Илмаках) Илаһтың тыйылған исеменең варианты итеп тоҫмаллана. Илмаках - Илу алла исеменең бер төрө. Ай һәм һуғарыу аллаһы Вадд та Илуҙың ҡушамат исеме һымаҡ уйланыла. Ай аллалары Сами, Син да Илуҙың алмаш исемдәре кеүек ихтималлана. Зат Бадан, Зат Зәһрән, Зат Сәнтим, Зат Химйәм ҡояш алиһәһенең тыйылған исеменең төрлө рәүештәре итеп ҡабул ҡылына.

Иран риүәйәттәрендә аҡыллы хаким Ахурамазда (Ахура Мазда) зәрдөшт һәм ахеменид пантеондарында бөйөк Илаһтың тыйылған исеменең алмашы һанала. Табу һалынған исемдәр грек, рим мифологияһында ла сағыла. Ғөмүмән, Аллаһы Тәғәлә туҡһан туғыҙ исем менән йөрөтөлгән. Ысын исем-шәрифте йәшереү, алмаштары менән аталыу - яуыз көстәр йоғонтоһонан һаҡланыу, хилафлыҡтан ҡурсаланыу, туранан-тура танытмау, белдермәү сараһы.

Борон башҡорт халҡында исем ҡушыуға бәйле "Тәүге исем", "Ғүмерле исем", "Эт исеме" кеүек йолалар булған. Тәүге исемде, йәғни йүргәк исемен кендек инәһе ҡушҡан. Бәпесте исемһеҙ бик аҙ ғына ваҡыт та һәм яңғыҙ ҡалдырып һалып ҡуйырға ярамаған. Был уны еншайтандан һаҡлау, алмаштыртмау әмәле булған.

Абдулкадир Инан "Шаманизм тарихта һәм бөгөн" хеҙмәтендә яҙыуынса, ғәҙәт буйынса яҡуттарҙа ла балаға бәләкәй саҡта бирелгән исем уның ысын исеме тип иҫәпләнмәгән. Бындай йола боронғо уғыҙҙарҙа ла күҙәтелгән. Егет-еләнгә ҡаһарманлыҡ күрһәткәндән һуң ғына Деде Ҡорҡут исем ҡушҡан.

Монголдар иһә яңы тыуған бәпесте өс көн буйы ҡаҙан аҫтында һаҡлаған. Был ваҡытта инәһе яһалма бәпес (ҡурсаҡ) менән мәшғүл булған. Һуңыраҡ ата-инә: "Балабыҙ үлде!" - тип ҡысҡырған да ҡурсаҡты бер соҡорға күмгән. Ысын баланы тыныс ҡалдырһын өсөн яман рухтарҙы ошолай алдағандар, күҙ яҙҙырғандар. Үлем рухын алдар өсөн яҡуттарҙа яңы тыуған баланы күршеләргә "һатыу" йолаһы булған.

**Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ.**

**(Дауамы бар).**

БЕҘҘЕҢ ДУҪТАР

# АЛҒА, БЕЛЕМ ИЛЕНӘ!



**Гәзитебеҙҙең иң мәртәбәле уҡыусылары һәм тоғро дуҫтары улар, Өфөләге һәм республика ҡалаларындағы башҡорт гимназия һәм лицейҙары коллективтары. Уларҙың етәкселәренә: "Яңы уҡыу йылын ниндәй кәйеф, ниндәй пландар менән башлап ебәрҙегеҙ?"- тигән һорау бирҙек.**

***Фәнил БҮЛӘКОВ, Зәйнәб Биишева исемендәге 140-сы Башҡорт гимназияһы директоры:*** Быйылғы уҡыу йылында бер юлы өс беренсе синыф уҡыусыларын ҡабул иттек. Тимәк, 90-дан ашыу бәләкәс уҡыусы парта артына ултырҙы. Улар өсөн мауыҡтырғыс асыштар, яңы дуҫтар һәм ҡыҙыҡлы дәрестәр менән тулы 11 йыллыҡ оҙон юл башланды. Был беҙҙең өсөн шатлыҡлы ваҡиға: балаларын милли мәктәптә уҡытырға ҡарар иткән ғаиләләр арта бара, тимәк.

Гимназиябыҙҙың төп үҙенсәлектәренең береһе - ул уҡыусыларға туған телде тәрән өйрәнеү мөмкинлеге биреү. Беҙҙә туған башҡорт телен һәм туған рус телен өйрәнеү өсөн айырым кластар булдырылған. Был - милли мәҙәниәтте, тарихты һәм әҙәбиәтте һаҡлауға һәм үҫтереүгә йүнәлтелгән мөһим аҙым. Уҡыу программаһына ярашлы, аҙнаһына ике сәғәт - башҡорт теле, ике сәғәт - башҡорт әҙәбиәте дәрестәре ҡаралған. Ул дәрестәр аша балалар үҙ халҡының рухи хазинаһын өйрәнеп, милли үҙаңын нығыта.

Белем биреү процесы дәрестәр менән генә сикләнмәй. Гимназия - ул ижади һәм ижтимағи тормоштоң үҙәге. Сентябрь айында уҡ гимназия "Берҙәмлек" ижад үҙәге менән берлектә "Башҡорт биҙәктәре" исемле грант проектын тормошҡа ашырыуҙа партнер булараҡ ҡатнашты. Был сара балаларҙа халыҡ ижадын, милли орнаменттарҙың тарихын һәм мәғәнәһен өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу тыуҙырҙы.

Гимназияның ғорурлығы булған "Шатлыҡ" вокаль ансамбленең сығыштары күп кенә ҡала һәм республика сараларын биҙәй, ә йәш йырсылар төрлө конкурстарҙа еңеүҙәр яулай. Бынан тыш, уҡыусыларҙың һәләтен үҫтереү өсөн 30-ҙан ашыу өҫтәмә белем биреү түңәрәге эшләй. Һәр бала үҙенә оҡшаған шөғөл таба ала: спорт, бейеү, һынлы сәнғәт, робот техникаһы һәм башҡалар.

Йәйге каникулдар ҙа файҙалы һәм күңелле үтте. Гимназия базаһында милли мәҙәниәткә, тарихҡа һәм йолаларға арналған "Арғымаҡ" этнолагеры ойошторолдо. Балалар, йәйге ялды милли уйындар, йыр-моң һәм ижад менән бергә үткәреп, яңы көс һәм дәрт менән уҡыу йылына әҙерләнде.

Яңы уҡыу йылының бер айы үтеп тә китте. 29 йыллыҡ бай тарихы булған Зәйнәб Биишева исемендәге 140-сы Башҡорт гимназияһы тағы ла ҙур өмөттәр һәм яңы пландар менән йәшәй. Уның һәр уҡыусыһына, уҡытыусыһына һәм ата-әсәләргә был йылда ла ҙур уңыштар һәм яңы үрҙәр теләйбеҙ! "Алға, белем иленә!" тип саҡырабыҙ уларҙы.

***Әнисә ТҮЛӘГӘНОВА, Мортаза Рәхимов исемендәге 3-сө Башҡорт республика гимназия-интернаты директоры:*** Гимназия-интернатыбыҙ өсөн һуңғы уҡыу йылы айырыуса уңышлы үтте, тиһәк, бер ҙә арттырыу булмаҫ. Гимназия буйынса уҡыу сифаты күпкә яҡшырҙы, мәҫәлән, 5б шайморатовсылар класының белем сифаты 98 процент тәшкил итте! Уҡыу йылын лайыҡлы тамамлап, уҡыусыларыбыҙ яңы үрҙәргә әйҙәйәсәк киләсәккә төплө йүнәлеш алды. Берҙәм дәүләт имтихандарында яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәшеп, үҙҙәренең тырышлығын һәм һәләтен күрһәтте.

Йыл һайын тиерлек иң һәләтле һәм тырыш балаларыбыҙҙың "Артек" халыҡ-ара балалар үҙәгендә ял итеүе лә шуны дәлилләй. Аэлита Мөхәмәтова, Самира Хөсәйенова, Карина Яҡупова кеүек бар яҡтан тырыш, әүҙем ҡыҙҙарыбыҙ ял итте унда был юлы. Шайморатовсы класынан ГТО нормативтарын юғары күрһәткестәргә үтәгән Айбулат Ғәббәсов та "Артек"ка йүнәлтмә менән бүләкләнде. Көрәш буйынса яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәшкән ике үҫмерҙең республика Башлығы премияһына лайыҡ булыуы ла гимназия-интернаттың мәртәбәһен күтәрҙе.

Яңы уҡыу йылын яңы маҡсаттар менән башлап, яҡшы белем алыу, үҙ-үҙебеҙҙе үҫтереү һәм телебеҙҙе, мәҙәниәтебеҙҙе һаҡлау йүнәлешендә ныҡлы аҙымдар яһарға ниәтләйбеҙ. Бөгөн интернатта 5-тән 11-се класҡа тиклем Башҡортостандың көньяҡ райондарынан, Ырымбурҙан, Ханты Манси автономиялы округынан 450-гә яҡын бала уҡый.

Быйылғы Белем көнөнә арналған сара айырыуса иҫтәлекле булды. 1 сентябрҙә Диҡҡәт Бураҡаев исемендәге география кабинетын астыҡ. Уны асыу тантанаһында билдәле ғалим-геолог, журналист, балалар яҙыусыһы, күренекле яҡташыбыҙҙың туғандары, шулай уҡ ҡыҙы Таңсулпан Бураҡаева ҡатнашты. Бик матур, ҙур сара булды ул. Республика Башлығы Радий Хәбировтың география фәненә етди иғтибар бүлеп, был фән буйынса уҡытыуҙы нығытыу һәм үҫтереү йүнәлешендә үткәрелгән эштәре бик көнүҙәк. Ул уҡыусылар Башҡортостандың тәбиғәтен һәм тарихи-мәҙәни ҡомартҡыларын яҡындан таныһын өсөн мәктәптәрҙә географияны практик яҡтан өйрәнеүҙе киңәйтергә саҡыра. Был шулай уҡ уҡытыусыларҙың һөнәри һәләтен арттырыуға дәртләндереү сараһы ла ул.

Беҙҙең мәктәп биләмәһендә күптән түгел Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар аллеяһы барлыҡҡа килде. 23 сентябрҙә гимназияла "Йәйге шайморатовсылар уйындары"ның төбәк этабы үтте. Унда республиканың 13 район-ҡалаһынан командалар ҡатнашты. Уйын бик көсөргәнешле үтте, ҡатнашыусылар уның яҡшы ойошторолоуын билдәләне. Юғары әҙерлек һәм ихтыяр көсө күрһәтеп, беҙҙең гимназия-интернат командаһы еңеүсе исемен яуланы. Тиҙҙән командабыҙ Баҡалы районына уйындың республика этабына бара.

Уҡытыусыларыбыҙ ҙа Мәғариф министрлығы тарафынан үткәрелгән төрлө конкурстарҙа ҡатнаша, үҙҙәренең алдынғы тәжрибәһе менән уртаҡлаша. Ҡаҙанда, Мәскәүҙә, Саха Яҡут республикаһында, Силәбелә ойошторолған һөнәри сараларҙа булып, Мортаза Рәхимов исемендәге гимназия-интернатта тик алдынғы ҡарашлы, тырыш һәм тәжрибәле педагогтар эшләүен иҫбатлап ҡайттыҡ.

**(Дауамы 7-се биттә).**

ТАБИП КӘҢӘШЕ

# ОҘАЙЛЫ ЯЛДАН ҺУҢ...



**Өфөнөң 17-се поликлиникаһының 4-се педиатрия бүлеге мөдире Аделя Гребенщикова мәктәп уҡыусыларының ата-әсәләренә уҡыу йылын еңелерәк үтеү өсөн кәңәштәр менән уртаҡлашты:**

- Оҙайлы ял ваҡытында балалар уҡыу графигынан ситләшә һәм барыһына ла тиҙ генә уҡыу процесына инеп китеү еңел бирелмәй. Ҡайһы бер уҡыусылар уҡыуҙың тәүге көндәрендә үк ауырый башлай. Тәү сиратта оҙайлы каникулдан һуң баланың көн режимын тәртипкә килтерергә кәрәк, йәғни уҡыу, өҫтәлмә дәрестәр, түңәрәктәргә йөрөү, хобби һәм йоҡо өсөн ваҡыт дөрөҫ бүленергә тейеш.

Шулай уҡ витаминдар һәм минералдар менән байытылған балансл ы, рациональ туҡланыуҙы ойоштороу ҙа мөһим.

Ғаиләләге мөхиттең тыныс булыуы, күңел биреп әңгәмәләшеү ҙә баланың уҡыуға ҡарата булған ҡарашын ыңғайлата.

Үҫмерлек осорона инеп барыусы балаларға айырыуса иғтибар кәрәк. Ял көндәрен бергәләп үткәреү, ғаилә менән парк һәм кинотеатрҙарға йөрөү, күмәкләп өй эштәрен атҡарыу йәки аш-һыу әҙерләү баланың күңелен үҫтерәсәк, яҡшы тойғолар бүләк итәсәк.

Сәләмәт тәндә - сәләмәт рух, шуға күрә баланың физик үҫешен дә күҙ уңынан ысҡындырырға ярамай. Шулай уҡ йылына бер тапҡыр балаларҙың һаулығын профилактик тикшереп тороу ҙа мөһим.

9

# Мәғариф

"Киске Өфө"гәзитенең махсус бите

3 - 9
октябрь
(ҡарасай)
2025 йыл
№39 (1183)

БЕҘҘЕҢ ДУҪТАР

# АЛҒА, БЕЛЕМ ИЛЕНӘ!

**Гәзитебеҙҙең иң мәртәбәле уҡыусылары һәм тоғро дуҫтары улар, Өфөләге һәм республика ҡалаларындағы башҡорт гимназия һәм лицейҙары коллективтары. Уларҙың етәкселәренә: "Яңы уҡыу йылын ниндәй кәйеф, ниндәй пландар менән башлап ебәрҙегеҙ?"-тигән һорау бирҙек.**

***Салауат ҒӘЛИМУЛЛИН, В.И. Ленин исемендәге 2-се Стәрлетамаҡ лицей-интернаты директоры:***

*Кемдәр генә белмәй был мәктәпте,*
*Кем үтмәгән уның һуҡмағын.*
*Стәрлегә килгән һәр иптәштең*
*Теләр инем бында туҡтауын.*

Хәким Ғиләжевтың был шиғри юлдары, әлбиттә, беҙҙең мәктәбебеҙ тураһында. Беләһегеҙ, В.И.Ленин исемендәге 2-се һанлы Стәрлетамаҡ лицей-интернаты - 100 йыллыҡ бай тарихы булған данлы уҡыу йорттарының береһе.

Һәр яңы уҡыу йылы үткән уҡыу йылын йомғаҡлауҙан башлана. Үткән уҡыу йылының иң ҡыуаныслыһы: беҙҙә "Мәғарифтың мәктәп системаһын модернизациялау" федераль программаһы буйынса капиталь ремонт үткәрелде, мәктәбебеҙ өр-яңы һулыш алды. Ошо матур бинала мәктәбебеҙҙең 100 йыллыҡ юбилейын билдәләнек.

Быйылғы яңы уҡыу йылын матур, яҡты, заманса йыһазландырылған кластарҙа башлап ебәрҙек. Балалар уҡыу әсбаптары, дәреслектәр менән тулы кимәлдә тәьмин ителгән. Иң мөһиме: лицейыбыҙ үҙ эштәренең оҫталары булған уҡытыусылар һәм тәрбиәселәр менән тәьмин ителгән. Башҡортостандың төрлө район һәм ҡалаларынан ғына түгел, ә Силәбе, Ырымбур өлкәләренән дә лицейға уҡырға килгән 300-гә яҡын бала төрлө яҡлап төплө белем һәм тәрбиә ала.

Уҡыусыларыбыҙ тырыш һәм уңған беҙҙең. Һәр белем усағының да уңышының төп күрһәткес - ул Берҙәм дәүләт имтихандары һөҙөмтәләре. Беҙҙең быйылғы сығарылыш уҡыусылары имтихандарҙы уңышлы тапшырып, яҡшы күрһәткестәргә өлгәште, республикабыҙҙың һәм илебеҙҙең юғары уҡыу йорттары студенттары булып китте. Бөгөнгә көндә беҙҙең уҡыусылар Өфө фән һәм технологиялар университеты, Өфө нефть техник университеты, шулай уҡ ошо уҡыу йорттарының Стәрлетамаҡ филиалы, М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия һәм Башҡорт дәүләт медицина университеттары студенттары рәтен тулыландырҙы. Шулай уҡ урта профессиональ белем биреүсе уҡыу йорттарында ла яҡшы һөнәр буйынса белем алған лицей сығарылышы уҡыусылары байтаҡ.

Йыл дауамында уҡыусыларыбыҙ төрлө олимпиада, спорт ярыштарында һәм башҡа сараларҙа әүҙем ҡатнаша. Мәҫәлән, Башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса Төньяҡ-Көнсығыш федераль олимпиадаһында ҙур уңыштар күрһәтте лицей уҡыусылары: Ғәлимова Гөлнур - еңеүсе, Ғәлеев Айнур, Йомадилова Динә, Ҡоҙаҡаева Алина, Ҡарамышева Фирҙәлиә призерҙар булдылар. 2025 йылғы сығарылыш уҡыусыбыҙ Фирҙәлиә - Башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса Аҡмулла олимпиадаһы еңеүсеһе лә. Әлеге көндә ул М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында белем ала, олимпиадаларҙа күрһәткән ҙур уңыштары өсөн юғары стипендияға лайыҡ студент.

Уҡытыусылар ҙа ҙур әүҙемлек менән республика һәм ил кимәлендә уҙғарылған төрлө сараларҙа, конкурстарҙа ҡатнаша, уҡыусыларҙы ла йәлеп итә. Шулай уҡ хеҙмәткәрҙәрҙең ҙур теләк менән мәрхәмәтлек акцияларына ҡушылыуын, МХО яугирҙарына, уларҙың ғаиләләренә күрһәткән матди һәм рухи ярҙамдарын билдәләп үткем килә.

Өфө дәүләт нефть техник университеты, Өфө фән һәм технологиялар университеты Стәрлетамаҡ филиалдары, Стәрлетамаҡ медицина колледжы, Эске эштәр министрлығы менән килешеүҙәр төҙөлгән, беҙҙең мәктәптә инженер, педагогик, полиция профиль кластары бик уңышлы эшләп килә. Беҙҙең уҡыусылар уларҙың оҫталыҡ дәрестәрендә, олимпиадаларында ҡатнаша. Был хеҙмәттәшлек беҙҙән сығарылыш класс уҡыусыларына буласаҡ һөнәрҙәрен дөрөҫ һайлауға булышлыҡ итә. Шулай уҡ Автомәктәп менән дә хеҙмәттәшлек итәбеҙ. 10-сы, 11-се класс уҡыусылары "Йәш водителдәр" түңәрәгендә шөғөлләнә.

Лицей-интернатта өҫтәмә белем биреү ҙә яҡшы ойошторолған, шулай уҡ балалар төрлө түңәрәктәрҙә ихлас шөғөлләнә. Мәктәптә башҡорт бейеүҙәре, балалар театры, ҡурай, балалар телестудияһы, шахмат, көрәш буйынса түңәрәктәр әүҙем эшләп килә. Быларҙың барыһы ла уҡыусыларға төрлө яҡлап үҫергә, үҙҙәренең һәләттәрен асып, яратҡан шөғөлдәрен табырға, шулай уҡ профессиональ үҫешкә этәргес булып тора.

Йомғаҡлап әйткәндә, ағымдағы уҡыу йылына маҡсаттар һәм алдыбыҙға ҡуйған бурыстар ҙур. Уларҙың барыһын да педагогик состав, уҡыусылар һәм ата-әсәләр менән аткарып сығырыбыҙға ышанам.

***Шәмсулла ХӘБИБРАХМАНОВ, Мөхәмәтғәли Иҫҡужин исемендәге 136-сы Башҡорт лицейы директоры:*** Быйылғы уҡыу йылын күтәренке күңел менән башлап ебәрҙек. 1-се класҡа 99 бала уҡырға килде, уларҙың бер өлөшө - 308-се башҡорт балалар баҡсаһы тәрбиәләнеүселәре. Һәр класта 30-ҙан ашыу бала уҡыясаҡ. Кластарҙы артыҡ ҙур итергә теләмәһәк тә, ата-әсәләр балаларын күпләп алып килә, яҡшы әҙерлекле башҡорт балаларын ҡабул итмәй булмай. Беҙ, ғөмүмән, киләһе уҡыу йылын алдан ҡайғыртабыҙ: сентябрь айынан уҡ мәктәпкә әҙерлек төркөмдәренә йөҙгә яҡын бала йөрөй башлай.

Ата-әсәләр араһында лицейҙың абруйы ҙур. Сөнки коллективта бик көслө уҡытыусылар эшләй. Һуңғы йылдарҙа мәктәпкә эшкә саҡырып, реклама эшләгәнебеҙ ҙә юҡ: һәр эш көнө тиерлек балаларын беҙҙең лицейға күсерергә теләгән ата-әсәләр менән һөйләшеүҙән башлана. Тимәк, башҡорт мәктәбенең киләсәге бар. Шуныһы ҡыуаныслы: ҡасандыр беҙҙең лицейҙы тамамлаған элекке уҡыусыларыбыҙҙың балалары ла күп килә беҙгә. Ғөмүмән, һупайлы биҫтәһендә беҙҙең мәктәп тураһында һәйбәт белеләр, уҡыу шарттары бик уңайлы, оҙайтылған көн төркөмдәре бар, барса предметтарҙан да уҡытыусылар етерлек.

Әлеге уҡыу йылы өсөн әҙерләгән пландарыбыҙҙа лицейыбыҙ өсөн традицияға әүерелгән барса тәрбиәүи сараларҙ ҡаралған, уларҙы мотлаҡ юғары сифатлы итеп ғәмәлгә ашырырбыҙ, тип уйлайбыҙ. Профилле уҡытыу дауам итә: физика-математика, социаль-гуманитар һәм химия-биология предметтарын тәрәнәйтеп өйрәнеү йүнәлештәре буйынса бай тәжрибә тупланған. Шулай килеп сыға: ҡайһы бер кластарҙа уҡыусыларыбыҙҙың бер өлөшө бер йүнәлеште, икенсеһе башҡа йүнәлеште һайлай. Беҙ уларҙың теләктәренә ҡаршы килмәйбеҙ, теләкле шарттар булдырабыҙ.

Мәктәп асылғандан бирле беҙҙә сәнғәт мәктәбе эшләп килә, былтыр уның художество-һынлы сәнғәт йүнәлешен тергеҙгәйнек, ул яҡшы ғына эшләп китте. Был өҫтәмә белем биреү өлкәһенә ҡарай, быйыл яңы төркөмдәр астыҡ, бюджет урындарынан башҡа түләп уҡыу мөмкинлектәре лә бар. Әйткәндәй, былтыр ике яңы оҫтахана асҡайныҡ: изостудия һәм медиастудия. Уны беҙҙең элекке уҡыусыбыҙ Муса Мәзитов финансланы, уға бик рәхмәтлебеҙ. Был студияларыбыҙ яҡшы итеп эшләй башланы, һынлы сәнғәт, академик һүрәт төшөрөү, композиция буйынса педагогтарыбыҙ етерлек, уҡыусылар ҙа бик теләп йөрөй. Тәүге йылдың һөҙөмтәләре һәйбәт, һынлы сәнғәт мәктәптәренән бер ҙә ҡалышмайбыҙ.

Патриотик тәрбиәне лә көҙ уңынан ысҡындырмайбыҙ. Ҡайһы бер уҡыусыларыбыҙҙың ғаиләләрендә МХО-ла ҡатнашыусы яугирҙар бар, улар менән осрашыуҙар уҙғарабыҙ. Уҡыусыларыбыҙ ҙа, ата-әсәләр ҙә МХО-ға гуманитар ярҙам акцияларында әүҙем ҡатнаша. Мәҫәлән, шул уҡ Муса Мәзитов МХО-ға "УАЗ" машиналарын әҙерләп ебәрә, уны МХО зонаһында Хәснәтдинов фамилиялы яугирға (уның балаһы беҙҙең лицейҙа уҡый) Муса менән Октябрь районы хакимиәте башлығы бергәләп тапшырҙы.

Былтырғы уҡыу йылында лицейҙы 39 уҡыусы тамамлағайны, уларҙың өстән бер өлөшө Мәскәү, Санкт-Петербург кеүек ҡалаларҙың абруйлы вуздарына уҡырға инде. 26 уҡыусы бюджет иҫәбенә, 13-ө коммерция нигеҙендә уҡыясаҡ. Ике уҡыусыбыҙ Төркиә вуздарында һөнәри белем эстәйәсәк. Шуныһы ҡыуаныслы, лицейҙы тамамлаусылар араһында ғалимдарыбыҙ - фән кандидаттары, докторҙары, уңышлы эшләп йөрөгән башҡа һөнәр эйәләре бар. Тимәк, элиталы башҡорт мәктәбе булараҡ, илебеҙ өсөн йәш профессиональ кадрҙар әҙерләүгә тос өлөш индерә алғанбыҙ. Киләсәккә лә ҙур өмөттәр бағлап йәшәйбеҙ һәм эшләйбеҙ.

БЕЛМӘҺӘҢ...

# ТҮЛӘҮЛЕ ЮЛ ТҮЛӘҮҺЕҘ

**2023 йылдың 1 сентябренән Рәсәй мәктәптәрендә Берҙәм федераль төп дөйөм белем биреү программалары индерелгәйне. Программалар әҙерләү функцияһы Рәсәй Федерацияһының Мәғариф министрлығына йөкмәтелгән. Ниндәй улар, хәтергә төшөрәйек:**

- Элек ата-әсәләр балаларҙы бер ҡала эсендә лә икенсе мәктәпкә күсергәндә программаларҙың тап килмәүенә зарлана ине. Хәҙер иһә был мәсьәлә яңы нормалар менән хәл ителде.
- Мәктәп автобустары, законға ярашлы, түләүле автомобиль юлдары буйлап бушлай йөрөй. Был норма ойошторолған балалар төркөмдәрен алып йөрөгән автобустарға ла ҡағыла. Мәҫәлән, ярыштарға йәки экскурсияларға йөрөткәндә, ял лагерҙарына алып барғанда һәм алып ҡайтҡанда автобустар түләүле юлдарҙан буш йөрөй ала.
- Рәсәй Фәндәр академияһы хәҙер башланғыс, төп һәм урта дөйөм белем биреү программаларын тормошҡа ашырыуҙа ҡулланылған федераль исемлеккә индерелгән дәреслектәрҙе һәм улар менән бергә әҙерләнгән уҡыу әсбаптарын экспертизалауҙа ҡатнаша.
- Төбәктәр оҙайтылған көн төркөмдәрен өҫтәмә финанслау хоҡуғын алды. Был ата-әсәләргә йөкләмәне еңеләйтергә мөмкинлек бирҙе. Уҡыусылар уҡытыусылар ҡарамағында өй эштәрен башҡара, секцияларҙа йәки түңәрәктәрҙә шөғөлләнә ала.
- Өйҙә шөғөлләнгән һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән уҡыусыларға бушлай ике тапҡыр тукланыу хоҡуғы гарантиялана. 2020 йылда ҡабул ителгән законға ярашлы, башланғыс синыф уҡыусылары көнөнә бер тапҡырҙан да кәм түгел ҡайнар аш һәм эсемлек менән туҡланырға тейеш. Вячеслав Володин билдәләүенсә, туҡланыу бюджет иҫәбенә тәьмин итело.
- Мәктәп уҡыусыларына дәрестәр ваҡытында, гәҙәттән тыш хәл осраҡтарынан башҡа, кеҫә телефондарын ҡулланыу тыйыла.
- Ошо уҡ закон менән мәктәптәргә мотлаҡ предмет булараҡ хеҙмәт дәресе кире ҡайтарыла. Тормош хәүефһеҙлеге нигеҙҙәре дәресе урынына ватанды һаҡлау һәм хәүефһеҙлек нигеҙҙәре буйынса дәрестәр барлыҡҡа килде. Ҡануниәткә уҡыусыларҙа хеҙмәткә яуаплы мөнәсәбәт булдырыу тураһында нормалар индерелгән.
- Бер ғаиләлә тәрбиәләнгән балалар бер уҡ мәктәпкә йәки балалар баҡсаһына уҡырға инеү хоҡуғын алды. Элек был норма, бер йортта йәшәүҙәренә ҡарамайынса, тик бер туғандарға ғына ҡағыла ине.
- Бөтә белем биреү ойошмалары - балалар баҡсалары, мәктәптәр, колледж, техникумдар һәм юғары уҡыу йорттары, милек формаһына ҡарамаҫтан, үҙ биналарына йәки биләмәләренә Рәсәй Федерацияһының Дәүләт флагын элеп ҡуйырға бурыслы.
- Балаларҙы уҡытыуға иғтибарҙы нығыраҡ йүнәлтеү өсөн уҡытыусылар артыҡ күп отчет биреүҙән азат ителде. Ҡабул ителгән законға ярашлы, уҡытыусыларҙан РФ Мәғариф министрлығы тарафынан раҫланған отчеттар исемлегенән башҡа отчеттар талап итеү тыйыла.

Әйткәндәй, яңы уҡыу йылында Башҡортостанда федераль программа сиктәрендә төҙөкләндерелгән 35 мәктәп үҙ ишектәрен асты. Дүрт йыл эсендә был программаға ярашлы, республикала 11 миллиард һумлыҡ суммаға 181 мәктәп төҙөкләндерелде. Мәктәптәрҙе төҙөкләндереүгә бүленгән аҡса күләме буйынса Башҡортостан ил буйынса икенсе урынды биләй. 2026 йылда тағы ла 36 мәктәпте төҙөкләндереү планлаштырылған, уларҙың бишәүһендә капиталь ремонт эшләнәсәк.

***✓ Һәр замандың үҙ зыялылары булған, хәҙер ҙә бар, киләсәктә лә буласаҡ. Беҙ уларҙы беләбеҙ, йыш ҡына иҫкә алабыҙ. Беҙгә 20-се ҡала Башҡорт гимназияһына нигеҙ һалыусылар, уларҙың вариҫтары менән бергә эшләргә насип булды.***

**Бөгөнгө әңгәмәбеҙҙә Өфө ҡалаһының Фатима Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт гимназияһының ветеран-педагогтары, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусылары Менәүәрә Әбделхәй ҡыҙы МӘҠСҮТОВА, Рәүфә Мөхөтдин ҡыҙы ИЛЬҺАМОВА, физкультура уҡытыусыһы Вәзих Миңвәғиз улы ӘФЛӘТҮНОВ ҡатнашты.**

# ҺАНЫ - ЕГЕРМЕНСЕ,

## йәки Башҡорт мәғарифында

**Хөрмәтле ҡунаҡтар, әңгәмәбеҙҙе бер аҙ ситтәнерәк башлайыҡ әле. Әле бик күптән түгел беҙҙең социлогтарыбыҙ, демографтарыбыҙ башҡорттарҙың ҡалалашыуының (урбанизация процестарының) ныҡ әүҙемләшеүе хаҡында яҙып сыҡты. Бәғзе бер сәйәсәмәндәребеҙ ҡалаға күсеп килгән башҡорттарҙың үҙҙәренең элекке мәҙәниәтенән ситләшеүе, әммә ҡала мәҙәниәтен үҙләштерә алмауы хаҡында ла саң ҡағып сыҡты. Бик бәхәсле һығымта. Сөнки ҡала мөхитендә лә башҡорттарҙың традицион мәҙәниәте юғалып ҡалманы, ул яңырыш, үҫеш осорон кисерҙе. Тик бер генә етешһеҙлек бәкәлгә һуға ине: 1944 йылда аталары фронтта һәләк булған башҡорт балалары өсөн 9-сы башҡорт мәктәбе асыла, бында, башлыса, республикабыҙҙың башҡорт ауылдарынан килгән балалар уҡый (хәҙер Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты). Баш ҡалабыҙ Өфөлә уҙған быуаттың 60-сы йылдарында ла ҡала башҡорттары өсөн махсус мәктәп булмай. Бәғзе берәүҙәр бының сәбәбен статистика күрһәткестәре аша аңлатырға тырыша. Эйе, 1939 йылда Өфө башҡорттарының иҫәбе ни барыһы 15 400 кеше генә булған, әммә Бөйөк Ватан һуғышы тамамланыуға 30 йыл үтеүгә, йәғни 1970 йылда Өфөлә 54 368 башҡорт кешеһе теркәлә. Улар үҙ балаларын туған телендә уҡытырға теләмәгәнме ни?**

**Менәүәрә Әбделхәй ҡыҙы:** Ни эшләп теләмәһендәр инде, бына 80-се йылдарға тиклем ауылдарыбыҙҙа гуманитар предметтар ғына түгел, математика, физика, химия кеүек фәндәр ҙә башҡорт телендә уҡытылды. Әммә совет осоронда кешеләрҙең аңына систематик рәүештә бер ялған фекер һеңдерелә килде: коммунизм еткәс, милләттәр бөтәсәк, барса халыҡтар берҙәм совет халҡына әйләнәсәк, аралашыу тик бер рус телендә генә барасаҡ. Былдай пропаганда бик көслө булды, ул кешеләрҙең милли үҙаңын бөтөрөүгә йүнәлтелгәйне. Ә баш ҡалабыҙ башҡорттарына килгәндә, һәр ғаиләнең иң кәмендә 4 кешенән тороуын иҫәпкә алған хәлдә, 1970 йылда Өфөлә 13 меңдән ашыу ғаилә йәшәгәнен аныҡлап була. Улар барса предметтарҙы тик рус телендә генә уҡыуға дусар ителгән. Тора-бара ауыл мәктәптәрендә лә балаларҙы рус телендә уҡытыу планлаштырыла. Әгәр ҙә шул саҡта ошо пландар тулыһынса ғәмәлгә ашырылһа, халҡыбыҙҙың 2 - 3 быуыны туған телһеҙ ҡалыр ине.

**Рәүфә Мөхөтдин ҡыҙы:** Йәнә халыҡ араһында киң таралыу тапҡан бер уйҙырма фекер хаҡында ла әйтеп китмәйенсә булмай. Әле генә иҫкә алынған XX быуатта ябай эшселәр, колхозсылар, әгәр ҙә һинең балаң русса уҡымаһа, һөнәри уҡыу йорттарына инә алмаясаҡ, тигәнгә ышана. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ошо рәүешле фекер йөрөтөүселәр әле лә етерлек.

**Тап ошондай ҡатмарлы шарттарҙа Өфөлә йәшәүсе бер төркөм зыялыларыбыҙ тәүҙә башҡорт кластарын, ә һуңынан тәүге ҡала башҡорт мәктәбен астырыу өсөн көрәш башлай. Был ысынлап та көрәш формаһын ала, сөнки төрлө кимәлдә ултырған чиновниктар һәр даим халыҡ теләгенә ҡаршы сыға. Бөгөн беҙ ҡала башҡорт мәктәптәренең флагманы тип атап булған Фатима Мостафина исемендәге 20-се ҡала Башҡорт гимназияның тарихына күҙ һалырбыҙ, ошо сауаплы эштәрҙе башҡарған шәхестәребеҙҙе иҫкә алырбыҙ.**

**Менәүәрә Әбделхәй ҡыҙы:** Власть органдары тәүге мәлдәрҙә беҙҙең активистарыбыҙҙың рухи ынтылыштарын иғтибарға алмаҫҡа, уларҙың йөрәк ялҡынын һүндерергә маташа. "Юҡҡа йөрөйһөгөҙ, баш ҡалала башҡорттар төрлө райондарҙа таралып йәшәй, улар балаларын алыҫ мәктәпкә йөрөтмәйәсәк", - тиҙәр улар. Тап шунан һуң ата-әсәләрҙән балаларын башҡорт мәктәбендә уҡытырға ризалыҡ биреүҙәре хаҡында имзалар йыйыу кампанияһы башлана. Был эшкә зыялыларҙың күбеһе бик теләп тотона. Ошо факт үҙе генә лә ҡала башҡорттарының туған телебеҙгә һыуһағанын, үҙ балаларында булһа ла әсә теленә һөйөү тәрбиәләргә, халҡыбыҙҙың мәҙәниәтен, әҙәбиәтен, тарихын, йолаларын ғәжәп бай телебеҙ аша уларҙың күңел-зиһендәренә һеңдерергә тырышыуын күрһәтеп тора бит!

**Рәүфә Мөхөтдин ҡыҙы**: Эйе, тап шулай. Туған-тыумасаларынан, коллегаларынан, дуҫ-иштәренән, һис бер таныш булмаған ҡала башҡорттарынан имза йыйыусылар араһында беҙ Нияз Мәжитовты, Рәшит Шәкүрҙе, Булат Рафиҡовты, Рәшит Солтангәрәевты, Ноғман Мусинды, Әнүр Вахитовты, Ким Әхмәтйәновты, Шакир Биҡҡоловты һәм башҡаларҙы атап үтә алабыҙ. Ниндәй күркәм шәхестәр - иҫең китерлек. Туған халҡын, уның затлы телен һөйгән ниндәй арҙаҡлы шәхестәребеҙ булған бынан 55 йыл әүәл!

**Менәүәрә Әбделхәй ҡыҙы**: Башҡорт кластары иң тәүҙә 91-се мәктәптә асыла, әммә быға ул саҡтағы мәктәп директоры ҡаршылыҡ күрһәтә, уҡытыу һәм тәрбиә эштәрен алып барыу өсөн тейешле шарттар булдырылмай. Шуға күрә Өфөлә йәшәгән башҡорт интеллигенцияһы нисек итеп булһа ла айырым башҡорт мәктәбен астырыу маҡсатында Өфө һәм республика власы органдарына байтаҡ ҡына имзалар ҡуйылған мөрәжәғәттәр ебәрә башлай. Әйтергә кәрәк, 25 йәшендә үк башҡорт теленә гимн булып яңғыраған "Туған тел" шиғырын ижад иткән шағир Рәми Ғарипов ошондай бер хатҡа беренселәрҙән булып ҡул ҡуя. Башлап йөрөүселәрҙән Иҙел Агишев, Мөхәмәт Иҫҡужин, Әнүр Вахитов, Мәрйәм һәм Диҡҡәт Бураҡаевтар, Әмир Сиражетдинов, Хәниф Вәлиевтар халыҡ араһында аңлатыу эштәрен башҡара.

**Әлбиттә, 20-се ҡала Башҡорт гимназияһы - беҙҙең алдынғы ҡарашлы милли интеллигенциябыҙ емеше. Ғөмүмән, милли рух, милли күтәрелештең 4 осороң билдәләп була. 1917 - 1919 йылдарҙа - ерле автономия өсөн көрәш, 1965 - 1970 йылдарҙа Өфөлә йәшәгән башҡорт зыялыларының башҡорт кластарын һәм айырым милли мәктәп булдырыу өсөн көрәше, 1972 йылдан башлап башҡорт мәктәптәрендә уҡытыу процесын тулыһынса рус теленә күсереүгә ҡаршы сығыу, 90-сы йылдарҙан һуң - автономиялы республикабыҙҙың сәйәси статусын күтәреү, Рәсәй составындағы республика булараҡ, дәүләт суверенитеты идеяһын яҡлап сығыу, башҡорт теленә дәүләт теле статусын биреү, Өфөлә, ҡалаларҙа һәм райондарҙа яңы башҡорт гимназияларын һәм лицейҙарын астырыу буйынса барған оҙайлы эштә зыялыларыбыҙҙың йөрәкһенеп ҡатнашыуына яҡындағы тарих үҙе дәлил.**

**Рәүфә Мөхөтдин ҡыҙы:** Һәр замандың үҙ зыялылары булған, хәҙер ҙә бар, киләсәктә лә буласаҡ. Беҙ уларҙы беләбеҙ, йыш ҡына иҫкә алабыҙ. Беҙгә 20-се ҡала Башҡорт гимназияһына нигеҙ һалыусылар, уларҙың вариҫтары менән бергә эшләргә насип булды. Мәҫәлән, шул уҡ Мөхәмәтғәли ағай Иҫҡужинды, Әмир Сиражетдиновтың улы Салауатты атап китер инем. Мәктәптең тарихына килгәндә, рәсми рәүештә 1970 йылда асылһа ла, балаларыбыҙҙы туған телендә уҡытыу, шуның өсөн яңы башҡорт мәктәбен астырыу мәсьәләһен беренселәрҙән булып Иҙел Миһран улы Агишев башлап ебәрә. 1958 йылда уҡ "Совет Башҡортостаны" гәзитендә уның "Өфөлә башҡорт мәктәбе асырға кәрәк" тип аталған мәҡәләһе баҫылып сыға, әммә ул саҡтағы властар был проблеманы белмәмешкә-күрмәмешкә һалыша. Әммә батыр йөрәкле Иҙел ағай изге эшен туҡтатмай, 1965 йылдан башлап КПСС-тың Өлкә комитетына, Мәғариф министрлығына яңынан-яңы хаттарын, мөрәжәғәттәрен ебәрә, үҙе лә арҡадаштары менән чиновниктар тупһаһын тапай. Әлбиттә, былдай эштәрҙе башҡарыу еңелдәрҙән булмай, өҫтә ултырған власть әһелдәре йәмәғәтселәргә баҫым-ҡыҫым яһауҙы урындарҙағы етәкселәргә тапшыра.

> ***Мәктәптең тарихына килгәндә, рәсми рәүештә 1970 йылда асылһа ла, балаларыбыҙҙы туған телендә уҡытыу, шуның өсөн яңы башҡорт мәктәбен астырыу мәсьәләһен беренселәрҙән булып Иҙел Миһран улы Агишев башлап ебәрә. 1958 йылда уҡ "Совет Башҡортостаны" гәзитендә уның "Өфөлә башҡорт мәктәбе асырға кәрәк" тип аталған мәҡәләһе баҫылып сыға, әммә ул саҡтағы властар был проблеманы белмәмешкә-күрмәмешкә һалыша. Әммә батыр йөрәкле Иҙел ағай изге эшен туҡтатмай, 1965 йылдан башлап КПСС-тың Өлкә комитетына, Мәғариф министрлығына яңынан-яңы хаттарын, мөрәжәғәттәрен ебәрә, үҙе лә арҡадаштары менән чиновниктар тупһаһын тапай.***

**Менәүәрә Әбделхәй ҡыҙы:** "Тырышҡан тапҡан, ташҡа ҡаҙаҡ ҡаҡҡан", тип юҡҡа ғына әйтмәгән халҡыбыҙ. 1967 йылда Министрҙар Советына һәм Мәғариф министрлығына баш ҡалала башҡорт интернат-мәктәбен астырыуҙы һорап ебәрелгән хатҡа 142 ата-әсә ҡул ҡуя. 1968 йылда КПСС Үҙәк Комитетының идеология бүлеге мөдиренә лә шундай уҡ эстәлекле хат китә. Ошо мәсьәлә буйынса партия Өлкә комитетына, КПСС-тың Өфө ҡала комитетына, Өфө ҡала Советына, алдараҡ атап үтелгән юғары органдарға 1968 - 1969 йылдарҙа Өфө зыялыларынан хаттар, мөрәжәғәттәр ҡаттанҡат килеп тора. Башҡорт телен икенсе сорт итеп ҡараған чиновниктар еңелә. Партия һәм башҡарма власть әһелдәре 1967 - 1970 йылдарҙа Өфөлә башҡарт мәктәбен асыу мәсьәләһе буйынса 6 кәңәшмә уҙғарырға мәжбүр була.

**Рәүфә Мөхөтдин ҡыҙы:** Шуныһы ла бик мөһим: ул саҡтағы партия етәкселәре, башҡа чиновниктар Өфө башҡорттарының рухи ихтыяждарын инҡар итә алмай, сөнки балаларын башҡорт мәктәбенә уҡырға бирергә теләүселәр һаны 500-ҙән артып китә. Халыҡ һорауына ярашлы, Башҡорт АССР-ы хеҙмәтсәндәре депутаттарының Өфө ҡала Советы башҡарма комитеты 1970 йылдың 1 сентябрендә ҡаланың Үҙәк баҙарынан йыраҡ булмаған Достоевский урамында төҙөлгән мәктәп бинаһында башҡорт мәктәбен асыу тураһында ҡарар ҡабул итә. Был көндө тарихи ваҡиға тип атап була. Бер төркөм зыялыларыбыҙҙың, ата-әсәләрҙең тап ошо көндә мәктәп бинаһы алдында төшкән фотоһы бар. Уларҙың йөҙҙәренән шатлыҡ бөркөлә: үҙ һүҙебеҙҙе һүҙ иттек, ҙур еңеүгә өлгәштек, тигәндәй улар. Ысынлап та ошо бер көн рухи байрамға тиң, быны бер кем дә инҡар итә алмаҫ.

**Менәүәрә Әбделхәй ҡыҙы**: Беҙгә, миңә, Рәүфә Мөхитдин ҡыҙына, Вәзих Миңвәғиз улына һәм башҡа бик күп коллегаларыбыҙға оҙаҡ йылдар дауамында ошо мәктәптә эшләү бәхете тейҙе. Шуның өсөн беҙ алдараҡ исем-шәрифтәре иҫкә алынған зыялыларыбыҙға рәхмәтлебеҙ. Уларҙың күптәре баҡыйлыҡта, йәндәре йәннәт түрендә булһын тибеҙ.

**Хәҙер ошо тулы урта белем биреүсе уҡыу йорто халҡыбыҙҙың күренекле ҡатын-ҡыҙҙарының береһе - 1955 -1971 йылдарҙа Башҡорт АССР-ының мәғариф министры булып эшләгән Мостафина Фатима Хәмит ҡыҙы исемен йөрөтә. Мәктәпте асыуға уның да ярҙамы булғандыр?**

**Рәүфә Мөхөтдин ҡыҙы:** Ул саҡта мәғариф министры булған Фатима Хәмит ҡыҙы ла Өфө ҡалаһында яңы башҡорт мәктәбен асҡан ваҡытта битараф ҡалмағандыр, сөнки үҙе лә күп хафалар күреп, Өфөләге, һуңынан Стәрлетамаҡтағы башҡорт балалар йортонда тәрбиәләнгән. Әммә ул да Өлкә комитетҡа ҡаршы килә алмаған. 60-сы-70-се йылдар сәйәсәтенә һылтанмай булмай. Барса милләттәрҙән бер совет халҡы яһайбыҙ, тип хыялланды ул осор идеологтары. Улар күп милләттәр, күп телдәр булыуын өнәмәне. 70-се йылдар башында беҙ, Өфөлә уҡыған башҡорт студенткалары, йәмәғәт транспортында башҡортса һөйләшергә ҡурҡа торғайныҡ, сөнки шундуҡ кәмһетә башлайҙар, "апайка аульская", тип мыҫҡыллайҙар. Фатима Хәмит ҡыҙы - ошо системала юғары фазифа биләне. Шуныһы мөһим, ул әүҙем башҡорт йәмәғәтселәренә ҡаршы бер һүҙ ҙә әйтмәй, әммә "өҫтәгеләр"ҙең рөхсәтенән башҡа үҙаллы ҡарар ҙа ҡабул итә алмай. Ғөмүмән, Фатима Хәмит ҡыҙының

✔ ***Беҙҙең уҡыу йортонда яңырыу процестары 1990 йылда директор вазифаһына Хисаметдин Салауат улы Хәйбуллин килгәс башланды. Уның тырышлығы менән мәктәбебеҙ 1992 йылда гимназия статусын алды.***



эшмәкәрлеген баһалаған саҡта уның етәкселеге аҫтында 16 йыл дауамында тотош республика мәғарифының үҫешен, ҡаҙаныштарын иҫәпкә алыу фарыз. Уның кеүек арҙаҡлы башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары менән халҡыбыҙ хаҡлы ғорурлана. Шуға күрә лә 1999 йылда 20-се Башҡорт ҡала гимназияһына Фатима Хәмит ҡыҙы Мостафина исеме бирелде лә инде. Беҙ был ваҡиғаның шаһиттарыбыҙ, шатландыҡ та, ғорурландыҡ та. Гимназияла Ф.Х. Мостафинаға бюст ҡуйылды, уның музейы асылды.

**СССР тарихында уҙған быуаттың 60-сы йылдарын "йылытыу" (оттепель) тигән образ аша һүрәтләйҙәр. Был ул замандағы сәйәсәткә ҡағыла, ләкин тиҙҙән "йылытыу" йән өшөткөс "һыуытыу" менән алышына. Миненсә, коммунистик идеология хөкөм һөргән осорҙа Өфөлә беренсе башҡорт мәктәбе асылыуын ошо сәйәси "йылытыу" шаңдауы тип ҡарап булалыр. Әммә бынан һуң сирек быуат дауамында баш ҡалабыҙҙа бер башҡорт мәктәбе лә асылмай. Тик уҙған быуаттың 90-сы йылдарындағы рухи күтәренкелек ваҡытында ғына был мәсьәлә ыңғай хәл ителә башланы...**

**Менәүәрә Әбделхәй ҡыҙы:** Рухи күтәренкелек, шул осорҙағы зыялыларыбыҙҙың берҙәмлеге булмаһа, 90-сы йылдарға тиклем баш ҡалабыҙҙа бер башҡорт тәре булыуы, уларҙың ҡала мәғарифы системаһында уңышлы эшләүе.

**20-се ҡала башҡорт гимназияһын баш ҡалабыҙҙың милли мәғарифына нигеҙ һалыусы уҡыу йорто, тип атап булалыр?**

**Рәүфә Мөхөтдин ҡыҙы:** Эйе, беҙҙең гимназиябыҙ ябай ғына бер мәктәп түгел ул. Ул - халыҡ мәктәбе, халыҡ тарафынан яулап алынған мәктәп. Уның миссияһы бик юғары һәм үтә мөһим. Шуға күрә ошондай белем йорттарында ҡәҙимгә бер уҡытыусы ғына булып эшләү мөмкин түгел. Һин бында предмет уҡытыусыһы ғына түгел, уҡыусыларыбыҙ һинең милләт өсөн, республикабыҙ өсөн янып-көйөп эшләгәнеңде белеп-күреп торорға тейеш. Уҡыусыларыңа белем-тәрбиә биил ағай Бикбаев дәрестәрҙе шулай уҡ тик башҡорт телендә алып барҙы.

**Хәҙер Башҡортостанда полилингваль гимназиялар селтәренә нигеҙ һалыңды. 1994 йылда Һупайлы биҫтәһендә асылған 136-сы Башҡорт лицейында ла шул уҡ принцип ғәмәлгә ашырылды. Ә полилингваль мәктәптәрҙең иң беренсеһе, башлап ебәреүсеһе әлеге 20-се башҡорт гимназияһы бит инде, шулаймы?**

**Рәүфә Мөхөтдин ҡыҙы:** Тел мәсьәләһенә килгәндә, бына нимә иҫкә төшә. Балаларға инглиз телен өйрәтеү ул саҡта ла модала ине. Мәктәпте асыр алдынан ата-әсәләрҙе ҡыҙыҡһындырыу өсөн, башҡорт теле менән бер рәттән, инглиз телен тәрәнәйтеп өйрәнеү маҡсаты ла ҡуйыла. Мәктәптең ул саҡтағы статусы -

**Рәүфә Мөхөтдин ҡыҙы:** Заман башҡа - заң башҡа, тип әйтһәләр ҙә, 20-се мәктәпте ойоштороусы зыялылар кеүек әүҙем башҡорттар бөгөн дә бар ул. Ҡырҡыуыраҡ ситуациялар килеп сыҡһа, улар тик ятмай, шымып ҡалмай, власть органдарына халыҡ теләген еткереп тора. Ваҡыттар үтеү менән йәмғиәт тә, власть та үҙгәрештәр кисерә, ә мәктәптәребеҙҙә бер быуынды икенсеһе алыштыра. Әлеге көндә лә башҡорт мәктәптәренең хәл итеүҙе талап иткән проблемалары етерлек. Хәҙерге башҡорт интеллигенцияһына 60-сы - 70-се йылдарҙа маҡсатлы ғәмәлдәр атҡарған, туған халҡым, телем тип янған зыялылар өлгө булһын ине. 20-се Башҡорт ҡала гимназияһы йөҙөндә улар үҙҙәренә мәңге емерелмәҫ һәйкәл һалды.

**Белеүебеҙсә, 90-сы йылдар башында 20-се Башҡорт ҡала гимназияһында "Ватан" тип аталған ғилми-ғәмәли үҙәк үҙ эшмәкәрлеген башлай. Уның составында яңы уҡытыу методикалары нигеҙендә автор дәреслектәре төҙөү менән шөғөлләнгән педагог-ғалимдар менән бер рәттән, гимназия уҡытыусылары ла ҡатнаша. Улар ғалим-методистарҙың дәреслектәренә апробация уҙғара, йәғни дәрестәрендә ҡулланып, уларҙың һөҙөмтәлелеген тикшереүҙә ҡатнаша. Ошо хаҡта бер кәлимә һүҙ әйтеп үтһәгеҙ ине.**



# АСЫЛЫ - БЕРЕНСЕ,

## 55 йыл

мәктәбе лә булмаҫ ине. Чиновниктар баҫымы аҫтында, бик күп ауырлыҡтар аша үтеп, улар маҡсаттарына өлгәшә алған. Быйыл Фатима Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт ҡала гимназияһы үҙенең 55 йыллығын билдәләй. Тарихи күҙлектән ҡараһаң, әллә ни күп тә түгел һымаҡ. Әммә ошо ваҡыт арауығында күпме эштәр башҡарылған, күпме ҡаҙаныштарға өлгәшелгән. Гимназиябыҙ милли рух, туған тел рухы менән һуғарылған. 70-се-80-се йылдарҙа мәктәбебеҙҙе тамамлағандарҙың балалары ғына түгел, хатта ейәндәренең балалары ла беҙҙең гимназияға уҡырға килә. Милли-рухи күсәгилешлек бар бында, гимназия милләттәштәребеҙҙе үҙенә тартып тора. Образлы итеп әйткәндә, мәктәбебеҙ мөхитендә ныҡлы быуындар сылбыры хасил булды, ул бер ҡасан да өҙөлмәйәсәк.

**Был миңә суфыйсылыҡтағы силсиләне лә хәтерләтеп ҡуя: суфый остазының үҙ мөриттәре була, ә әлекке мөриттәр, билдәле бер кимәлгә еткәс, остазлыҡ статусына эйә була һәм үҙ мөриттәренә һабаҡ бирә башлай...**

**Рәүфә Мөхөтдин ҡыҙы:** Бик ҡыҙыҡлы һәм фәһемле сағыштырыу. Ысынлап та, тарихи Башҡортостан ерлегендә суфыйсылыҡтың ҙур урын биләгәнен беләбеҙ. Ул дин өлкәһендәге күсәгилешлекте тәьмин иткән. Үҙебеҙҙең балаларыбыҙҙың балалары - ейән-ейәнсәрҙәребеҙ ҙә ошо белем йортона бик теләп, яратып йөрөй. Педагогтарыбыҙ уҡытып, тәрбиәләп сығарған уҡыусыларыбыҙ араһында уҡытыусы һөнәрен һайлағандар күп, уларҙың уҡыусыларының байтағы шулай уҡ педагог һөнәрен үҙ итә, уҡытыусылар династиялары барлыҡҡа килә. Ҡала мөхите өсөн был бик мөһим, сөнки ҙур мегаполиста башҡортлоҡто һаҡлап алып ҡалыуҙың төп сараһы - башҡорт мәктәбе.

реү эшен йөрәгең аша үткәрһәң, мәктәп икенсе тыуған йортоңа әйләнә. Бына Менәүәрә Әбделхәй ҡыҙы ошо гимназияла 40 йыл эшләне, ә үҙем унда 1978 йылда эшкә килгәйнем, 2020 йылда ғына хаҡлы ялға киттем.

**Вәзих Минвәгиз улы, һеҙ ҙә ошо уҡыу йортоноң тәрбиәләнеүсеһе икәнһегеҙ?**

**Вәзих Минвәгиз улы:** Эйе, 1972 йылда ғаиләбеҙ ауылдан, Нуриман районынан, Өфөгә күсеп килде. Тәүҙә ҡустым менән икебеҙҙе яҡындағы 42-се мәктәпкә алып барҙылар. Директоры: "Башҡорт малайҙары булғас, русса насар беләһегеҙ, уҡыуы ауыр булыр, 20-се башҡорт мәктәбенә барығыҙ, рус теленә лә өйрәтерҙәр", - тип кәңәш бирҙе. Шулай итеп, 20-се мәктәптә уҡый башланыҡ. Алыҫтан йөрөп уҡыныҡ, бер өйрәнгәс, китһә лә килмәне унан. Мин бигерәк тә физкультура дәрестәрен яраттым, бик шәп уҡытыусыбыҙ бар ине - Мартинс Владимир Генрихович. Бик талапсан булды: үтекләнмәгән спорт кейемендә залға килеп инеүем дә булды, ул ҡолағымды ҡыҙарткансы бороп та алды, спортсы һәр яҡтан таҙа, бөхтә булырға тейеш, тип, ныҡ итеп киҫәтте. Мин еңел атлетика буйынса мәктәпте һәм башҡа урындарҙа уҙғарылған барса ярыштарҙа ҡатнаштым.

**70-се йылдарҙа ниндәй предметтар башҡорт телендә уҡытылды?**

**Рәүфә Мөхөтдин ҡыҙы:** Башланғыс кластарҙа уҡытыу башҡорт телендә ине. Физика предметын Мөхәмәтғәли ағай Исҡужин өлкән кластарҙа ла башҡортса уҡытты. Тарих фәндәре кандидаты Рау-

инглиз телен тәрәнәйтеп өйрәтеүсе башҡорт мәктәбе. Унан һуң, 20-се мәктәп ҡала үҙәгендә урынлашҡан, бында башҡорт интеллигенцияһы вәкилдәре - сәнғәт әһелдәре, ғалим-ғөләмә, яҙыусылар, радио һәм телевидение хеҙмәткәрҙәре байтаҡ йәшәй. Улар балаларының инглиз телен дә яҡшы белеүен теләй. Мин мәктәптә эшләй башлаған саҡта инглиз теле ҡайһы бер кластарҙа аҙнаһына 10-ар сәғәт уҡытыла ине, инглиз теле уҡытыусылары ла бик күп булды. Шулай итеп, беҙҙең уҡыусыларыбыҙ бер юлы 3 телде - башҡорт, рус һәм инглиз телдәрен өйрәнде.

**Менәүәрә Әбделхәй ҡыҙы:** Асылғандан бирле 24 йыл ғына ваҡыт үтеп китһә лә, 20-се мәктәптең унышлы эшләүе 90-сы йылдарҙа Өфөлә башҡа башҡорт мәктәптәренә юл асты, шуға күрә мин уны ҡала башҡорт мәктәптәренең "әсәһе" тип атау урынлы булыр, тим. Республика кимәлендә башҡорт мәктәптәренең флагманы Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты булһа, баш ҡалабыҙҙа башҡорт балаларына белем һәм милли тәрбиә биреүҙең авангардында Фатима Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт ҡала гимназияһы барыуын ғорурланып әйтә алабыҙ.

**Балаларыбыҙҙа башҡортлоҡ тойғоһон тәрбиәләү - үҙе бер милли идеяға тиң. Алда исем-шәрифтәре атап үтелгән күренекле шәхестәребеҙ менән хәҙергеләрҙе сағыштырһаҡ, беҙҙең быуын артҡараҡ сигенгән, ваҡланған кеүегерәк тойола башлай...**

**Рәүфә Мөхөтдин ҡыҙы**: Беҙҙең уҡыу йортонда яңырыу процестары 1990 йылда директор вазифаһына Хисаметдин Салауат улы Хәйбуллин килгәс башланды. Ул бик талапсан, әммә ижади эшләүсе шәхестәрҙән. Иң элгәре уның тырышлығы менән мәктәбебеҙ 1992 йылда гимназия статусын алды. Артабан - педагогик коллектив эшмәкәрлеген инновацион режимға күсереү төп маҡсат итеп ҡуйылды. Бында вуз ғалимдарының педагогик коллектив менән хеҙмәттәшлеге баһалап бөткөһөҙ. Һөҙөмтәләр ҙә ул осор өсөн иҫ китмәле булды. Башланғыс кластар өсөн башҡорт теле буйынса "Әлифба", 1-4 кластар өсөн "Туған тел" дәреслектәре, улар буйынса программалар һәм методик ҡулланмаларҙан торған "Туған тел" тип аталған уҡыу-методик комплекс эшләнде.

Башланғыс кластар уҡытыусылары БР-ҙың атҡаҙанған уҡытыусыһы Фәниә Сынбулатова, педагогия фәндәре кандидаттары Әлфиә Мәүлиярова һәм Флүрә Аҙнабаева етәкселегендә үҫтереүсе белем биреү технологияларын ҡулланыу тәжрибәһен өйрәнде. Ул саҡта Рәсәй мәктәптәрендә уҡытыуҙа Эльконин-Давыдов системаһын ҡулланыу бик популяр ине, шуға күрә ошо технологияны үҙләштереү маҡсатында Томск ҡалаһына ике йыл рәттән бер төркөм (10-15 кеше) уҡытыусылар командировкаға ебәрелде. Шәхсән үҙем дә унда 2 мәртәбә барып ҡайттым.

Гимназияла физика предметын алып барған фән кандидаты Э.Т. Изергин 7-9 кластар өсөн үҙе төҙөгән физика дәреслектәренә апробация уҙғарҙы, артабан улар федераль компонетҡа индерелде. Шулай уҡ сит тел уҡытыусылары инглиз телен башҡорт теле аша өйрәнеү технологияһы буйынса экспериментала эштә ҡатнашты. Һөҙөмтәлә инглиз теле буйынса яңы уҡыу-методик комплекс хасил булды, уның составына 5-7 кластар өсөн дәреслектәр, эш дәфтәрҙәре һәм тейешле программалар инде.

> ***Беҙҙең гимназиябыҙ ябай ғына бер мәктәп түгел ул. Ул - халыҡ мәктәбе, халыҡ тарафынан яулап алынған мәктәп. Уның миссияһы бик юғары һәм үтә мөһим. Шуға күрә ошондай белем йорттарында ҡәҙимгә бер уҡытыусы ғына булып эшләү мөмкин түгел. Һин бында предмет уҡытыусыһы ғына түгел, уҡыусыларыбыҙ һинең милләт өсөн, республикабыҙ өсөн янып-көйөп эшләгәнеңде белеп-күреп торорға тейеш. Уҡыусыларыңа белем-тәрбиә биреү эшен йөрәгең аша үткәрһәң, мәктәп икенсе тыуған йортоңа әйләнә.***

(Дауамы 10-сы биттә).

✓ ***Инновацион методикаларҙы педагогик ғәмәлиәткә индереү йәһәтенән гимназиябыҙҙың даны бөтә Рәсәйгә билдәле булды, ул йылдарҙа яңыса, заманса уҡытыу буйынса беҙгә тиңләшерлек мәктәптәр һирәк булғандыр.***



# ҺАНЫ - ЕГЕРМЕНСЕ, АСЫЛЫ - БЕРЕНСЕ,

## йәки Башҡорт мәғарифында 55 йыл

**(Башы 8-9-сы биттәрҙә).**

Билдәле ғалимә, лингвист Лена Ғәли ҡыҙы Саяхова рус теле һәм әҙәбиәте буйынса гимназиябыҙҙың уҡытыусылары менән тығыҙ бәйләнештә булды. Ул башҡорт мәктәптәре өсөн рус теле буйынса бер нисә дәреслек әҙерләне. Ул төҙөгән "Слово" дәреслегенә апробацияны миңә уҙғарырға насип булды. Ғалимә шулай уҡ төрки телле мәктәптәр өсөн рус теле дәреслеген әҙерләне, мин уның буйынса ике йыл дауамында дәрестәр уҙғарҙым. Һуңынан был дәреслек Санкт-Петербургта баҫылып сыҡты.

**Менәүәрә Әбделхәй ҡыҙы:** Рәүфә Мөхәтдин ҡыҙы - үҙ предметының "генералы" ул! Генерал ғына түгел, башҡорт мәктәбендә рус телен уҡытыу методикаһына әллә күпме новациялар индергән генератор ҙа. Уның кеүек методик технологияларҙы ғәмәлдә ижади ҡуллана белеүсе уҡытыусылар бик һирәк осрай. Дөйөм алғанда, ул йылдарҙа 20-се Башҡорт гимназияһында барса предметтар буйынса тиерлек альтернатив программалар һәм дәреслектәр төҙөү юлға һалынды. Мәҫәлән, географиянан - геология-минералогия фәндәре кандидаты, һуңынан педагогия фәндәре докторы Владимир Суховтың, химиянан - биология фәндәре кандидаты, профессор Сәниҙә Һатыбалдинаның, инглиз теленән - педагогия фәндәре кандидаты, 20-се Башҡорт гимназияһында ла уҡытыусы булып эшләгән Мирхәт Хәсәновтың дәреслектәре юғары баһаға лайыҡ булды. Инновацион методикаларҙы педагогик ғәмәлиәткә индереү йәһәтенән гимназиябыҙҙың даны бөтә Рәсәйгә билдәле булды, ул йылдарҙа яңыса, заманса уҡытыу буйынса беҙгә тиңләшерлек мәктәптәр һирәк булғандыр.

**Ғәҙәттә, пединститутты йәки университетты тамамлап сыҡҡан йәш уҡытыусылар дәрес биреү менән шөғөлләнә, уларҙа ижади импульс булмай тиерлек. Бынан арыныр өсөн башҡа педагогтарҙың дәрестәренә, методик конференцияларға йөрөргә, уларҙа әүҙем ҡатнашырға кәрәк. Гимназияла шундай эштәр күп булғандыр?**

**Менәүәрә Әбделхәй ҡыҙы:** Асыҡ дәрестәрҙең дә, ғилми-ғәмәли конференцияларҙың да иҫәбе-һаны булманы. Тора-бара уҡытыусыларыбыҙ оҫталар кимәленә күтәрелде, улар үҙҙәре лә мастер-кластар уҙғара алды.

**Рәүфә Мөхәтдин ҡыҙы**: "Ватан" ғилми-ғәмәли үҙәгенең ғалим-методистары беҙҙең остаздарыбыҙға әйләнде. Беҙ өйрәнгән-белгәнде башҡалар ҙа үҙләштерә алһын өсөн беҙҙең барса дәрестәребеҙ ҙә асыҡ тип иғлан ителде. Гимназияға ҡунаҡтар йышланы: ҡала мәктәптәренән генә түгел, Силәбе, Ырымбур, Пермь, Курган һәм башҡа өлкәләрҙән дә беҙҙең тәжрибә менән танышырға, уны үҙләштерергә теләүселәр күп булды. Һис йыбанмайынса, һәр береһенә асыҡ дәрестәр күрһәтә инек.

**Менәүәрә Әбделхәй ҡыҙы:** Ғалимдар үҙ методикаларының үҙенсәлектәрен, алымдарын беҙҙең дәрестәребеҙ аша һынай, кәрәк икән, үҙгәрештәр индерә. Улар менән иңгә-иң терәп эшләүе күңелле булды. Маҡсатыбыҙ бер: уҡыусыларыбыҙҙы интеллектуаль яҡтан үҫтереү, үҙең уҡытҡан предметҡа һөйөү тәрбиәләү. Ғалимдар ҙа дан-шөһрәт өсөн килеп йөрөмәне, ә уларҙың ярҙамы эҫе мәлдә һыуһап йөрөгән кешенең һыуһынын ҡандырғандан да ҡиммәтерәк итеп ҡабул ителде.

***Ғалимдар үҙ методикаларының үҙенсәлектәрен, алымдарын беҙҙең дәрестәребеҙ аша һынай, кәрәк икән, үҙгәрештәр индерә. Улар менән иңгә-иң терәп эшләүе күңелле булды. Маҡсатыбыҙ бер: уҡыусыларыбыҙҙы интеллектуаль яҡтан үҫтереү, үҙең уҡытҡан предметҡа һөйөү тәрбиәләү. Ғалимдар ҙа дан-шөһрәт өсөн килеп йөрөмәне, ә уларҙың ярҙамы эҫе мәлдә һыуһап йөрөгән кешенең һыуһынын ҡандырғандан да ҡиммәтерәк итеп ҡабул ителде.***

**Рәүфә Мөхәтдин ҡыҙы:** Ғалимдар алдында илке-һалҡы, насар эшләп булмай, ояты ни тора! Бик тырыша инек. Лена Ғәли ҡыҙы Саяхова, Рәшит Вәлиәхмәт улы Әлмөхәмәтов, Флүрә Фәтхи ҡыҙы Аҙнабаева, Лира Шәрип ҡыҙы Камаловалар шәхсән үҙемдең остаздарым булды, улар мине ижади эшләргә өйрәтте. Унан һуң, гимназиябыҙҙа алдынғы башҡорт интеллигенцияһының балалары күп булды, уларҙы нисек етте, шулай уҡытып булмай бит. Юғарыраҡ кимәлгә күтәрелергә тырышаһың инде. Ғалим-методистарыбыҙҙың хуплауын тыңлағанда ҙур ҡәнәғәтләнеү тойғоһон кисерәһең.

**Интеллект, аҡыл - шәхестең бер генә яғы. Унан башҡа йәмғиәттә йәшәгән кешегә әхлаҡлы, кешелекле, рухлы булыу, ватансыллыҡ һәм башҡа социаль сифаттарға эйә булыу фарыз. Оло, көслө, рухлы шәхестәрҙең юл башы - бала сағында. Уҡытыу процестары тәрбиә менән ҡуша барғанда ғына мәктәп үҙенә тәғәйен бурыстарын тулыһынса һәм камил рәүештә үтәй аласаҡ...**

**Менәүәрә Әбделхәй ҡыҙы:** Әлбиттә, гимназиябыҙҙа һәр йыл һайын планға индерелгән тиҫтәләрсә тәрбиәүи саралар үткәреләә, кластарҙа ла, дөйөм мәктәп кимәлендә лә. Йәш үҫмерҙәргә өлгө кәрәк, улар күңелдәре менән ҡабул иткән кешеләргә оҡшарға тырыша. Шуға күрә гимназияға Өфөлә йәшәгән билдәле шәхестәребеҙҙе уҡыусылар менән осрашыуҙарға йыш саҡыра инек. Яҙыусылар, шағирҙар, сәнғәт әһелдәре, фән эшмәкәрҙәре, эшҡыуарҙар, башҡа бер һөнәр оҫталары саҡырыуыбыҙҙы ҡабул итеп, балалар менән ихлас аралашты. Тере саҡтарында Фатима апай Мостафина, Зәйнәб Биишева, Мостай Кәрим, Ноғман Мусин кеүек шәхестәр менән осрашыу уҡыусыларҙа ҙур тәьҫораттар ҡалдырғандыр. Уларҙың әҫәрҙәрен дәрестәрҙә өйрәнеү - бер нәмә, ә осрашып, яҡындан тороп күреп, һорауҙарына биргән яуаптарын тыңлау - бөтөнләйгә икенсе, хисле хәтирәләр менән бәйле.

**Уҡыусыларҙың физик үҫешенә, һаулығына, тән һәм рух ныҡлығына физкультура дәрестәре, спорт менән шөғөлләнеү ыңғай тәьҫир итә. Ошо хаҡта ниҙәр әйтер инегеҙ?**

**Вәзих Минвәғиз улы:** 20-се гимназия уҡыусыларының спорт коллективы йыл һайын төрлө ярыштарҙа әүҙем ҡатнаша, призлы урындарға лайыҡ була. Рәсәй, республика, ҡала һәм район кимәлендә ойошторолған күләмле спорт сараларында айырым уҡыусыларыбыҙ ҙа, йыйылма командаларыбыҙ ҙа һәр даим сығыш яһай. Мәҫәлән, "Милләттәр кросы-2024", "Рәсәйҙең саңғы юлы-2025" Бөтә Рәсәй ярыштарында, "Яңы йылдың ғаилә старттары"ның мәктәп, район һәм республика этаптарында ҡатнаштыҡ.

Футбол, волейбол, баскетбол буйынса йыйылма командаларыбыҙ бар. "Күн туп" ярыштарының муниципаль этабында 2010-2011 йылдарҙа тыуған ҡыҙҙар командаһы 3-сө урын, шул уҡ йылғы малайҙар - 2-се урын, ә 2012-2013 йылғылар - 3-сө урын алды. 2014-2015 й.й. ҡыҙҙар командаһы зона этабында 3-сө урынға сыҡты.

Гимназия спортсыларының "Батыр" командаһы (5-се кластар) - Бөтә Рәсәй "Президент ярыштары"ның, 2010-2011 йылдарҙа тыуғандар еңел атлетика буйынса "Үҫмерҙәр шиповкаһы"ның муниципаль этабында ҡатнашты. Йәйәселәрҙең уҡ атыу буйынса ярыштарының зона этабында Хәсәнова Азалия - 1-се, Хөсәйенов Мансур - 3-сө урын алды.

Башҡортостан Республикаһы көнөнә арналған "Еңел атлетика кросы"нда ҡыҙҙарҙың "Батыр" командаһы 3-сө урынға лайыҡ булды. Волейбол һәм баскетбол буйынса йыйылма командаларыбыҙ ҙа төрлө ярыштарҙа уңышлы сығыш яһай.

2024-2025 уҡыу йылы миҙгелендә Уҡыусылар спартакиадаһы сиктәрендә "Спорт, һаулыҡ, дуҫлыҡ" тип аталған физкультура һәм спорт фестивалендә гимназия спортсылары "Спорт оҫталығы" номинацияһында - 2-се, "Мәктәптә физкультура-һауыҡтырыу һәм спорт-масса эше" номинацияһында 3-сө урын алды.

### ШУЛАЙ ИТЕП...

**Һәр мәктәп уҡытыусылары менән генә түгел, бигерәк тә шул мәктәпте тамамлап, ҙур тормош юлына сыҡҡан уҡыусылары менән данлы.**

**Мостафина Фатима Хәмит ҡыҙы исемендәге 20-се Башҡорт ҡала гимназияһын 55 йыл эсендә бер нисә мең уҡыусы тамамлаған: ниндәй генә һөнәр эйәләре юҡ улар араһында! Маҡтанып үә ғорурланып, исем-шәрифтәрен аҡҡа төшөрөрлөктәре лә бик күп был белем һәм тәрбиә усағының. Иң-иңдәрен атап үтеү урынлы булыр:**

**Башҡортостандың халыҡ артисы, бейеүсе Рафаэль Амантаев; яҙыусылар, бер туған Зөһрә һәм Илгизәр Бураҡаевтар; БР-ҙың халыҡ артисы, "Ант" төркөмө етәксеһе Алмас Ғафаров һәм уның бер туған ағаһы Илдар Ғафаров; Башҡортостандың атҡаҙанған табибы Айрат Ғүмәров; юридик фәндәр кандидаты, Башҡортостандың атҡаҙанған юрисы, 2009-2014 йылдарҙа БР-ҙың Конституция Суды рәйесе Люциә Ғүмәрова; Башҡортостандың атҡаҙанған юрисы Рәмзиә Ғүмәрова; тарихсы, башҡорт милли философияһына нигеҙ һалыусы Салауат Ғәлләмов; төрлө һөнәр эйәләре, бер туған Әнүәр, Әкрәм, Таһирйән һәм Ирек Ғәниевтар; композитор, БР-ҙың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Урал Иҙелбаев; философия фәндәре кандидаты, юғары мәктәп уҡытыусыһы Ләйсән Сөләймәнова; бейеүсе, БАССР-ҙың атҡаҙанған артисы Хәлил Ишбирҙин; техник фәндәр кандидаты, полковник Илшат Ишемов; билдәле башҡорт кинорежиссеры Булат Йосопов; юстиция полковнигы, Башҡортостандың атҡаҙанған юрисы Ришат Йосопов; техник фәндәр кандидаты, юғары мәктәп уҡытыусыһы Айгөл Камалиева; сәйәсәт фәндәре кандидаты, дәүләт эшмәкәре Гөлдәр Камалова (Шәкүрова); иҡтисад фәндәре кандидаты Салауат Ҡаҙиров; медицина фәндәре кандидаты Сәғит Ҡазбулатов; рәссам-иллюстратор, "Урал батыр" эпосын һүрәттәр менән биҙәүсе Азат Ҡужин; дәүләт эшмәкәрҙәре Фәрзәнә һәм Гөлшат Мусиналар; фән докторҙары, профессорҙар Юлай һәм Айбулат Псәнчиндар; биология фәндәре кандидаты, ғалим-селекционер, РФ-ның атҡаҙанған урман белгесе Фәриҙә Саҙиҡова; филология фәндәре кандидаты, башҡорт теленең Машина фондына нигеҙ һалыусы Зиннур Сиражетдинов; электрон дәреслектәр авторы, 2000-2003 йылдарҙа 20-се гимназияла директор урынбаҫары һәм информатика уҡытыусыһы булған Салауат Сиражетдинов; химия фәндәре кандидаты Сабит Солтанов; тарих фәндәре кандидаты, археолог Әлфиә Солтанова; БР-ҙың атҡаҙанған рәссамы Жәлил Сөләймәнов; медицина фәндәре кандидаты Салауат Туйсин; дәүләт эшмәкәре Юлдаш Ураҡсин; филология фәндәре кандидаты Нәркәс Хөббитдинова (Сөләймәнова); дәүләт эшмәкәре Урал Хәсәнов; медицина фәндәре кандидаты, БР-ҙың атҡаҙанған табибы Илдар Һиҙиәтов; медицина фәндәре докторы Гөлнур Һиҙиәтова; филология фәндәре кандидаты, яҙыусы, сценарист-драматург Шәүрә Шәкүрова; философия фәндәре кандидаты, юғары мәктәп уҡытыусыһы Наилә Әбүзәрова; театр режиссеры, БР-ҙың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, БР-ҙың С. Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты Айрат Әбүшахманов; Башҡортостандың халыҡ артисы, арҙаҡлы ҡурайсы Роберт Юлдашев һәм башҡалар, һәм башҡалар.**

**Мостафина Фатима Хәмит ҡыҙы исемендәге 20-се Башҡорт ҡала гимназияһының педагогик коллективын, уҡыусыларын, ата-әсәләрен, уны тамамлап сыҡҡан барса милләттәштәребеҙҙе ошо белем усағының данлы юбилейы менән ихлас ҡотлайбыҙ, киләсәктә тағы ла бейегерәк үрҙәр яулауҙарын теләйбеҙ.**

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ әңгәмә ҡорҙо.**

***✓ Һыу өҫтөндәге тулҡындар көсәйгәндән көсәйә, әйтерһең, серле ҡараңғылыҡта йылҡы өйөрө уйнай! Күҙҙәремде алма кеүек таһрайтып ҡарап ултырһам, йә Хоҙай, һыу аҫтынан мөһабәт үгеҙ башы ҡалҡып сыҡмаһынмы!***



Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВ

# ИСЕМЕМ – АЛАҠАЙ

(Донъяуи хикәйә)

Сәй эсеүҙең иң ҡыҙған мәле. Башҡа ҡунаҡтарҙың йөҙҙәре иҫтә ҡалмаған, ә бына өләсәйемдең ялпаҡ түңәрәк бите бөгөнгөләй иҫемдә. Унлап сынаяҡ сәйҙе бушатҡанлыҡтан, өләсәйемдең йөҙө бөрсөк-бөрсөк тир менән ҡапланғайны, ә ике сикәһе һәм танау остары майланған кеүек ялтырай ине. "Ғәйзә апай, иҫендәме икән Һаҡмарҙа элегерәк һыу һыйырҙары йәшәгәне?" Өләсәйем ошо һүҙҙәрҙе әйтте лә быуҙары сығып торған сәйҙән бер тына һемереп алды. Йәтеш кенә көүҙәле оло йәштәге ҡатын, "эйе" тигәнде аңлатып, баш һелкте. "Элек Һаҡмар туғайҙары йырып үткеһеҙ шырлыҡ булды бит, - тип һүҙен дауам итте өләсәйем. - Һаҡмар һыуҡайҙары ҡара көмөш булып ярҙарын мөлдөрәмә тултырып аға торғайны. Иҙрестән түбәнерәк урындарҙа кисеү табыуҙары ҡыйын булды.

Онотмағанһығыҙҙыр әле, ун йыл элек кенә әле Муллаҡай һаҙында бер йәтим егеттең башын уя сабып һәләк иттеләр. Хәҙер шул һаҙлыҡ урындары ҡола ялан бит... Элгәре Һаҡмар һыуҡайҙары таҙа ла, мул һыулы ла булды. Шул саҡтарҙа тәрән ятыуҙарҙа һыу һыйырҙары йәшәне. Шундай ятыуҙарҙың береүһе бынан алыҫ түгел урында - Байрамғол эргәһендә - булды. Әбүбәкер ағайымдың үҙе күргәнен һөйләп китәйем, булмаһа".

Ошо һүҙҙәрҙе ишеткәс тә, минең менән ғәжәйеп хәл булды: көн төнгә әйләнде, ә йәнем Әбүбәкер олатайымдың кәүҙәһенә инеп ултырҙы!

...Имеш, юғалған ике бейәмде эҙләп йөрөйөм. Байым тирәһен байҡап сыҡҡанмын да, Мәмбәт кисеүен үтеп, Иген тауына ыңғайлағанмын. Ул тирәне байҡаштырғас, Ҡарасайылға яғына боролғанмын да, унда ла йылҡыларымды тапмағас, юлһыҙниһеҙ Байрамғол ятыуына ҡарай атлағанмын. Ятыу эргәһендәге туғайлыҡҡа аяҡ баҫыуыма, ҡыҫҡа йәйге төндөң иң ҡараңғы мәле килеп еткәйне.

Япраҡтарына, таждарына ысыҡ ҡунған сәскә-үләнде айҙың күкһел нурҙары көмөш кеүек иттереп ялтыратып ҡуйған саҡ. Бөтә туғай, еңелсә томанды бөркәнеп, йоҡлағандай тойола. Тәбиғәттең хозурлығына иҫем китеп бара торғас, йылғаға барып еткәнемде һиҙмәй ҙә ҡалғанмын. Әҙерәк шөрләйем үҙем, сөнки Һаҡмар һыуҙарының серҙәре хаҡында ишеткәндәрем әҙ булманы. Яр ситенә әллә ни яҡынламай китеп барһам, ай юлының һары таҫмаһын боҙоп, беленер-беленмәҫ кенә шаҙра йүгереп үтте. Бер аҙҙан шаҙра еңелсә тулҡындарға әйләнде. "Әллә йәйен, әллә сурағай уйнай инде", - тигән уй килде башыма. Ҡыр өйрәктәренең сабыр ғына быжҡылдашыуын ишеткәс: "Ысынлап та, эре балыҡ берәй бәпкәне йоторға самалай, ахырыһы", - тип мыңғырлап ҡуйҙым.

Шул саҡ йылға өҫтө ҡайнай башламаһынмы! Ҡурҡышымдан, "йылп" итеп тал төбөнә боҫҡанымды һиҙмәй ҙә ҡалдым. Ә һыу өҫтөндәге тулҡындар көсәйгәндән көсәйә, әйтерһең, серле ҡараңғылыҡта йылҡы өйөрө уйнай! Күҙҙәремде алма кеүек таһрайтып ҡарап ултырһам, йә Хоҙай, һыу аҫтынан мөһабәт үгеҙ башы ҡалҡып сыҡмаһынмы! Кәүҙәһе әле күренмәгән үгеҙ тәрән итеп тын алды ла, башын сайҡап, ауыҙ-моронон һыуҙан таҙартты. Шунан, ауыр баҫып, ярайһы ғына текә ярға менә башланы. Башын олпат тотоп, ярға сыҡты, бөтә кәүҙәһен кинәт дерелдәтеп, булған ғына һыуҙы тиреһенән һелкеп төшөрҙө.

Бына иҫ киткес ҙур һәм мөһабәт үгеҙ сыҡҡан яғына әкрен генә боролдо. Бер аҙ ҡалҡа биреп, мин дә шул яҡҡа күҙ һалдым. Һыуҙы ҡайнатып өҫкә сығып килгән биш-алты һыйырҙы күреп, иҫ-аҡылым китә яҙҙы. Үгеҙ, борғо тауышына оҡшатып, әкрен генә үкереп ебәрҙе. Был ауаз һыу һыйырҙары өсөн әмер кеүек яңғыраны: улар бөтәһе лә, боролмайынса, кире сигенә башланы. Һыйыр баштары бер-бер артлы һыуға батты, һәм ятыу өҫтө тағы көҙгө кеүек ҡатып ҡалды. Һыу үгеҙе иһә һалмаҡ ҡына кире боролдо, башын юғары күтәреп, кеше ҡолағы ишетмәгән ауаздар сығарҙы. Ерҙә йәшәгән мөгөҙлө һөйәркәһен саҡыра ине ул. Бына алыҫтан яуап ауаздары ишетелде, һәм үгеҙ шул яҡҡа ыңғайланы. Туғай уртаһында малҡайҙар осрашты, бергәләп үлән ашаны. Шунан үгеҙ ер һыйырын ҡасырҙы ла үҙ донъяһына кире ҡайтып китте...

Ошо урында төн яңынан көнгә әйләнде, һәм мин, ҡайтанан малайға әйләнеп, әсәйемдең уң яғындағы түшәктә һуҙылып ятҡанымды аңлап алдым. Ҡараһам, өләсәйем, хәбәрен туҡтатып, тирләгән битен ҡулъяулығы менән һөртә ине. Эшен бөткәс, ҡулъяулығын дүрткә бөкләп, кеҫәһенә һалды ла һәр һүҙен йотлоғоп тыңлаған ҡунаҡтарға һынаулы ҡараш ташлап алды. Йәнәһе, беләм мин һеҙҙең ниндәй һорау бирергә теләгәнегеҙҙе! Ысынлап та, йәшерәк ҡатындар араһынан кемдер ҡыйыр-ҡыймаҫ ҡына тауыш менән: "Һыу һыйырҙары аҫта нисек тын алалар икән? Нисек тонсоҡмайҙар икән?" - тип һораны. Өләсәйем һорау биреүсегә ҡарамайынса йомшаҡ итеп көлдө лә: "Хоҙайҙың хикмәттәре сикһеҙ күп бит ул. Элгәре башҡорт ерҙәре һәр төрлө мөғжизәгә ифрат бай булған. Бөгөн ҡуян-төлкө нисек йәшәһә, шүрәлеләр, быуар йыландар, сәмреғоштар ҙа шулай тереклек иткән борон. Хатта йөнтәҫ филдәр ҙә йәшәгән беҙҙең яҡтарҙа. Кеше ҡырып бөтөргән уларҙы. Ирәндек аръяғында бер-ике шүрәле әле лә йәшәй, тип һөйләйҙәр. Мөжәүир хәҙрәткә барғанымда Ғәли ауылынан Нуретдин тигән егет һөйләп ултырҙы. Үҙе күргән икән. Урғаҙаға ат һуғарырға төшһә, шунда йөрөй, ти шүрәле. Булмаҫ, тимә. Ғәли ауылының икенсе исеме Шүрәле", - тине.

Шунан өләсәйем бәйән итеүҙәрендә Бөрйән яҡтарына сығып китте. Әбүбәкер ағаһы менән нисек һыу аҫты йылҡыларын ҡарарға барыуҙары хаҡында һөйләй башланы. "Тәүҙә Ишей сыҡтыҡ, шунан Мендәғолға юл тоттоҡ. Тиҫтәгә яҡын ауылды үтеп, Йылҡысыҡҡан тигән күлгә яҡын ғына ятҡан утарҙа туҡтаныҡ. Унда үҙенең ҡасан тыуғанын да онотҡан бер ҡарт йәшәй ине. Ваҡытында ул хырансустарҙы яҡшы туҡмағаны өсөн Ҡотдос тигән түрәнән булат ҡылыс алған, тип һөйләгәндәре иҫтә ҡалған. Ғәләмәт ҙур танаулы бер хырансустың танауын уғы менән тишә атҡан башҡорт та шул, тигәндәй булдылар. Ни булһа ла, шул бабай ғына һыу аҫты йылҡыларын күрһәтә алыр, тигәстәр, уның аяғына барып йығылдыҡ инде. Бабай тәүҙә бер килке беҙҙе кире ҡайтырға өндәне. Тыңламағас, бер аҙна буйы бесән эшләшһәгеҙ, ай тулғас күрһәтермен тип, ризалашты.

Ай батмус кеүек булып тулғас, киттек күл буйына. Көтөп оҙаҡ ултырҙыҡ. Төн уртаһы еткәс, күл аҫты ҡапыл яҡтырып киткән кеүек булды ла күҙ алдыбыҙҙа туғай һымаҡ нәмә пәйҙә булды. Шул туғайҙы тултырып, алма-сыбар аттар утлап йөрөмәһенме! Аптырауҙан ауыҙҙарыбыҙҙы асып,ябырға ла өлгөрмәнек, яҡтылыҡ әкренләп һүрелде. Туғай ҙа юҡ булды, аттар ҙа күҙҙән юғалды".

Өләсәйем һөйләгәндәрҙән сығып, мин шундай һығымтаға килдем. Алаҡайыбыҙ ана шул һыу һыйырҙары тоҡомонан икән. Шуға ла ул - кеше кеүек аҡыллы, эт кеүек һиҙгер, ат кеүек тоғро йән эйәһе. Был малҡайҙы, әле тана көйө генә, Байым өләсәйем - атайымдың әсәһе Хөмәйрә - улының туйында йәштәргә бүләк итеп бирә. Атайым менән әсәйем, тағы ошо тана ғаиләбеҙҙең тәүге нигеҙ таштары булған. Беренсе балалары - минең өлкән ағайым - тыуыр алдынан ғына Алаҡай ҙа тәүге тапҡыр быҙаулай. Был ваҡытҡа һыйыр әсәйемә шул тиклем эҫенеп китә, хатта яңы тыуған баланы дошманы кеүек ҡабул итә. Йәй аҙаҡтарында әсәйем бәпәйен тәүге тапҡыр күтәреп сыҡҡанында, ала һыйыр асыулы мөңрәп, уларға табан ыңғайлай һәм сабыйҙы мөгөҙөнә элергә самалай. Әсәйем, был хәлгә аптырап, ошо хаҡта Ҡуян өләсәйемә һөйләй. "Тимәк, Алаҡайың һине сабыйға көнләшә. Малайыңды ҡараштырып йөрө. Берәй бәләгә осрамаһын". Ошо һүҙҙәрҙе иҫендә тотоп, балаһы ҙурая төшкәс, әсәйем улына шундай кәңәш биреп ҡуя: "Һыйыр үҙеңә яҡынлай башлаһа, сыбыҡ ал да арҡаһына һуҡ".

Йәйге кистәрҙең береһендә дүрт йәшен әле генә тултырған ағайым, яланаяҡ, ыштанһыҙ көйө, өҫтөнә киң итәкле күлдәк кейгән килеш ҡапҡа бағанаһы эргәһендә урағылап йөрөгән. Алыҫтан Алаҡайҙың ҡайтып килеүен күреп, тиҙ генә тал сыбығы әләктереп алған да, ҡуҡырайып, яңынан ҡапҡа төбөнә баҫҡан. Алаҡай үҙен күҙенә лә элмәй эргәһенән үтеп барғанын күргәс, ағайым быны шулай аңлаған: йәнәһе, һыйыр уның сыбығынан ҡурҡҡан. Үҙенең ҡыйыулығына үҙе һоҡланып, һыйыр артынан йүгергән һәм ихатаға ингән урында һыйырҙың ҡабырғаһына шыйтылдата һуғып алған. Алаҡай, әйләнеп тә ҡарамай, башын тәкәббер тотоп, юлын дауам иткән. Һыйырҙың бындай ҡыланышын ағайым тағы үҙенең ғәйрәтенә ҡайтарып ҡалдырған - малдың арҡаһына икенсе мәртәбә һуҡҡан. Бына шул саҡта Алаҡайҙың түҙемлеге бөткән: кинәт кенә әйләнеп, башын аҫҡа эйгән һәм шул ыңғайы кире күтәргән. Ағайым әҙ генә ауыҙын асып торһа, осло мөгөҙ уның ҡорһағын һис шикһеҙ ярып үтер ине. Бәхетенә күрә, арҡаһы менән боролоп өлгөрә ул, һәм осло мөгөҙҙәрҙең береһе уның күлдәк сабыуынан ғына әләктереп ала.

Йәберләүсеһен алыҫҡараҡ атып бәреү ниәте менәндер инде, Алаҡай, муйынын дуғаландырып, башын һалмаҡ ҡына уңлы-һуллы сайҡарға керешә. Һыйыр башын уңға сайҡағанда, ағайым "әсә-ә-әй!" тип һөрәнләй, һулға сайҡағанда "әлә-кә-ә-й!" тип ҡысҡыра икән. Асыуы ҡабарған һыйыр башын иң ныҡ күтәргәнендә, ҡул-аяғын сатай-ботай болғап әүһәләк эйеп йөрөгән ағайым, таҫыллыҡ күрһәтеп, асыҡ ҡапҡаның өҫкө мөйөшөнә сат йәбешеп өлгөрә. Йәбешә лә өҫкә менә, ҡапҡаның һыртына тиҙ-тиҙ баҫып, бағана яғына йүгерә. Барып еткәс, бағананы ныҡ итеп ҡосаҡлап ала. Был мәлдә ала һыйыр мөгөҙөндәге йөктең ҡайҙа ғәйеп булыуын асыҡлай алмай аҙаплана икән. Башын аҫҡа эйеп ерҙе лә еҫкәп ҡарай, әйләнеп-әйләнеп, ҡойроҡ яҡтарын да ҡараштыра. Тапмағас, хатта урам яғына ла юртып сыға. Һыйырҙың өйөрөлөп-өйөрөлеп аҫта йөрөгәнен күргәс, ағайым, сысҡан кеүек йүрмәләп, ҡапҡа бағанаһының иң осона менеп китә. Өҫкә менгәс, тауышһыҙ ғына шунда боҫоп ултыра.

Был ваҡиғаға күршебеҙҙә йәшәгән Менәүәрә инәй шаһит була. Тап ошо ваҡытта ул, беҙҙең ихатаға ҡарап торған ике тәҙрәһенең береһен асып, ойоҡ бәйләп ултырған була. Ағайымдың бағана осона менеп боҫоу тарихы ҡағыҙ битенә төшөргәндә генә оҙаҡ дауам иткән кеүек тойола. Ысынында иһә был ваҡиға шундай тиҙ үтә, Менәүәрә инәй, аҙаҡтан әйтеүенсә, ул ҡурҡырға ла, ҡысҡырырға ла өлгөрә алмай ҡала. "Йөрәгем дөп-дөп итеп типкәнен генә абайлап ҡалдым, Фәрит бағана башына менеп тә ултырҙы", - тип тулҡынланып һөйләгән ул атайым менән әсәйемә ошо мажара хаҡында.

Һөйләп кителгән ваҡиға ғаиләбеҙ тормошона ҡағылышлы иң тәүге ҡыҙыҡлы тарих булғандыр. Мин ул мәлдә яңыраҡ ҡына тыуып ятҡан булғанмын, шуға был ваҡиға миңә атайым-әсәйем, ағайҙарым һөйләүенән генә билдәле булды. Ҙурая төшкәс, мин Фәрит ағайымдың өҫкә үрмәләгән урындарын ҡарап сыҡтым да эстән генә: "Булмаҫ!" - тип мыңғырлап ҡуйҙым. Дүрт йәшлек бала нисек бер иле ҡалынлыҡтағы таҡта остарына баҫып, өлкәндәрҙең өс аҙымына торошло араны йүгереп үтһен инде?! Тарттырылған арҡан буйлап йөрөү менән бәрәбәр бит был! Ярар, йүгереп тә үтһен, ти. Ә бына бер ҡоластан аҙ ғына ҡайтышыраҡ бүрәнә башына нисек үрмәләп менә алһын ул! Быныһы бөтөнләй башҡа һыймаҫлыҡ эш! Ҡойма башына менеп ҡарап торҙом: бүрәнәнең һерәйеп торған өлөшө ун йәшлек бала бейеклегендәй булыр, артыҡ булмаһа әле. Өҫтәүенә шып-шыма итеп йышылған. Дүрт йәшлек баланың шул бүрәнә башына менеп, ҡаршы яҡҡа ҡоламай, боҫоп ултыра алыуына мине бер кем дә ышандыра алманы.

**(Дауамы. Башы 38-се һанда).**

ИНТЕРНЕТТАН



# КЕМ КҮПМЕ БИҘӘНӘ?

■ Ғалимдар иҫәпләп сығарыуынса, ҡатын-ҡыҙ биҙәнеү өсөн йылына 91 сәғәт исраф итә икән. Ғүмер оҙайлығын уртаса 70 йәш тип алабыҙ икән, ҡатын-ҡыҙ косметикаға ғына 43 аҙна бүлә. Әммә төрлө төбәктә йәшәгән гүзәл заттарҙы айырып ҡарай башлаһаң, был уртаса һандар бер-береһенән айырылып тора. Мәҫәлән, көньяҡта йәшәүселәр төньяҡта йәшәүселәргә ҡарағанда макияжға ваҡытты күберәк бүлә. Йылы яҡта көн итеүселәр араһында биҙәнеү өсөн көнөнә 45 минут тотонғандар - 12 процент, һыуыраҡ төбәктәрҙә йәшәүселәр араһында бындайҙар 8 процент ҡына. Һорау алыуҙарҙа ҡатнашыусыларҙың 13 проценты бөтөнләй косметика ҡулланмай. 9 процент респондент биҙәнмәйенсә өйҙән сыҡмауын белдергән. 1 процент - спорт менән шөғөлләнгәндә лә макияж ҡуллана.

■ Эксперттар билдәләүенсә, айына бер тапҡыр ғына түшәк-ҡаралтыларын таҙалыусылар аллергия менән йышыраҡ яфалана. Шуға ла йоҡо бүлмәһе иң аллерген бүлмә иҫәпләнә. Исемлектең икенсе урынында - ҡунаҡ бүлмәһе, унан һуң аш бүлмәһе тора. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, аллергияны тыуҙырған аллергендар - саң талпаны, хайуандарҙың йөнө, үҫәҙ тыуҙыра. Аллергияның иң беренсел билдәләре - сөскөрөү, күҙҙәр ҡысытыуы, тире бөртөп сығыуы.

■ Ҡайһы берәүҙәр ябығыу өсөн диета тотҡандан һуң ит ризыҡтарынан баш тарта. Бындай кешеләргә соя нигеҙендәге диета тоторға мөмкин, ти табиптар. Соя - тәбиғи продукт, ул насар холестерин кимәлен кәметә, майҙарҙы яндырырға булышлыҡ итә. Әммә соя продукттарын ун көндән дә оҙағыраҡ ашарға ярамай. Диета мәлендә тулыһынса тәм-томдан, икмәктән, макарондарҙан, картуфтан баш тартырға кәрәк. Йәшел сәй һәм һыу эсеү файҙалы.

■ Табиптар әйтеүенсә, ғүмер оҙайлы булһын өсөн сәләмәт йәшәү рәүеше алып барырға кәрәк. Ә бына "Forbes" журналы 100 йәштән уҙған кешеләрҙән һорау алып, уларҙың оҙаҡ йәшәү серен асыҡларға тырышҡан. Бәхетиһән, 100 йәшлек иң сәләмәт кешеләр Японияла йәшәй икән, сөнки улар йәшелсәне, барыҡты күп ашай. Йомортҡа, ит, һөт аҙыҡтары бында аҙыраҡ ҡулланыла. Мәҫәлән, АҠШ-ла йәшәүсе Дэйзи Макфадден уларҙың миҫалына эйәреп, емеш-еләк, балыҡ, йәшелсә менән туҡлана, уға ноябрь айында 101 йәш туласаҡ. Оҙаҡ йәшәүселәр көнәш итеүенсә, газлы эсемлектәр сәләмәтлеккә зыян килтерә. Унын урынына һыу, мүк еләге һуты, һөт йәки сәй эсергә кәрәк. Ҡәһүә һәм алкоголле эсемлектәр тыйыла. Шулай ҙа ҡайһы берҙә үҙенә яратҡан аҙыҡтарындыҡ ашарға рөхсәт итергә кәрәк, ти табиптар. Көн һайын нимә менәндер шөғөлләнеү шулай уҡ ғүмерҙе оҙайта. Телевизор алдында ултырыуға ҡарағанда хәрәкәт итеү күпкә яҡшыраҡ. Баҫҡыстан йәйәү менеү, урамда йөрөп килеү шулай уҡ сәләмәтлек сығанағы икән. Доктор Эрик Раков әйтеүенсә, баш мейеһе лә ял итергә тейеш түгел. Бының өсөн иң ябай ысул булып кроссвордтар сисеү тора. Берәй музыка ҡоралында уйнау ҙа мейене йәш һаҡлай. Оло кешеләр өсөн доғалар уҡыу ҙа кәрәк, был уларҙы тынысландыра һәм оҙайлы йәшәүгә булышлыҡ итә. Психиатр Гэри Кеннеди раҫлауынса, йәштәр менән аралашыу, уларҙы тәрбиәләү шулай уҡ үҙенде кәрәкле итеп тойорға мөмкинлек бирә.

ЗАМАНСА...

# ТАБИПЛЫҠҠА УҠЫП...

## үҙ ҡаламда эшкә ҡалам



**Башҡорт дәүләт медицина университеты Өфө фән һәм технологиялар университетының Сибай филиалы менән берлектә Урал аръяғының белем биреү мөмкинлектәрен киңәйтеү йөнәтенән ҙур аҙым эшләнe. Ике университет, тарихта тәүге тапҡыр, селтәрле уҡытыу формаһы тураһында килешеү төҙөнө.**

Селтәрле белем биреү программаһын тормошҡа ашырыу сиктәрендә Сибайҙа һәм уға яҡын ауылдарҙа йәшәгән Башҡорт дәүләт медицина университетының беренсе курс студенттары төркөмө Сибай институтында дөйөм белем биреү дисциплиналары буйынса белем алыу мөмкинлегенә эйә булды. Студенттар вуздың бөтә мәҙәни һәм спорт сараларында ҡатнаша ала. Уҡыу майҙансығы алыҫлашыуға ҡарамаҫтан, белем биреү процесын медицина университеты тулыһынса контролдә тота.

-Һәләтле йәштәрҙе тыуған республикабыҙҙа ҡалдырыу - төбәгебеҙҙе үҫтереүҙең төп шарты. Сибай филиалы менән берлектәге программа уңайлы белем биреү процесын тәьмин итә һәм табип һөнәрен алыу өсөн шарттар булдырып ҡына ҡалмай, юғары уҡыу йортон тамамлағандан һуң карьера үҫеше һәм шәхси тормошто яйға һалыу мөмкинлектәрен тыуҙыра. Бөгөн Урал аръяғында "Педиатрия" һәм "Дауалау эше" йүнәлештәре буйынса беренсе курс студенттары табип һөнәрен ала, - ти Рәсәй Һаулыҡ һаҡлау министрлығының БДМУ ректоры, Рәсәй Фәндәре академияһы академигы, профессор Валентин Николаевич Павлов.

- Буласаҡ табиптар әҙерләү майҙансығы булдырыу - беҙҙең өсөн ҙур хөрмәт һәм яуаплылыҡ, - тип билдәләй Сибай институты директоры Илдар Хәмитов. - Был хеҙмәттәшлек филиалыбыҙға ышаныстың юғары булыуын раҫлай һәм беҙҙең өсөн яңы мөмкинлектәр аса. Ҡалабыҙҙа уҡыған студенттарҙың бер өлөшө киләсәктә һөнәри эшмәкәрлеген Сибай һәм беҙҙең төбәктең медицина учреждениелары менән бәйләр, квалификациялы кадрҙар менән тәьмин итеү мәсьәләһен хәл итергә ярҙам итер, тип ышанабыҙ.

Уҡытыуҙа был ысулдың өҫтөнлөктәре ҙур: студенттар йә үҙ өйҙәрендә, йә филиал ятаҡтарында йәшәй һәм шуның менән Өфөгә барыу менән бәйле финанс сығымдарын һиҙелерлек кәметә, ваҡыт сарыф итмәй. Эргәлә генә урынлашҡан Сибай медицина колледжы һәм ҡаланың һаулыҡ һаҡлау учреждениелары уҡыу процесын практика менән берләштерергә ярҙам итә.

Был проект студенттарҙың айырым төркөмө өсөн генә уңайлылыҡ түгел. Ул - тотош Урал аръяғының һаулыҡ һаҡлау өлкәһе кадрҙар потенциалына мөһим инвестиция ла. Республиканың ике ҙур юғары уҡыу йортоноң берлектәге бындай союзы һаулыҡ һаҡлау һәм мәғариф өлкәһендә милли маҡсаттарға өлгәшеү өсөн уҡытыуҙа селтәр формаһын һөҙөмтәле ҡулланыуҙың сағыу миҫалы булып тора.

Сибайҙа белем алыу мөмкинлеге тураһындағы хәбәрҙе абитуриенттар - Урал аръяғында йәшәүсе буласаҡ медиктар ҙур ҡыуаныс менән ҡабул итте. "Медицина тураһында мин мәктәптә уҡығанда уҡ бер фекергә килдем, - тип һөйләй беренсе курс студенты Анастасия Логинова. - Тәүҙә Сибай медицина колледжына уҡырға индем, быйыл "Педиатрия" йүнәлеше буйынса БДМУ студенты булып киттем. Беренсе курсты тыуған ҡаламда уҡый алыуыма ҡыуанам, сөнки бында минең ғаиләм һәм дуҫтарым йәшәй. Тәүге аҙналар тулҡынландырғыс булды. Әкренләп уҡыу процесына инеп киттек. Төркөбөҙ бик шәп, ҡайһы бер иптәштәрем менән медицина колледжында уҡыған саҡтан уҡ танышмын. Юғары уҡыу йортон тамамлағандан һуң тыуған төбәгемдә эшләргә теләйем".

"Дауалау эше" йүнәлеше студенты Фәнил Иҫәнғоловтың табип һөнәрен һайлауында ғаиләһенең роле ҙур. Уның атаһы табип-рентгенолог булып эшләй, туғандары араһында табип-хирург, реанимация бүлегенең өлкән шәфҡәт туташы бар. "Уларҙың өлгөһө мине медицина юлын һайларға дәртләндерҙе, - тип һөйләй Фәнил. - Сибайҙа уҡый алыуым хаҡында хәбәрҙе ҙур шатлыҡ менән ҡабул иттем. Был - Башҡортостандың Урал аръяғында медицина белемен үҫтереүгә үҙ өлөшөн индереү ул. Сибайҙа медицинаның үҫеше күп осраҡта йәш кадрҙарҙы йәлеп итеүгә бәйле, тип уйлайым. Белгестәрҙең урында уҡытыу һәм бындағы медицина учреждениеларында практика үтеү һаулыҡ һаҡлау сифатын яңы кимәлгә күтәрергә мөмкинлек бирәсәк. Шуға күрә беҙҙә башланған селтәрле уҡытыу программаһы мөһим һәм алға табан бик ваҡытлы аҙым булып тора".

"Дауалау эше" йүнәлешенең беренсе курс студенты Наҙгөл Нафиҡова ла тыуған ҡалаһында, өйрәнелгән шарттарҙа уҡыу мөмкинлегенә тыуыуға шат: "Дәрестәр ҡыҙыҡлы үтә. Уҡытыусыларҙың үҙ эшен яратыуы, ярҙам итергә әҙер булыуы күренеп тора. Филиалдан алған тәьҫораттар ыңғай - бында сифатлы белем алырмын, тип ышанысым бар ла, әйтә алам. Уҡыуҙы тамамлағас, Урал аръяғында эшләргә теләр инем, сөнки был төбәк миңә яҡын".

"Дауалау эше" йүнәлеше студенты Айзилә Хәмитова сығышы менән Баймаҡ районының Сыңғыҙ ауылынан. "Бала саҡтан табип булырға хыялландым, - тип һөйләй ул. - Өйҙән алыҫ түгел генә ҡалала уҡый алыуыма шатмын. Филиал ятағында йәшәйәсәкмен. Диплом алғандан һуң, Баймаҡта эшләргә теләйем".

Уның курсташы Азамат Шахмөхәмәтов та, уҡып бөткәс, Баймаҡҡа ҡайтырға ниәтләй: "Уҡыуҙың тәүге ике аҙнаһы ҡыҙыҡлы үтте. Төркөмдәштәрем менән таныштым. Дөйөм ятаҡта йәшәйем. Минең тыуған йортом бында, шуға күрә, әлбиттә, мине көткән кешеләр булған ошо ерҙә эшкә ҡалырға теләйем".

**Шулай итеп, уҡытыуҙың географик сиктәрҙе юйған селтәр формаһы - Сибай институтының стратегик һайлауы ул. Был йүнәлеште үҫтереп, вуз Башҡортостан Республикаһы һәм Рәсәй Федерацияһы иҡтисадының реаль секторы өсөн юғары квалификациялы белгестәр әҙерләүсе динамик үҫешкән заманса белем биреү, ғилми үҙәк булараҡ үҙ позицияһын нығыта. Уңыштар уларға!**

Рәүилә ХӘСӘНОВА.

✓ Мауыҙҙы йәки Яҡтыкүл тип ике матур башҡорт атамаһы йөрөткән күлебеҙ "Банное"ға әйләнеп бара түгелме? Ирәкташыбыҙ Инзерские зубчатки булып ҡалыуы ихтимал.



ҠЫҪҠА ӘҢГӘМӘ

# НИ ӨСӨН МАУЫҘҘЫ ТҮГЕЛ,

## йәки Йәш журналисты борсоған һорауҙар

**Бөгөн беҙ мәғлүмәт заманында йәшәйбеҙ һәм көн дә ошо "диңгеҙҙән" үҙебеҙгә мөһим тойолған һәм файҙаһы булғандарын ғына "һөҙөп" алырға маташабыҙ. Был бер туҡтауһыҙ ағылған тулҡында башҡорт кешеһе өсөн кәрәкләһен нисек аңларға? Башҡортостан юлдаш телевидениеһының "Яңылыҡтар" тапшырыуында оҙаҡ йылдар эшләгән һәм халыҡтың иғтирамын яулаған йәш хәбәрсе Азат ҒӘЛИУЛЛИН менән әңгәмәләштек.**



**➔ Тәү сиратта үҙегеҙ менән яҡынданыраҡ танышырып үтһәгеҙ ине.**

- Мин Әбйәлил районының Әбйәлил ауылында күп балалы ғаиләлә тыуып үҫтем. Атай-әсәйем һөнәрҙәренә ғүмер буйы тоғро кешеләр быуынынан: атайым тормошон ауыл хужалығы тармағын үҫтереүгә арнаһа, әсәйем шәфҡәт туташы булды. Уларҙың ошо тырышлығын, эштәре өсөн яуаплылыҡтарын күреп үҫтек беҙ. Ә минең күңелемә ул саҡта ауылыбыҙҙағы һәр өйгә, шулай уҡ беҙгә лә, ҡосаҡ-ҡосаҡ гәзит-журнал килеүе, тиҫтерҙәрем менән почтальон апайҙарға ярҙамлашып йөрөүебеҙ бер орлоҡ һалған, бәҡтиһәң. Журналистика өлкәһенә ҡыҙыҡһыныуым шулай аңғармаҫтан барлыҡҡа килгән, тик тәүҙә мин быны аңлап етмәгәнмен: актер булырғамы, табип булырғамы, тиеп, беренсе йылда юғары уҡыу йортона уҡырға инмәй ҡалдым. Әммә ваҡытымды бушҡа уҙғармай, үҙебеҙҙең 93-сө һөнәрселек училищеһында уҡып, икенсе йылына маҡсатлы рәүештә Башҡорт дәүләт университетының башҡорт филологияһы һәм журналистика факультетына уҡырға индем. Кинйә малай булыуым да үҙенекен иткәндер, минең күҡтәрҙә беҙҙең яҡта "алдына алғанын ҡуймай", тиҙәр.

Ул осорҙа факультетта журналистарҙы өс йүнәлеш буйынса әҙерләй торғайнылар: башҡорт, рус һәм татар телендә ижад итә алған белгестәр. Мин башҡорт бүлегендә белем алдым һәм тәүге йылдарҙа милли баҫмаларҙың мөхәрририәттәре менән хеҙмәттәшлек итеп, остаздар мәктәбен үттек. Бала саҡтан яратып уҡыған "Йәншишмә" гәзитендә эшләгән Зөһрә апай Ҡотлогилдина, барлыҡ йәштәрҙе үҙе тирәләй туплаған "Шоңҡар" журналы һәм уның баш мөхәррире Азамат Юлдашбаевтың аҡыллы кәңәштәренә ҡолаҡ һала инек. Әбйәлил районының "Оҫҡон" гәзите һәм ул саҡтағы баш мөхәррир Ғәҙел Ишморатов та эшкә өйрәтте. Телевидениеға ҡарата ла ҡыҙыҡһыныу һәр саҡ булды һәм 3-сө курста уҡығаныбыҙҙа кастинг булыуы тураһында ишетеп, көсөмдө һынап ҡараным. Бөгөн республиканың төп телеканалында эшләүемә 15 йыл, Аллаға шөкөр.

**➔ Һеҙҙе башҡорт мәҙәниәте һәм сәнғәте өлкәһендәге яңылыҡтарҙы һәр ваҡыт иғтибар үҙәгендә тотҡан һәм көнүҙәк мәсьәләләрҙе күтәргән журналист булараҡ беләбеҙ. Бөгөн йәш журналистарҙы нимә борсой?**

- Билдәле башҡорт тел белгесе, профессор, төркиәтсе, ырыуҙашым Фирҙәүес Хисамитдинованың борсолоп әйткән һүҙҙәре һәр ваҡыт хәтерҙә: йылға-күлдәр, тау атамаларын һәм уларға бәйле легенда-риүәйәттәрҙе яҙып ҡалдырыу мөһим, тигәйне ул. Өлкән быуын кешеләре белгән атамаларҙың яртыһын балалары белә икән, ейән-ейәнсәрҙәре күпмеһен хәтерендә һаҡлаясаҡ? Шуға ла Мауыҙҙы йәки Яҡтыкүл тип ике матур башҡорт атамаһы йөрөткән күлебеҙ "Банное"ға әйләнеп бара түгелме? Ирәкташыбыҙ Инзерские зубчатки булып ҡалыуы ихтимал. Сөнки хәҙерге быуынға ер-һыу атамаларыбыҙҙың нескәлектәренә, уларға бәйле тарих һәм бороңғо риүәйәттәргә төшөнөп торорлоҡ форсат та, ҡыҙыҡһыныу ҙа юҡ. Шунан килә лә инде Розовые скалы, Синие скалы, Большой Шелом тигәндәре. Ә бит был урындарҙың шул тиклем матур яңғыраған башҡортса атамалары бар. Рәсмиләштерһәксе.

Тағы ла бер борсоған мәсьәлә: фольклор өлкәһендәге буталсыҡтар. Һуңғы йылдарҙа, Республика халыҡ ижады үҙәге менән берлектә тормошҡа ашырылған проекттарға баһалама комиссия ағзаһы булараҡ йыш саҡырылам. Фестиваль-конкурстарҙа ҡатнашыусыларҙың сығышына һәм дәрттәренә һоҡланып ҡарайһың да, үҙ төбәктәрендәге ауыҙ-тел ижадын ғына сағылдырмауҙарын аңлап, күңел ҡырылып ҡуя. Республикабыҙҙың һәр төбәгенең үҙенсәлеге бар бит ул, ана шул юйыла, хатта бөтөнләй сит нәмә менән "байытыла".

Шулай ҙа ыңғай күренештәрҙе лә телгә алып китмәй булмай: милли кейемебеҙгә иғтибарлыраҡ була барабыҙ һәм был ауыл мәҙәниәт йорттарына ла йоғонто яһай, сәхнә кейемдәрендә лә тотанаҡлыҡ һиҙелә башланы. Быны мин, әлбиттә, урындарҙағы мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре һәм "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһының әүҙем эшмәкәрлеге һөҙөмтәһе тип тә күрәм.

**➔ Был мәсьәләләр журналист булараҡ эшегеҙҙә лә сағылыш табамы?**

- Телевидение эфирында мин ошо һәм башҡа мәсьәләләрҙе "Яңылыҡтар" сығарылышында ғына түгел, махсус репортаждарымда ла күтәрергә тырышам. Бынан ун йыл элек сыҡҡан материалдарҙың әле булһа ла социаль селтәрҙәр буйлап "йөрөүе" ҡыуандыра. Яңылары ла халыҡты битараф ҡалдырмай. Тимәк, эшемдең бушҡа түгеллеген аңлайым. Һуңғы ваҡытта сыҡҡан махсус репортаждарға килгәндә, "Быуаттарҙы бәйләр аҫыл еп" тип исемләнгәне аҫалы башҡорт балаһына патент алыуға арналды. Унда мин аҫалы баланың әһәмиәтен, тәғәйенләнешен һәм ни өсөн рәсмиләштерелеүен аңлатып бирергә тырыштым. Шулай уҡ Мөхәмәтша Буранғоловтың "Урал батыр" эпосын яҙып алыуына быйыл 115 йыл тулыу айҡанлы әҙерләнгән махсус репортажым да йәмәғәтселекте битараф ҡалдырманы. Уның ярҙамында быйыл яңы иҫтәлеклә көн - Урал батыр эпосы көнө булдырылыуға үҙ өлөшөмдө индерә алғанмындыр, тим. Заманында башҡорт халҡының милли уйын ҡоралы - ҡурайға бәйле төшөрөлгән репортаждан һуң да, ул патентлы булғайны.

"Башҡорт операһының шанлы үткәне, ә киләсәге бармы?", "Салауат йыйынына - 20", "Башҡорт драматургияһының бөгөнгөһө", "Һанлы халыҡ ижады", "Круковский башҡорттары" тип исемләнгән эштәрем - бер циклға ингән махсус репортаждар серияһы, башҡорт мәҙәниәтен һәм сәнғәтен пропагандалауға ҡоролған. Ижади эштәремде журналист булараҡ ҡына түгел, ә РФА ӨФТҮ Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының кесе ғилми хеҙмәткәре күҙлеге аша ла үткәрҙем. Ошо хеҙмәтемдә быйыл әҙәбиәт, сәнғәт һәм архитектура өлкәһендә Шәйехзада Бабич исемендәге Дәүләт республика йәштәр премияһына тәҡдим иттем.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әңгәмәсебеҙ бер урында ҡул ҡаушырып ултырырға күнекмәгән, һәр саҡ эҙләнеүҙәр өҫтөндә булған кешеләрҙән. Йәштәр араһында шундай халҡыбыҙҙың мәҙәниәтен һәм сәнғәтен хәҙерге заман күҙлегенән баһалаған, фәнни яҡтан өйрәнгән һәм тараҡҡан шәхес булыуы ҡыуанылсы. Яңы ижади үрҙәр теләйбеҙ!**

**Камила ҒӘЛИЕВА.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Ҙур тумыртҡа, сыбар тумыртҡа**

**(Большой (пестрый) дятел)**



Беҙ күреп өйрәнгән тумыртҡа, Рәсәйҙең бөтөн төбәгендә лә бар. Барҡылдаҡтан ҙурыраҡ. Ҡанатында ҙур аҡ тап бар, арҡаһы ҡара, ҡабырғалары аҡ, ата тумыртҡаның елкәһе ҡыҙыл. Инә ҡоштоң башы ҡара, йәш ҡоштарҙыҡы - ҡыҙыл. Тауышы ҡырҡыу - "ки-ки-ки". Туҡылдатыуы 1 секунд тирәһе, был ҡыҫҡа тауыш тип иҫәпләнә, улар бер-берեһен алыштырып, өҙөлмәй килә.

Урман, урманлы дала зонаһында осрай. Беҙҙең төбәктә бар ерҙә лә бар тиерлек. Урта киңлектә февраль уртаһынан ағас соҡой башлай, дала яғында - ғинуарҙа. Апрель-майға парлашып бөтөп, оя ҡора башлайҙар. Яңы ояны соҡоуҙа икәүләп ҡатналашар, шулай ҙа был "эш" күберәк ата тумырҡа иңенә төшә. Йышыраҡ уҫаҡ, шулай уҡ ылыҫлы ағастарҙы һайлайҙар. Оя ерҙән 3-6 метр бейеклектә, диаметры - 4,5х6 сантиметр, тәрәнлеге - 25-30 сантиметр. Оя һәҙәттә 1-2 аҙнала әҙер була. Инә ҡош 6 йомортҡа һала. Сиратлап баҫалар, шулай ҙа төнгөлөккә тик ата ҡош ояға ултыра. Бәпкәләрен дә икәүләп ашаталар. 10 көнлөк бәпкәләрнеҡ тауышлана, ҡыҫҡыра башлай. 21-23 көндән ояны ташлап та китәләр.

Ағас олононан, ерҙән тотҡан төрлө бөжәктәр менән туҡлана. Ҡырмыҫҡа иләүен туҙҙыра, ағас ҡайырыһына зыян итеүсе ҡоротҡостарҙы ашай. Шулай ҙа тумыртҡа ағасты соҡоп ҡына үҙенә ризыҡ таба тигәне дөрөҫ түгел. Ҡышын ҡарағай, япраҡлы ағастар, шыршы орлоҡтарын ашай. Яҙын ҡайын һуты эсә, иғтибар итеп ҡараһағыҙ, ҡайын олонона горизонталь итеп тишелгән бәләкәй генә тишектәр күрергә мөмкин. Турғай кеүек ваҡ ҡоштарҙың ояһын туҙҙыра, йомортҡаһын, бәпкәләрен ашай. Ҡышын емтек менән дә туҡлана ала, ҡала парктарындағы тағараҡтарға килә.

Йәй аҙағында, көҙөн йәш ҡоштар йыраҡ ерҙәргә осоп китә, хатта был төр өсөн ят булған төбәктәргә лә барып сыға. Ылыҫлы ағастарҙың орлоғо аҙ булған йылда оло ҡоштар ҙа ризыҡ эҙләп китә. Ә былай оло ҡоштар ояһын ташлап осмай, шунда ҡышлай, әммә парлашып йәшәмәй, яңғыҙ көн итә. Яҙын элекке пары менән тағы ла ҡушылалар.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**

**(Дауамы бар).**



### 6 ОКТЯБРЯ
### ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.10 "Модный приговор". [0+]
10.00 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 0.55, 1.35, 2.15, 2.50, 3.05, 3.35, 4.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.50 Х/ф "Июльский дождь". [12+]
13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
15.05 "Давай поженимся!" [16+]
15.55 "Мужское / Женское". [16+]
18.45 "Большая игра". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Улица Шекспира". [16+]
0.00 "Время героев". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.10, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Анна медиум. Новые серии". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.34 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Так не бывает". [16+]**
**11.00 Новости недели (на рус.яз). [12+]**
**11.45, 16.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.00 Специальный репортаж. [12+]**
**12.15, 20.15 Квадратные метры. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 Асыш. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.45 Т/с "Ты, я и весь мир". [6+]**
**16.00 Башҡорттар. [6+]**
**16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**17.45 Формула здоровья. [12+]**
**18.00 Защитники Отечества. [12+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 О чем молчат Памятники. [12+]**
**21.00 "От фундаментальных исследований - к прикладным технологиям..." [12+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Күстәнәс. [12+]**
**23.30 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**0.00 Х/ф "Подсадной". [12+]**
**1.45 Спектакль "Кодаса или Полснохи меньшему брату". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

### 7 ОКТЯБРЯ
### ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.20, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.35 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.35, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.05 "Давай поженимся!" [16+]
15.55 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Улица Шекспира". [16+]
23.55, 0.40, 1.20, 1.55, 2.35, 3.05, 3.15, 3.50, 4.25 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.10, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Анна медиум. Новые серии". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.34 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Так не бывает". [16+]**
**11.00, 21.00 Специальный репортаж. [12+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 16.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.00 Тайм-аут. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.45 Т/с "Ты, я и весь мир". [6+]**
**16.00 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**17.00 Подкаст. Интонации. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Ради добра. [12+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 "Елкән". [6+]**
**20.45 Квадратные метры. [12+]**
**22.00 "Дуҫтар". [16+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Полет. Три дня после катастрофы". [16+]**
**1.15 Спектакль "Заблудшая". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

### 8 ОКТЯБРЯ
### СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.20, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.35, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.05 "Давай поженимся!" [16+]
15.55 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Улица Шекспира". [16+]
0.00, 0.45, 1.25, 2.00, 2.35, 3.05, 3.20, 3.55 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.10, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Анна медиум. Новые серии". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.34 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Так не бывает". [16+]**
**11.00 "Дорога к храму". [6+]**
**11.30, 16.30, 20.45 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Дознание. [16+]**
**12.15 Криминальный спектр. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 0.00 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 "Экологично". [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.45 Т/с "Ты, я и весь мир". [6+]**
**16.00 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**17.00 Креативный код. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**17.45 Квадратные метры. [12+]**
**18.00 "Какого лешего?" [12+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Деловая среда. [12+]**
**21.20 Хоккей. "Динамо" (Москва) - "Салават Юлаев". КХЛ.**
**0.30 Х/ф "Спасти нельзя оставить". [12+]**
**1.45 Спектакль "Нәркәс". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

### 9 ОКТЯБРЯ
### ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.20, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.35, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.05 "Давай поженимся!" [16+]
15.55 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Улица Шекспира". [16+]
0.00, 0.45, 1.20, 2.00, 2.35, 3.05, 3.15, 3.55, 4.30 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.10, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Анна медиум. Новые серии". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.34 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Так не бывает". [16+]**
**11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00, 17.30 Новости СВО (на рус. яз). [12+]**
**12.15, 20.15 Квадратные метры. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 Сулпылар. [6+]**
**15.45 Т/с "Ты, я и весь мир". [6+]**
**16.15 Дознание. [16+]**
**17.00 Деловая среда. [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 "Йома". [6+]**
**19.00 Телецентр.**
**19.45 "Мама". [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 Формула здоровья. [12+]**
**20.45 Монолог. Митрополит Никон. [12+]**
**22.00, 3.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Курьер из "Рая". [12+]**
**1.30 Спектакль "Тамарис". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

### 10 ОКТЯБРЯ
### ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.20, 17.00 "Большая игра". [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
13.10, 14.15 "Время покажет". [16+]
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.05 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 "Голос. Дети". Новый сезон. [0+]
23.25 Премьера. Евгений Миронов, Светлана Захарова, Вадим Репин в гала-концерте Аиды Гарифуллиной в Большом театре. [0+]
1.00, 1.35, 2.15, 2.50, 3.30, 4.10, 4.45, 5.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 Прямой эфир. [16+]
21.30 "Ну-ка, все вместе!" [12+]
23.55 "Истории Большой Страны". [12+]
0.55 Х/ф "Без тебя". [12+]
4.38 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Гала-концерт VIII Открытого городского конкурса кураистов им. Адигама Искужина. [12+]**
**11.00 "Йома". [6+]**
**11.30, 16.30, 20.45 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00, 17.30 Новости СВО (на баш. яз). [12+]**
**12.15 Криминальный спектр. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 0.00 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Торжественное собрание и праздничный концерт, посвященные Дню Республики.**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45 "И стонет Ҡурай, и ликует Ҡурай..." [12+]**
**19.00 Честно говоря. [12+]**
**19.45 История одного села. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Своих не бросаем. [12+]**
**21.20 Хоккей. "Спартак" (Москва) - "Салават Юлаев". КХЛ.**
**0.30 Х/ф "Пиры Валтасара, или ночь со Сталиным". [12+]**
**2.00 Спектакль "Что там, за холмом?" [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

### 11 ОКТЯБРЯ
### СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф Премьера. "Наталья Селезнёва. "Мне легче шутить, чем плакать". [12+]
11.05 "Вспомнить всё". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Поехали! [12+]
13.10 Д/ф "Ирина Печерникова. Мне не больно". [12+]
14.05 Х/ф "Доживем до понедельника". [12+]
16.05 Д/ф "О чем молчал Вячеслав Тихонов". [12+]
16.55 "Кто хочет стать миллионером?" [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 "Эксклюзив". [16+]
19.15 Премьера. Праздничный концерт ко Дню работника сельского хозяйства. [12+]
21.00 "Время".
21.45 "Что? Где? Когда?" Осенняя серия игр. [16+]
22.55 Х/ф "Шербурские зонтики". Катрин Денёв в легендарном фильме. Золотая пальмовая ветвь Каннского кинофестиваля". [16+]
0.40, 1.20, 2.00, 2.40, 3.15, 3.50, 4.25, 5.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00 "Доктор Мясников". [12+]
14.30, 20.50 Вести. Местное время.
14.50 "Юморина-2025". [16+]
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
21.00 Х/ф "В круге света". [16+]
0.10 Сто к одному.
0.45 Х/ф "Начнём всё сначала". [12+]
4.39 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро, Республика!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45 Торжественное собрание и праздничный концерт, посвященные Дню Республики. [12+]**
**9.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**9.45 Своих не бросаем. [12+]**
**10.00 Х/ф "Шульган-Таш". [6+]**
**11.15 Гора новостей.**
**11.30 "Зерно". [6+]**
**11.45 "Курсак". [6+]**
**12.00 "С днем рождения, Республика!" Концерт. [6+]**
**12.30 Ете егет. [12+]**
**13.00 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**15.30 Колесо времени. [12+]**
**16.30 Концерт Государственного ансамбля кураистов Республики Башкортостан. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00 Квадратные метры. [12+]**
**19.15, 5.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.15 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 "Байыҡ-2025". [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 Подкаст. Интонации. [12+]**
**22.30 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2025". [12+]**
**0.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.30 Х/ф "Зеркала". [12+]**
**3.00 Спектакль "Операция". [12+]**
**5.00 Новости недели (на баш. яз). [12+]**

### 12 ОКТЯБРЯ
### ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10 Играй, гармонь любимая! [12+]
6.55 "Часовой". [12+]
7.25 "Здоровье". [16+]
8.30 "Золотая коллекция Союзмультфильма". [0+]
9.10 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
9.30 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
10.15 "Жизнь своих". [12+]
11.05 "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Т/с "Есенин". К 130-летию со дня рождения поэта". [16+]
18.00 Вечерние новости.
19.00 Премьера. "Две звезды". Семейный подряд. [12+]
21.00 "Время".
23.00 Т/с Премьера. "Опасная близость". [18+]
0.00, 0.45, 1.25, 2.00, 2.40, 3.20, 3.50, 4.30 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.30, 1.35 Х/ф "Несмешная любовь". [12+]
7.20 "В кругу друзей".
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00 "Доктор Мясников". [12+]
13.00 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
14.30, 20.50 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 "Парад юмора". [16+]
17.50 "Песни от всей души". [12+]
20.00 Вести недели.
22.30 Москва. Кремль. Путин.
23.00 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
3.15 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45, 20.30 Автограф. [12+]**
**8.15 "Сәләм представляет". [12+]**
**8.30 Күстәнәс. [12+]**
**9.00 "Мама". [12+]**
**9.15, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**9.30 Новости (на рус. яз).**
**9.45 "Читаем с Грамотейкой". [6+]**
**10.00 "Семь чудес". [6+]**
**10.30 Тирмәкәй. [6+]**
**10.45 Городок АЮЯ. [6+]**
**11.00 Гора новостей.**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.30 "Сулпылар". [6+]**
**12.00 "Асыш". [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз).**
**13.15 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**13.45 "Урал-батыр". [6+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**14.30 Дорога к храму. [6+]**
**15.00 Честно говоря. [12+]**
**15.45 Формула здоровья. [12+]**
**16.00 Х/ф "Бабич". [12+]**
**17.45 Мосты. Михаил Чванов. [12+]**
**18.30 "Елкән". [6+]**
**21.00 Дознание. [16+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз.).**
**22.15, 5.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 "Концерт Сагидуллы Байегет". [12+]**
**1.00 Х/ф "Последняя роль Риты". [12+]**
**3.00 Спектакль "Скупой". [12+]**
**4.45 Әлләсе... [12+]**
**6.00 Новости недели (на рус.яз.). [12+]**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1447 һижри йыл.*

| Октябрь (Рәбиғел ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 6 (14) дүшәмбе | 5:44 | 7:28 | 13:30 | 16:43 | 18:40 | 20:23 |
| 7 (15) шишәмбе | 5:46 | 7:30 | 13:30 | 16:41 | 18:37 | 20:21 |
| 8 (16) шаршамбы | 5:48 | 7:32 | 13:30 | 16:38 | 18:35 | 20:18 |
| 9 (17) кесе йома | 5:50 | 7:34 | 13:30 | 16:36 | 18:32 | 20:15 |
| 10 (18) йома | 5:52 | 7:36 | 13:30 | 16:34 | 18:30 | 20:13 |
| 11 (19) шәмбе | 5:54 | 7:37 | 13:30 | 16:32 | 18:27 | 20:10 |
| 12 (20) йәкшәмбе | 5:56 | 7:39 | 13:30 | 16:30 | 18:25 | 20:08 |

*БР Мосолмандары диниә назараты сайтынан алынды.*

✓ *Мин аҙ һанлы халыҡтарҙы яратам. Мин бәләкәй һандарҙы яратам. Донъя ана шул аҙҙар менән ҡотҡарыласаҡ.*

*(Андре Жид).*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 5 ОКТЯБРЬ - БӨТӘ ДОНЪЯ УҠЫТЫУСЫЛАР КӨНӨ



**Был һөнәри байрам тураһында хәбәрҙар булмаған кеше юҡтыр һәм унын мөһимлеген дә һәр кем аңлайҙыр.**

"Тәү башлап мәктәп ишеген үрелеп асҡан көн"дән алып белем тауына үрләргә ярҙам иткән, донъяға ҡарашыбыҙҙы формалаштырған һәм маҡсаттар ҡуйырға өйрәткән кеше ул - уҡытыусы. Унын хеҙмәтенең әһәмиәте кешелек кимәлендә баһалап бөткөһөҙ.

Ә байрамдың тарихына килгәндә, 1966 йылда Парижда Уҡытыусыларҙың статусы тураһындағы махсус хөкүмәт-ара конференция нәҡ 5 октябрҙә уҙғарылған. 1994 йылдан алып иһә, бөтә донъя буйлап ошо байрамды 5 октябрҙә билдәләйҙәр. Уҡытыусыларҙы быға тиклем октябрҙең тәүге йәкшәмбеһендә тәбрикләгән Рәсәйҙә лә шулай.

Сираттағы "Башваткыс"та баш ҡалабыҙҙың алдынғы милли мәғариф учреждениелары етәкселәрен танып ҡарағыҙ.




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**38-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Ҡороҡ. Торатау. Учалы. Шашка. Алмас. Турахан. Көл. Яу. Табаҡ. Ирәмәл. Донна. Ҡор. Шыршы. Алла. Таяҡ. Рәсем. Ылҡа. Ун. Алма. Нәфис. Ирәкташ. Яҡтыкүл.

**Вертикаль буйынса:** Киндерле. Шүлгәнташ. Янғантау. Танк. Нәби. Ат. Ит. Ҡырау. Ҡаҡса. Луцк. Ата. Мораҙым. Лампа. Ҡауҙы. Шәл. Ант. Шаран. Алты. Атыш. Суҡ. Ыумас.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**3 октябрь "Ҡыҙ урлау"** (М.Кәрим, И.Ҡаҙаҡбаев), музыкаль комедия. 12+

**4 октябрь "Килен"** (З. Мусина, Ф. Ғарипов, инсц. З. Бураҡаева), драма. 16+

**5 октябрь "Ҡоҙаса"**, (Б. Бикбай, З. Исмәғилев), музыкаль комедия. 12+

**8 октябрь "Ҡыҙыл паша"** (Н.Асанбаев, А.Абушахманов). 16+

**9 октябрь "Еҙнәкәй"** (Х. Ибраһимов, И. Ҡаҙаҡбаев), музыкаль комедия. 12+

## М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**3 октябрь "Бер ғүмер етмәй икән..."** (М. Ҡунафин, Р. Хакимов), ватансылыҡ тураһында драматик поэма. 16+

**4 октябрь "Золушка"** (Г. Корнелиссон, М. Күлбаев), әкиәт.12:00. 0+

**4 октябрь "Спасите Леньку!"** (М. Икрамова, М. Күлбаев), драма. 12+

5 октябрь "Чиполлино" (Д. Родари, Р. Хәкимов), мажаралар. 12:00. 6+

**7 октябрь "Всегда один"** (А. Поярков, Э. Шрайнер), трагифарс. 16+

**8 октябрь "Звезда Героя"** (Ф. Әхмәдиев, О. Мусина), һуғыш йылдары хроникаһы. 12+

**9 октябрь "Удивительное путешествие кролика Эдварда"** (К. ДиКамилло, А. Абушахманов), мөхәббәт тураһында әкиәт. 11:00. 6+

**9 октябрь "У ковчега в восемь"** (У. Хуб, М. Күлбаев), ғаилә спектакле. 11:00. 6+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**3 октябрь "Ҡурсаҡ театры донъяһына сәйәхәт".** РФ һәм БР халыҡ артисы А.Әхмәтшиндың оҫталыҡ дәресе. 18:00. 0+

**4 октябрь "Муха Цокотуха"** (К. Чуковский). 12:00 һәм 15:00. 0+

**5 октябрь "Гадкий утенок"** (Г. Андерсен). 12:00 һәм 15:00. 0+

**9 октябрь "Красная шапочка"** (Ш. Перро әкиәте буйынса, А. Волков), 0+

## Х.Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**3 октябрь "Көҙгө Jam"** V Халыҡ-ара джаз фестивале (П. Востоков/торба, Мәскәү). 16+

**4 октябрь "Көҙгө Jam"** V Халыҡ-ара джаз фестивале (В. Кей/вокал, Кения). 16+

**6 октябрь** Силәбе өлкәһенең Дәүләт симфоник оркестры концерты. 12+

**8 октябрь** XIX Халыҡ-ара **"SAUERFEST"** орган фестиваленең "БаРОКконан РОКҡа тиклем" программаһы. 16+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**7 октябрь "Ҡоҙалар-ҡоҙасалар"** (Х.Латыпова, С. Латыпов), музыкаль комедия. 12+

**9 октябрь "Көтөлмәгәндә булған хәл"** (Э. Йәһүҙин), комедия. 16+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**5 октябрь "Приключения Позновайки в стране Узнавайка"**. Музыкаль-әҙәби лекторий. 6+

## А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**3 октябрь "Тынлыҡ өҙөлгән урын"** (З. Усманова), драма. 16+

**6 һәм 8 октябрь "Әстәғәфирулла!"** (Н.Ғәйетбай), комедия. 16+

## БР Милли музейы

**3 октябрь "Кейеҙҙең күсмә тормош мәҙәниәтендә урыны"** тематик экскурсияһы. 14:00. 6+

**3 октябрь "Төҫлө кейеҙ һуғыу алымы"** оҫталыҡ дәресе. 14:30. 6+

**3 октябрь "Ватаным хазиналары"** күргәҙмәһен асыу сиктәрендә рәссам Мира Аргунова менән осрашыу. 16:00. 6+

**4 октябрь** Тамбур сигеүе буйынса оҫталыҡ дәресе. 12:00. 6+

**4 октябрь "Ватаным хазиналары"** күргәҙмәһе сиктәрендә рәссам Мира Аргунованың лекцияһы һәм оҫталыҡ дәресе. 13:00. 12+

**4 октябрь "Туҡымаға биҙәк баҫыу"** оҫталыҡ дәресе. 15:00. 6+

**5 октябрь "Ватаным хазиналары"** күргәҙмәһе сиктәрендә рәссам Мира Аргунованың лекцияһы һәм оҫталыҡ дәресе. 13:00. 12+

**9 октябрь "Ҡурай - башҡорт халҡының күңел йыһаны"** Ҡурай көнөнә бағышланған күргәҙмәне асыу. 15:00. 0+

✔ *Коллективыбыҙ үҙе лә үсешә, яңы белгестәр менән тулыландырыла. Халыҡ бейеүҙәре ансамбле Сибай сәнғәт колледжы студенттары иҫәбенә йыл да яңырып тора, бөгөнгө көндә ун пар бейеүсебеҙ бар.*



МӘҘӘНИ МАЙҘАН

# БАҺАНЫ ТАМАШАСЫ БИРӘ

**Сибай концерт-театр берекмәһе артистарын республикабыҙҙың һәр тарафында беләләр. Бөгөнгө заман технологиялары осоронда яңғыҙыңа (һәләтең булһа, әлбиттә) популяр булыуы артыҡ ҡыйын түгелдер, ә бына берекмә кимәлендә бөтөн коллектив менән бергәләп популяр булыу бик күп көс талап итәләр. Ә сибайҙар булдыра! Хәлдәренән килә, тимәк. Әле улар яңы ижади миҙгелдәрен асыуға әҙерләнә. Берекмәнең ижад буйынса урынбаҫары Азат Арыҫлан улы НӘБИУЛЛИН менән ойошманың уңыштары, бөгөнгөһө, пландары тураһында һөйләштек:**



\- Концерт-театр берекмәһе өсөн Ижади миҙгелде асыу һәм ябыу саралары - шартлы төшөнсә. Күп тамашаларыбыҙ йәй көндәрендә беҙҙә ял итә, тип уйлай. Ысынында, йәй айҙарында ла берекмә артистары эшен дауам итә, киреһенсә, ошо мәлдә тынғыһыҙ гастролдәр осоро башлана. Әлбиттә, йәйгеһен үҙ сәхнәбеҙҙә сығыш яһамайбыҙ, әммә был, эш туҡтаны, тигәнде аңлатмай. Мәҫәлән, быйыл июнь айында Силәбе өлкәһенең Үҙәгендә һәм Шадринск ҡалаһындағы федераль кимәлдәге һабантуйҙарҙа сығыш яһаныҡ, июлдә Мәскәү һабантуйында булып ҡайттыҡ. Сентябрь башында "Башҡорт аты-2025" Халыҡ-ара фестивалендә бөтә коллектив менән ҡатнаштыҡ.

Әле ихласлап концерт-театр ижади миҙгелен рәсми рәүештә асыуға әҙерләк бара. Берекмәнең "Сулпан" балалар театры үҙенең 32-се яңы миҙгелен Урал батыр, Салауат Юлаев, Ҡаһым түрә, Миңлеғәле Шайморатов, Александр Матросов, Зоя Космодемьянская кеүек батырҙарҙың үсмер саҡтарын һүрәтләгән "Герой" спектакле менән башлап та ебәрҙе. Беҙ геройҙарыбыҙҙың батыр булып формалашҡан осорон белеп тәрбиәләнгәнбеҙ, ә был тамашала герой булып тыуымайҙар, ә үҫешәләр, тигән идея һалынған. Спектаклде ҡараған балалар, үсмерҙәр "Кем һуң ул герой?" һорауына яуап эҙләйәсәк. Салауат Юлаевтың да малай сағы булған, Ҡаһым түрә лә ҡасандыр үсмер йөшендә булған. Аҙаҡ улар үҙ заманының батырҙары булып, киләсәккә юл алғандар, беҙ, бөгөнгөләр, ана шул көсәгилешлекте дауам итергә тейешбеҙ.

14 октябрҙә Ижади миҙгелде рәсми асыу айҡанлы Ҙур концерт буласаҡ. Режиссеры - БР-ҙың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Сулпан Аскарова. Унан алда Өфөлә үтәсәк Республика көнөнә арналған концертта ҡатнашасаҡбыҙ. Ике сара бер ваҡытҡа тура килгәс, әлбиттә, миҙгелде асыу концертында республикабыҙ тураһында, башҡорт рухы тураһында һөйләйәсәкбеҙ. Концерт-театр берекмәһенең ижади миҙгеле шулай башланып китә, артабан республикабыҙҙың район үҙәктәре буйлап гастролдәр башлана. 21 октябрҙә Өфөлә үтәсәк Милли бейеү көнөндә ҡатнашҡас, артистарыбыҙ Свердловск өлкәһенә сәфәргә сыға. Был миҙгелдә гастролдәр үтәсәк майҙанды күпкә киңәйтергә уйлайбыҙ, сентябрь аҙаҡтарында Ҡаҙағстанға, октябрҙә Татарстанға юл тотабыҙ.

Бынан тыш, айырым артистарҙың ижадына бағышланған кисәләр планлаштырабыҙ. Мәҫәлән, 30 октябрҙә "Тарпан" фольклор төркөмөнөң сығыштары башлана. Был - режиссер, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Әлмира Ҡыуатованың яңы программаһы. Ноябрҙә йәш йырсыбыҙ Алина Вәхитованың ижади концерты көтөлә. Берекмәлә эшләгән һәр ижадсы үсешеү өсөн һәләтен төрлө яҡлап күрһәтергә тейеш. Берекмә етәкселеге яңы үрҙәр яуларға теләге, ниәте булған артистарға шундай мөмкинлек бирә.

Коллективыбыҙ үҙе лә үсешә, яңы белгестәр менән тулыландырыла. Беҙгә әле йәш ҡурайсы Буранбай Искужин ҡатыны Наҙгөл менән эшкә килде. Халыҡ бейеүҙәре ансамбле Сибай сәнғәт колледжы студенттары иҫәбенә йыл да яңырып тора, бөгөнгө көндә ун пар бейеүсебеҙ бар. "Сулпан" балалар театрына йәш актерҙар килә, музыканттар өҫтәлә, ғөмүмән алғанда, берекмәнең һәр бүлегенә яңы һулыш өҫтәлә. Тамашасыларыбыҙ йыл барышында йәш көстәребеҙ менән танышыр, үҙ баһаһын бирер. Бөтәгеҙҙе лә Сибай концерт-театр берекмәһе тарафынан әҙерләнгән һәр сарала көтөп ҡалабыҙ.

**Исмәгәзәм ИСМӘҒИЛЕВ әҙерләне.**

ТЕЛҺӨЙӘР

# ГӨЛДӘРҘЕҢ ТӘМЛЕ ШУЙЫ

**Тәбиғәттә шулай: яҙғы дымлы тупраҡ, муйыл сәскәләре еҫен йөйен ялан еләктәре хушбуйы алыштыра. Ә уныһына алмашҡа алтын көҙҙә баҡсаларҙа алма шуйы аңҡый. Шунан - ҡышҡы һалҡын, ҡырпаҡ ҡар шуйҙары ла көттөрмәй. Беҙ йәнә - һирәк осраған, әммә үҙенсәлеге менән иғтибарҙы тартҡан гөлдәргә тиң һүҙҙәр яланында.**

**Шуй.** Диалектта был һүҙ "еҫ" мәғәнәһендә йөрөй. Алдағы миҫалдарға йәнә әллә ни саҡлыһын өҫтәргә була. *Ел яңы сабылған бесән шуйын еткерә. Сифатлы сәйҙең шуйы ла тәмле.*

**Шуйтыҡ.** Шуйтыҡлау. Был һүҙҙәр ҙә диалекттарға хас. Шуйтыҡ, тимәк, һылтыҡ, йәғни, бер аҙ аҡһағыраҡ, сатан. *Малдын аяғы шуйтыҡ. Шуйтыҡлап атлау.*

**Шулап.** "Шулап" "улаҡ" тигән мәғәнәгә эйә. *Ямғыр һыуы шулапҡа аға. Шулапҡа таҙа һыу тултырыу.*

**Шәт.** "Шәт" "моғайын, бәлки" тигән һүҙҙәрҙе алыштыра ала. Һәм ҡайһы бер диалектта шулай һөйләйҙәр ҙә. *Алдағы көндәр аяҙ торор, шәт. Башҡортостан ҡулдәренә ҡайтҡан аҡҡоштар, шәт, килһе яҙҙа ла уларға эйәләр?*

**Шыған.** "Ботаҡһыҙ оҙон ағас" тиер урынға урманды үҙ өйөләй күргән кешеләр "шыған" тигән бер генә һүҙ ҡуллана. *Ҡарағайлыҡта шыған осраны. Шығанға үрмәләрлекме һуң?*

Кешегә ҡарата ла ҡулланыла "шыған" һүҙе. Мәғәнәһе - оҙон буйлы. *Шыған үсмер. Волейбол, баскетболда шыған егеттәр уйнай.*

**Шулай итеп, шәт, был һүҙҙәр ҙә иҫтә ҡалдырыуға әллә ни ауыр түгелдер?**

**НУРБИКӘ әҙерләне.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡикәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҠОМҒА ҺИПКӘН БЕЛЕНМӘҪ, ҡыҙға биргән күренмәҫ

Ҡомо юҡ һыу булмаҫ, ягаһы юҡ тун булмаҫ, законы юҡ йорт булмаҫ.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Мин аҙ һанлы халыҡтарҙы яратам. Мин бәләкәй һандарҙы яратам. Донъя ана шул аҙҙар менән ҡотҡарыласаҡ.

**(Андре Жид).**

Күрә алмаһалар, алмаһындар, тик ҡурҡһындар ғына.

**(Каин).**

Кәрәкмәгән нимә гел ҡыйбат тора.

**(Катон).**

Автор китаптың яртыһын ғына яҙа: ҡалған яртыһын уҡыусы үҙе тултырып ҡуя.

**(Джозеф Конрад).**

Һәр бала - рәссам. Эш балалыҡтан сыҡһа ла, уның рәссам булып ҡалыуында.

**(Пабло Пикассо).**

Ғорурлыҡ - хаталарыңдың битлеге ул.

**(Йәһүд мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Халҡы ярлы ғына йәшәгән бер дәүләткә яңы хаким килә. Халыҡтың йәшәйеш кимәлен күрһәлә, уларҙы ярлылыҡтан сығарыу тураһында түгел, тәүге көндән үҙенең матди хәлен яҡшыртыу тураһында уйлай ул һәм: "Быға тиклем дә фәҡирлектә көн күргән халыҡ был хәленә күнеп бөткәндер, бынан һуң да шулай йәшәүҙе дауам итә алыр. Мин үҙемдең ғаиләмде, балаларымды, ейән-ейәнсәрҙәремде тәьмин итергә тейешмен..." - тип ҡарар итә.**

**Шулай итеп, ул үҙенең был ниәтен тормошҡа ашырырға тотона. Ғаиләһен батшалар көнләшерлек һәр төрлө байлыҡҡа күмә. Хәҙер инде балаларының ғаиләләренә сират етә: был юлы инде уға тағы ла күберәк көс һалырға тура килә, ләкин ул барыбер үҙ ниәтенә өлгәшә, балаларының ғаиләләрен һәр батша көнләшерлек итеп байлыҡ менән тәьмин итә. Сират ейән-ейәнсәрҙәргә етә...**

**Шул саҡта был хакимдың ҡылыҡтарына Хоҙай үҙе иғтибар итә һәм уның ғәҙелһеҙ эштәренә сик ҡуйып, ғәҙеллек урынлаштырырға була. Байлыҡ кирегә аға башлаған, хаким сығынсылай һәм байлыҡ туплау эшен тағы ла нығыраҡ әүҙемләштерә. Ләкин был эшкә көсөн ныҒыраҡ түккән һайын, көсһөҙләнә бара. Үҙе лә хәлдән тая, балалары ла бөлә, ә ейән-ейәнсәрҙәр тыумай ҡала... Хакимдың бар тоҡомо ҡорой, ә ҡалған байлығын бурҙар ташып бөтә...**

**Шуның өсөн, елгә оса торған байлыҡ туплауҙан һаҡланырға кәрәк. Елдән килгән елгә килә. Был Йыһан ҡануны..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ02-01885, 30 июль 2025 йыл.

1 582218 911006 25039

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Рәсүл БАЙГИЛДИН, Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |
| **Матбуғат таратыу** | **252-39-99** |

**График буйынса ҡул ҡуйыу ваҡыты -** 2.10.2025 й. 17 сәғәт 00 мин.
**Ҡул ҡуйылды -** 2.10.2025 й. 14 сәғәт 30 мин.
**Баҫылып сыҡты -** 3.10.2025 й.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 2707
Заказ - 1847